ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

28-3 август - сентябрь (урағай - һарысай) 2021

№35 (973)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Студенттар ҡаласығы буласаҡ



5

Ырыуыбыҙ унлар - бабаларыбыҙ һундар



7

Айыҡ аҡыл йөрөтөү - хәҡиҡәтте ялғандан айыра белеү ул



8-9

Башҡорт диалектологияһының атаһы (Таһир Байышевтың тыуыуына 135 йыл тулыуға ҡарата)



12-13

Һайлауҙар 14-15

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! 2021 йылдың икенсе яртыһында ла "Киске Өфө" менән дуҫлыҡҡа тоғро ҡалғанығыҙ өсөн оло рәхмәтебеҙҙе белдерәбеҙ. Ә хәҙер 2022 йылдың беренсе яртыһы тураһында ваҡытынан алда хәстәрлек күреп, 1 сентябрҙән хаҡтар үҙгәргәнгә тиклем, ПР905 индекслы "Киске Өфө"гә 6 айға - 692 һум 94 тингә, 3 айға - 346 һум 47 тингә яҙыла алаһығыҙ. Бергә булайыҡ!***

## ӘЙТ, ТИҢӘГЕҘ...

**?**

***Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Мәғариф һәм фән министрлығына республика юғары уҡыу йорттарының стратегик үҫеше буйынса тәҡдимдәр әҙерләргә ҡушты. Тәү сиратта Башҡортостандың ҡайһы бер ҡалаларында, атап әйткәндә, Белорет һәм Күмертау ҡалаларында филиалдар асыу күҙ уңында тотола. Был тарафтарҙа юғары белем биреү учреждениелары кәрәкме, юҡмы, һеҙ нисек уйлайһығыҙ?***

***Сәйфулла ӘМИРОВ, Көйөргәҙе районы Йомағужа ауылы:*** Заман менән бергә уҡыу йорттарында белем алыу алымдары ла үҙгәрә. Беҙ үҫкәндә техникумдарға уҡырға инеү өсөн дә ҙур һынау тоторға тура килә торғайны. Эшләгән осоромда шуға иғтибар итә торғайным: урта махсус уҡыу йорто тамамлаған белгестәр эшкә һәләтлерәк, белеме төплөрәк кеүек ине. Бының сәбәбе шундалыр: элек юғары уҡыу йорттары биргән белемдең 60 процентынан ашыуы техникумдарҙа ла уҡытыла торғайны бит. Мин, мәҫәлән, Күмертау тау-механика техникумын тамамланым. Беҙгә һөнәри белем биргән предмет уҡытыусылары үҙ фәндәрен институтта уҡытҡандың ниндәй өлөшөн тәшкил иткәнен йыш иҫебеҙгә төшөрөп ала ине. Ҡайһы бер предметтарҙың 90 процентҡа еткәнен иҫләйем. Әгәр юғары уҡыу йорттарында күпселектә теория бирелһә, беҙҙә производствола оҙаҡ йылдар эшләп, ҙур тәжрибә туплаған инженерҙар уҡытты. Улар теорияны һәйбәт белеүҙәренән тыш, эш тәжрибәһе булыу менән дә айырылып торҙо.

Хәҙер табыу, етештереү тармаҡтары ғына түгел, ә бөтә техник прогресс үҙгәрҙе, уны хатта ҡыуып етеү ҙә көндән-көн ауырлаша бара һымаҡ. Яңы ғына ҡул, аҡыл көсө талап иткән тармаҡтар ҙур тиҙлектә компьютерлаша, цифрлаша. Бөгөн информатика буйынса тейешле белемең булмаһа, һинең менән һөйләшмәйҙәр ҙә. Бынан 15-20 йыл элек һәр урта һәм юғары уҡыу йорто юрист, иҡтисадсылар күпләп әҙерләй торғайны, ил сәнәғәте улар менән тиҙ арауыҡта тулды. Бөгөн IT өлкәһендә белгестәргә һорау ҙур, сөнки һәр тармаҡта йылдам цифрлаштырыу бара. Бына ошоларҙан ғына ла илебеҙҙә юғары белемле белгестәргә һорау ҡырҡа арта барыуын күрәбеҙ. Институт, университет тамамлаған программалаусылар әҙерләмәй, ә цифрлы техника менән "һин"гә һөйләшмәй тороп, сәнәғәтте алға этәреп булмаясаҡ. Шул тәғлимәттән сығып, заманса уйлаған инженерҙар уҡытыу - бөгөн вуздарҙың беренсе бурысы.

Мин ҡасандыр мәктәп, һуңынан техникум тамамлаған Күмертау ҡалаһында бөгөн хәлдәр нисек һуң? Бөгөн унда Өфө дәүләт авиация техник университеты, Ырымбур дәүләт университеты филиалдары, авиация, тау, педагогия колледждары, ике һөнәри лицей эшләй. Беҙҙе тәүге икәүһе ҡыҙыҡһындыра. Беренсеһендә ғәмәли информатика, производствоны һәм технологик процестарҙы автоматлаштырыу һәм тағы өс йүнәлештә уҡытһалар, ырымбурҙар электроэнергетика һәм электротехника, төҙөлөш һәм шуларға өҫтәп ике йүнәлештә белем бирә. Эйе, ике юғары уҡыу йорто ла заманса, кәрәкле һөнәргә уҡыта. Әгәр Өфө университеты Күмертауҙың ҡасандыр ҡала төҙөүсе предприятиеһы булған "Башкируголь" производство берекмәһе баш корпусында урынлашһа, Ырымбур филиалы, ҡайҙа буш бина табылған, шунда уҡыта. Юғары белем биргән уҡыу йорто корпустары бер урындараҡ урынлашһа, был студенттарға ла, уҡытыусыларға ла күпкә уңайлыраҡ булыр ине, моғайын. Ни әйтһәң дә, филиал филиал булып ҡаласаҡ инде. Унда уҡып йөрөгәндәргә (белем алғандарға тип әйтә алмайым), ошо хаҡта өндәшһәң, дипломда был турала яҙылмай бит, тип яуаплайҙар. Дөрөҫ, ләкин белем кимәле айырылып тороуы һиҙелә.

Шуға күрә, республика етәкселегенең Башҡортостандың көньяғында филиал түгел, ә тулы хоҡуҡлы юғары уҡыу йорто ойошторорға ҡарар итеүе көнүҙәк һәм өлгөрөп еткән ҡарар, юғиһә Күмертау һәм яҡын-тирәләге район йәштәре Ырымбурға тартыла. Был бигерәк тә юғары медицина белеме алырға теләүселәргә ҡағыла. Ырымбур, берҙән, баш ҡалабыҙҙан яҡыныраҡ булһа, икенсенән, унда уҡырға инеүе еңелерәк, тиҙәр. Эшкә лә улар шул тарафты һайлай. Ә иң мөһиме, юғары белемле белгестәр үҙ республикабыҙға ла кәрәк бит...

БАЙРАМ МЕНӘН!

# БЕЛЕМ ТУЙЫ

*Беренсе сентябрь тыуа*
*Үҙе башҡа йәм менән.*
*Туй-туй бөгөн, белем туйы,*
*Туй итәбеҙ ғәм менән.*
*Бар тәбиғәт уңыш йыя,*
*Ә мәктәптә - яҙ кеүек,*
*Ҡайҙа баҡма - гөл-сәскәләр,*
*Сәселәә тик наҙ кеүек.*
*Яҙҙағылай эш башлана,*
*Орлоғо белем-ғилем,*
*Белемле бит иленең дә*
*Ныҡлыраҡ итә билен.*
*Ил-йорт өсөн ябай түгел,*
*Оло байрам ул - ысын!*
*Һәм был көндә һәр бер кеше*
*Күпмегәләр уҡыусы...*

**Гүзәл СИТДИҠОВА.**



12+

✓ *Миҫал артынан йыраҡ йөрөргә түгел. Ана, йылдан-йыл уҡытыу алымдарын, идара итеүен камиллаштыра барған Сибай институтын алырға була. Уны нисек һанлай һәм данлай Урал аръяғы халҡы!*



БЫЛ АЙҘА...

# ГӨРЛӘП ТОРҺОН МӘКТӘПТӘР!

**Һарысай ишек ҡаға: көндәр әле йәйгесә йылы тороуға ҡарамаҫтан, иртәле-кисле көҙ һулышы тойолғандай, еләҫ; йәй буйына дымға туйына алмайынса, үләндәр ҙә күптән ҡыуарҙы, ағастар ҙа мәле етмәҫ борон япраҡ ҡоя.**

Шуныһы әрнетә: Көньяҡ Урал һырттарында шаулап ултырған урмандарыбыҙ тәүҙә ебәк күбәләгенән, аҙаҡ ҡот осҡос ут ҡазаһынан ҡороп-көйрәне, янып, һәләк булды - алтын көҙҙә улар ҡаршыламаҫ инде... Янғын ялмаған майҙандарҙа ундырышлы тупраҡ ҡатламы ла юҡҡа сыға, шуға күрә унда үлән үҫеп сығыу өсөн генә лә ике-өс йыл, ә янған ҡыуаҡтар һәм ағастар үҫенте ебәреп, ағас ҡурпылары терелеп китһен өсөн кәмендә 5-10 йыл кәрәк, ти белгестәр. Һәр хәлдә, ер хәтере - тере, ер хәтере - тереклек, бына тағы шытым бирер ошо ерҙәр, йәш урмандар шаулап үҫеп китер әле тиҙҙән, тигән өмөт кенә күңелдә йыуата.

Әмәлгә ҡалғандай, был айҙа Урмансылар байрамы **(19)** билдәләнә, ләкин быйыл байрам ҡайғыһы булмаҫтыр уларҙа. Янғын килтергән зыянды иҫәпләүҙәр, янған ерҙәрҙе йыйыштырыу, таҙартыу һәм ҡайҙа күпме ағас ултыртыу хәстәрлектәре биләйҙәр урмансы күңелен. Быйылғы ҡазала ҡоролоҡ һәм эҫе көндәрҙе генә һылтау дөрөҫ түгел. 2008-2014 йылдарҙа БР урман хужалығы министры булып эшләгән Р.Нәбиуллиндың фекеренсә, республикала урман хужалығын уйлап еткермәйенсә үҙгәртеп ҡорорға маташыуҙар ҙа ғәйепле. Иң элек урман хужалығы эшсәндәре һанын 4 меңдән 1 меңгә тиклем ҡыҫҡартыу, урманға күҙ-ҡолаҡ булырҙай лесниктарҙың етешмәүе лә сәбәпсе бында. Ошондай уҡ ҡоро килгән 2010 йылда ла янғындар сыҡты, ләкин былай таралманы, сөнки янғын һүндереү эшенә махсус өйрәтелгән лесниктар отрядтарын ут сыҡҡан ерҙәргә самолетта килтереп төшөрөү дөрөҫ һәм оператив ҡарарҙар ҡабул итеп, ут сығанаҡтарын тиҙ арала һүндерергә булышлыҡ итте, тине элекке министр. Быйылғы янғын һабаҡтары ойоштороу һәм кадрҙар мәсьәләһен ҡайтанан ҡарарға мәжбүр итмәҫме икән ни, тигән һорау тыуҙыра республика Урман хужалығы ведомствоһына ҡарата. Ғөмүмән, Көньяҡ Урал райондарында булған был һәләкәт һабаҡтарын өйрәнергә, һәр деталенә тиклем ентекләп төшөнөргә, киләсәктә хаталарҙы ҡабатламаҫҡа, оператив саралар күрә белергә, көтөлмәгән хәлдәргә һәр саҡ әҙер булырға оҙаҡ өйрәтәсәк әле ул беҙҙе...



Көҙ килә - ниндәй булыр ул? Һарысай - көн менән төндө тигеҙләүсе ай. Быйыл көҙгө көн тигеҙлеге **22 сентябрь** Мәскәү ваҡыты менән 22 сәғәт 21 минутта көтөлә. Был көндән һуң төн әкренләп оҙая, көн ҡыҫҡара бара. Ҡайһы берәүҙәр был күренеште ҡышҡы һәм йәйге ҡояш торошо, йәғни иң оҙон төн (22 декабрь) һәм иң оҙон көн (22 июнь) менән бутай. Көн менән төн тигеҙләшкән был датаға беҙ бөтөнләй иғтибар итмәһәк тә, астрологтар, күрәҙәлек һәм магия менән шөғөлләнеүселәр уның ҡеүәтле энергетик тәьҫире хаҡында яҡшы белә, шуға ла тап ошо көндә мөһим эштәрҙе башҡарырға кәңәш итә, ритуалдар, сеанстар үткәрә. Славян халҡында ул элегерәк уңыш байрамы булараҡ байрам ителгән, ә друидтар иһә был көн тәбиғәткә сығып, тауҙарға күтәрелгән һәм ҡояштың иң ҡеүәтле мәленән файҙаланып, уның нурҙарын һеңдереп ҡалырға тырышҡан. Көҙгө тигеҙлек көнөн япондар ҙа бик ихтирам итә һәм киң билдәләй. Был дата уларҙа ял көнө тип иғлан ителгән.

Көҙ килә - ниндәй булыр ул? Имен килһен, тажзәхмәтһеҙ килһен. Илаһ ут ҡазаһы менән һыналы бит инде халыҡты, исмаһам, пандемия урап үтһен ине беҙҙе. Һарысайҙың тәүге көнө - Белем байрамында **(1)** балаларыбыҙ ҙа һау-сәләмәт, теүәл булһын, элеккесә шау-гөр килеп, биштәрҙәрен артмаҡлап, мәктәптәргә килеп тулһын, тирә-йүн уларҙың шат тауыштарына, ҡыңғырау сыңлауына күмелһен...

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров быйылғы август кәңәшмәһендә уҡыусыларҙың һәм студенттарҙың уҡыуҙы 1 сентябрь уҡыу йорттарына килеп, парталар артында ҡаршылаясаҡтарын бел-

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Мәғариф һәм фән министрлығына республика юғары уҡыу йорттарының стратегик үҫеше буйынса тәкдимдәр әҙерләргә ҡушты. Тәү сиратта Башҡортостандың ҡайһы бер ҡалаларында, атап әйткәндә, Белорет һәм Күмертау ҡалаларында филиалдар асыу күҙ уңында тотола. Был тарафтарҙа юғары белем биреү учреждениелары кәрәкме, юҡмы, һеҙ нисек уйлайһығыҙ?***

***Мәрйәм БАЙРАМҒӘЛИНА, Мәләүез ҡалаһы:*** Республика Башлығы Радий Хәбировтың Башҡортостандың көньяғы йәштәре белем алһын өсөн Күмертауҙа юғары уҡыу йорто булдырыу тәкдимен тулыһынса хуплайым. Быны Мәләүез ҡалаһында оҙаҡ йылдар йәшәп, эшләп, ике бала үҫтергән әсә булараҡ аңлатмаҡсымын.

Өфө финанс техникумын тамамлағас, мине был яҡтарға йүнәлтмә буйынса эшкә ебәрҙеләр. Ике йыл эшләп, тәжрибә туплағас, тыуған яҡтарыма ҡайтып китермен, тип уйлағайным, ләкин яҙмыштың үҙ планы булып сыҡты. Тормошҡа сығып, Мәләүездә ҡалып, был яҡтарҙы үҙ итергә тура килде.

Шәкәр заводында финанс өлкәһендә эшләп йөрөгәндә предприятие директорын алмаштырҙылар. Бер ярты йыл эшләгәс, ул завод биләмәһендә осратты ла: "Һылыу, юғары белем алырға кәрәк, һеҙҙе юғарыраҡ вазифаға күсерергә ине, сөнки беҙҙең милләттәштәр араһында предприятиебыҙҙа етәксе урындар биләүселәр юҡ кимәлендә",- тине. Элек балалар бәләкәй саҡта уйлап та ҡарағаным булмаған был тәкдим мине ҡыҙыҡһындырҙы. Ҡалабыҙҙа Мәскәү дәүләт технологиялар һәм идара итеү институтының уҡытыу-консультация пункты эшләп килә ине. Барып белештем дә, документтарымды тапшырҙым. Һуңғы ике курс имтихандарын Мәскәүгә барып бирҙем. Дипломды ла унда яҡлап ҡайттым. Күп тә үтмәй, Мәләүездә институттың, хәҙер инде университеттың, филиалы астылар. Уның көндөҙгө бүлексәләре лә бар, ләкин улар ҙа түләүле. Ата-әсәләргә балаларын сит яҡтарға ебәреп уҡытыуға ҡарағанда бында аҡса түләп уҡытыу отошлораҡ та, сөнки бала һәр көн өйҙә, күҙ алдында.

Был ҙур ҡала метроларында көпә-көндөҙ, бер кемдән дә йәшермәй, диплом һатҡан осор ине. Юғары белемең бармы-юҡмы, был бер кемде лә ҡыҙыҡһындырмай, иң мөһиме, дипломың булһын. Минә лә заманында ундай "белгестәр" менән эшләргә тура килде. Һатып алған дипломдары уларҙы башҡаларға өҫтән аҫҡа көлөп ҡарарға мәжбүр итә кеүек ине. Хәҙер тормош та, дипломдарға ҡараш та үҙгәрҙе. Кеҫәндә диплом ятыуы ғына һине белемле итмәй. Белем генә бөгөн аҙ, ә уны дөрөҫ ҡулланыу мөһим. Бындай белемде тик тәжрибәле профессор-уҡытыусылар составы, тейешле матди-техник базаһы булған төп юғары уҡыу йорттары ғына бирә. Күмертауҙа урындағы һәм Көйөргәҙе, Мәләүез, Күгәрсен, Федоровка райондары йәштәре өсөн көслө юғары уҡыу йорто булһа, быннан бөтәһе лә тик отасаҡ ҡына. Миҫал артынан йыраҡ йөрөргә түгел. Ана, йылдан-йыл уҡытыу алымдарын, идара итеүен камиллаштыра барған Сибай институтын алырға була. Уны нисек һанлай һәм данлай Урал арьяғы халҡы! Ә беҙҙең төбәктә яңы уҡыу йортон формалаштырыуҙа Күмертау авиация, Мәләүездең эшкәртеүсе предприятиеларының юғары белемле белгестәргә ҡытлығын иҫәпкә алып, урындағы университеттарҙың филиалдары базаһын ҡулланыу маҡсатҡа ярашлы буласаҡ.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓1 сентябрь яңы уҡыу йылы ҡәҙимгө йөрөп уҡыу форматында башланасаҡ һәм бөтөн уҡыусылар, студенттар мәктәптәргә, урта махсус һәм юғары белем биреү уҡыу йорттарына киләсәк. Был турала Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров белдерҙе. "Уҡыу процесын дистанцион форматҡа күсереү өсөн әлегә беҙгә бер ниндәй ҙә нигеҙ юҡ, ләкин коронавирус таралыуын иҫәпкә алып, бөтөн нәмәгә лә әҙер булыу кәрәк. Быйыл беренсе класҡа 58 мең бала килә, уларҙы тантаналы ҡаршыларға кәрәк" ,- тине Радий Хәбиров.

✓Өфө амфитеатрында IX "Йәш һөнәрмәндәр" (WorldSkills Russia) 2021 милли чемпионаты финалын асыу тантанаһы уҙҙы. Унда Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров һәм "Йәш һөнәрмәндәр" союзының генераль директоры Роберт Уразов ҡатнашты. "Мин чемпионатта ҡатнашыуҙан тыш, илебеҙҙең ниндәй матур, Өфөнөң ниндәй шәп ҡала икәнен, бында ниндәй шәп кешеләр йәшәгәнен күреүегеҙҙе теләр инем. Алға, WorldSkills!", - тине Роберт Уразов. Рәсми флагты күтәргәндән һуң Радий Хәбиров WorldSkills Russia-2021 милли чемпионаты финалының асыҡ булыуын иғлан итте.

✓Рәсәй Президенты Владимир Путин "Берҙәм Рәсәй"ҙән Дәүләт Думаһы депутаттарын, хөкүмәтте тиҙ арала һәм артыҡ бюрократияһыҙ хаҡлы ялдағыларға бер тапҡыр бирелә торған пособие түләүҙе ойошторорға ҡушты. 10 мең һум күләмендәге аҡса барлыҡ пенсионерҙарға - эшләп йөрөгәндәргә лә, эшләмәгәндәргә лә, Оборона Министрлығы, Эске эштәр министрлығы һәм башҡа ведомстволарҙан пенсия алған хәрби пенсионерҙарға ла түләнә, тип иҫкә төшөрҙө Президент.

✓Республика Башлығы Радий Хәбиров Мәғариф һәм фән министрлығына ҡайһы бер балаларҙы ваҡытлыса онлайн-уҡыуға күсереү мөмкинлеген ҡарарға ҡушты. "Ҡағиҙә булараҡ, балалар коронавирусты еңелерәк кисерә. Тәрлө сирҙәрҙән яфаланған балалар ауырый. Был, тәү сиратта, диабет, һимеҙлек һәм башҡалар. Шуға күрә ошо балаларҙы ҡурсалау механизмдарын әҙерләргә кәрәк. 1 сентябрҙән 20-һенә тиклем коронавирус менән сирләү осрактарының артыуын көтәбеҙ", - тине Радий Хәбиров.

**✓ Унның буйынса хәҙер уҡыусыларҙы алған белемдәрен ғәмәлдә ҡуллана белеүгә өйрәтеүгә баҫым яһаласаҡ. Башланғыс кластарҙан алып балалар финанс грамоталылығына өйрәнәсәк.**



дерҙе, юғиһә, ЛДПР тәҡдиме менән бәйле яңы уҡыу йылын 1 октябрҙән башлау ихтималлығы хаҡында имеш-мимештәр ҙә булып алғайны. Ә шулай ҙа эпидемиологик торошҡа ҡарап, хәлдәрҙең үҙгәреп китеү ихтималлығына әҙер булыу кәрәк, тине республика етәксеһе. Әйткәндәй, был айҙа мәктәптәрҙә урынлашҡан һайлау участкаларында РФ Дәүләт Думаһына һайлауҙар **(17-19)** булып үтәсәк. Ошо сәбәпле мәктәптәргә киләсәк һайлаусыларҙы уҡыусы балалар мөхитенән айырыу юлдары хәл ителәсәк, тип белдерәләр Рәсәй Үҙәк һайлау комиссияһынан.

Гәзитебеҙҙә хәбәр ителеүенсә, быйыл белем биреүҙең яңы Федераль дәүләт стандарттары ҡабул ителде. Унның буйынса хәҙер уҡыусыларҙы алған белемдәрен ғәмәлдә ҡуллана белеүгә өйрәтеүгә баҫым яһаласаҡ. Башланғыс кластарҙан алып балалар финанс грамоталылығына өйрәнәсәк, тик ул айырым предмет булып, уҡыусыларға өҫтәмә көсөргәнеш килтермәйәсәк, ә "Математика" һәм "Тирә-яҡ мөхит" дәрестәре сиктәрендә алып барыласаҡ. Балалар ғаилә бюджетының ни икәнен, уның хеҙмәт эшмәкәрлегенә һәм илдәге иҡтисади хәлгә бәйле булыуын төшөнәсәк. Ә инде 5-се кластан алып финанс буйынса ҡатмарлыраҡ хәлдәр, мәҫәлән, аҡсаны белеп тотоноу һәм уны төрлө мошенниктарҙан һаҡлау саралары, шулай уҡ аҡса тотоноу буйынса башҡа мәсьәләләр "Йәмғиәтте өйрәнеү", "Информатика", "География" дәрестәрендә өйрәнеләсәк һәм был маҡсаттарҙа дәрес үткәреү өсөн төрлө ойошмаларҙан белгестәр саҡырыласаҡ. Бынан тыш, ике яңы дәрес индереү ҡарала:

**Шәхси үҫеш -** йәшәйешебеҙҙә булып торған төрлө хәлдәрҙә, юлда, көнкүрештә, шулай уҡ ҡайһы бер хәүефле урындарҙа үҙенде тотоу, сәләмәт тормош рәүешенә өйрәнеү, дөрөҫ туҡланыу, енси тәрбиә һәм башҡалар.

**Йәмғиәткә файҙалы булыу -** уҡыусыла әхлаҡ-мәҙәнилек сифаттары тәрбиәләү, аралашыу мәҙәниәтенә эйә булыу һәм йәмғиәт алдында яуаплылыҡҡа, илһөйәрлеккә өйрәнеү, ирекмәнлек эшмәкәрлеген үҙләштереү һ.б. Күрәһең, был дәрестәр өсөн сәғәттәр ҙә бүленә, мәҫәлән, ике сит тел өйрәнеү дәресенең береһе программанан алып ташланасаҡ. Яңы стандарттар шулай уҡ мәктәптә тәрбиә эшенә йөҙ менән боролоуҙы талап итәсәк.

Тик шуныһы үкенесле: уҡытыусыларға көсөргәнеш тыуҙырыусы ҡағыҙ-отчет эштәре тураһында ләм-мим. Социаль селтәрҙәрҙә әле үк яңы уҡыу йылына эш күләме менән бәйле уҡытыусылар тарафынан ризаһыҙлыҡтар белдерелә башланы. "Бынан алдағы ФГОС ҡабул ителгәс, отпуск ваҡытым - августы тулыһынса рус теле һәм әҙәбиәтенән яңы программа төҙөп үткәрҙем, хатта төндәрен дә ултырырға тура килгәйне. Хәҙер тағы шул уҡ хәл ҡабатланырмы?"- тип яҙа уҡытыусы Нина Сидоренко. "Ни өсөн берҙәм эш программалары министрлыҡта төҙөлмәй? Беҙ - уҡытыусылар, ә фәнни-методик белгестәр түгел. Отчет, программалар, пландар төҙөү һәм башҡа ҡағыҙ эштәре беҙҙең хеҙмәт бурысына инмәй." "Уҡытыусының ялы ла, ғаиләһе өсөн ваҡыты ла юҡ, ә эш хаҡы артмай." Бындай белдереүҙәрҙән шул аңлашыла: мәғариф чиновниктарынан һәм бюрократтарҙан уҡытыусыларҙы яҡлаусы ойошма кәрәк, ә мәғариф хеҙмәткәрҙәре профсоюздары үҙ бурыстарын үтәй алмай, был ойошмалар бөгөн юғары власть органдары менән килешеүсән уңайлы позиция һайланымы, әллә статусын юғалтып, үҙҙәре бюрократҡа әүерелеп бөттөмө - белмәҫһең...

Был айҙағы күренекле даталар: Икенсе бөтә донъя һуғышы тамамланған көн **(2 сентябрь, 1945)**, Рәсәй гвардияһы **(2)**, Терроризм менән көрәштә теләктәшлек **(3)**, Нефть һәм газ сәнәғәте эшсәндәре, Халыҡ-ара мәрхәмәтлек **(5)** көндәре, Рәсәйҙең хәрби дан көнө. М.И.Кутузов етәкселегендәге рус армияһының француз армияһына ҡаршы һуғышында Бородино яуы **(8 сентябрь, 1812)**, Ленинградты һаҡлаусыларҙы иҫкә алыу **(8 сентябрь, 1941)**, Финансист, Халыҡ-ара грамотаһыҙлыҡты бөтөрөү, Журналистарҙың халыҡ-ара теләктәшлек **(8)** көндәре, Бөтөн донъя матурлыҡ **(9)**, Башҡортостан халыҡтарының милли кейемдәре **(10)** көндәре, Бөтөн донъя тәүге медицина ярҙамы күрһәтеү **(11)**, Танкист, Бөтөн донъя торналар, Бөтөн донъя фашизм ҡорбандары **(12)** көндәре, Программист **(13)**, Бөтөн донъя санитар хеҙмәт, Халыҡ-ара демократия **(15)** көндәре, Халыҡ-ара тыныслыҡ **(21)**, Бөтөн донъя автомобилһеҙ **(22)**, Машина эшләүселәр **(26)**, Тәрбиәсе һәм мәктәпкәсә учреждениелар хеҙмәткәрҙәре, Туризм **(27)** көндәре, Бөтөн донъя йөрәк **(29)**, Рәсәйҙә Интернет, Халыҡ-ара тәржемәсе **(30)** көндәре.

**Һарысайҙа тыуғандар:**

**1 -** Башҡортостандың халыҡ шағиры, йәмәғәт эшмәкәре, С.Юлаев исемендәге БР дәүләт премияһы лауреаты, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре **Ҡәҙим Аралбаевҡа - 80 йәш** (1941).

**9 -** ғалим, химия фәндәре докторы, профессор, БР Фәндәр академияһы вице-президенты, Рәсәйҙең атҡаҙанған фән һәм техника хеҙмәткәре, Башҡортостандың атҡаҙанған фән эшмәкәре **Райхана Ҡунаҡоваға - 75 йәш** (1946).

**15 -** иҡтисад фәндәре докторы, профессор, Рәсәй тәбиғи фәндәр академияһы мөхбир-ағзаһы, БАССР-ҙың атҡаҙанған фән эшмәкәре, Салауат Юлаев ордены кавалеры **Мазһар Иҫәнбаевҡа - 85 йәш** (1936).

**-** журналист, публицист, 1990-1996 йылдарҙа "Известия Башкортостана" гәзитенең баш мөхәррире, Ш.Хоҙайбирҙин исемендәге Хөкүмәт премияһы лауреаты, Салауат Юлаев ордены кавалеры **Марсель Ҡотлоғәлләмовҡа - 80 йәш** (1941).

**-** ғалим, дәүләт эшмәкәре, филология фәндәре кандидаты, Рәсәйҙең почетлы мәғариф хеҙмәткәре, Башҡортостандың атҡаҙанған халыҡ мәғарифы хеҙмәткәре **Миҙхәт Мәмбәтовҡа - 80 йәш** (1941).

**17 -** тарихсы, тарих фәндәре докторы, БДУ-ның почетлы профессоры, Башҡортостандың атҡаҙанған фән эшмәкәре **Нәзир Ҡолбахтинға - 80 йәш** (1941).

**21 -** ҡурайсы-музыкант, БАССР-ҙың халыҡ артисы **Йомабай Иҫәнбаевтың тыуыуына - 130 йыл** (1891-1943).

**-** Хәйбулла районы Аҡъяр үҙәк район дауаханаһы табибы, терапевт, Башҡортостандың атҡаҙанған табибы, "Почет билдәһе" ордены кавалеры **Ғәли Бохарбаевҡа - 75 йәш** (1946).

**22 -** ғалим, тәбиғи фәндәр белгесе, географ, сәйәхәтсе; ботаника, геология буйынса, шулай уҡ башҡорттарҙың һәм Уралда йәшәүсе башҡа халыҡтарҙың тарихы һәм этнографияһы буйынса хеҙмәттәр авторы **Петр Палластың тыуыуына - 280 йыл** (1741-1811).

**25 -** ҡурайсы-музыкант, БР Халыҡ инструменттары милли оркестрына нигеҙ һалыусы, Рәсәйҙең - атҡаҙанған, Башҡортостандың халыҡ артисы **Рәмил Ғәйзуллинға - 60 йәш** (1961).

**26 -** рәссам, "Сыңғыҙхан" ижади берекмә етәксеһе, Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың атҡаҙанған рәссамы **Вәсил Ханнановҡа - 65 йәш** (1956).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

**?**

***Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Мәғариф һәм фән министрлығына республика юғары уҡыу йорттарының стратегик үҫеше буйынса тәҡдимдәр әҙерләргә ҡушты. Тәү сиратта Башҡортостандың ҡайһы бер ҡалаларында, атап әйткәндә, Белорет һәм Күмертау ҡалаларында филиалдар асыу күҙ уңында тотола. Был тарафтарҙа юғары белем биреү учреждениелары кәрәкме, юҡмы, һеҙ нисек уйлайһығыҙ?***

***Лира СИБӘҒӘТОВА, Белорет ҡалаһы, күп балалы әсә:*** Республика педагогтары кәңәшмәһендә төбәк етәксеһенең Белоретта юғары уҡыу йорто филиалын асыу тураһында тәҡдимен ишеткәс, бик ҡыуандым. Бала тәрбиәләгән әсәйҙәрҙең күптәнге хыялы ул. Урта һөнәри белем биреү учреждениелары юҡ түгел, оҙаҡ йылдар эшләп, хеҙмәт баҙарына бик күп быуын эшсе кадрҙар сығарған абруйлы колледждар бар. Әммә хәҙерге йәштәрҙең күбеһе 11-се класты тамамлағас, юғары уҡыу йортона инергә теләй бит.

Мәғлүм булыуынса, Белорет районы - Башҡортостанда иң ҙуры. Ҡалала ғына 65 меңгә яҡын кеше йәшәй. Йәштәр күп, әммә республика вуздары филиалдары булмауы бик ныҡ бәкәлгә һуға. Был проблема менән балалар бер-бер артлы мәктәпкә барғас та осраштыҡ. Быйыл өлкән улыбыҙ баш ҡаланың юғары уҡыу йорттарының береһен тамамланы ла, беҙҙең бөтәбеҙҙе лә ғәжәпләндереп, тыуған ҡалаһына ҡайтмайынса, үҙе практика үткән ойошмала эшкә торҙо ла ҡалды. Дүрт күҙ менән көтөп торған өләсәһе менән олатаһының да күңеле төштө. "Ҡартайғас, ҡайтырмын, әле йәшһегеҙ бит әле", - тигән була ла ул. Өйләнеп, Өфөлә төпләнһә, әллә инде. Туғандар бер тирәлә булғас, шул тиклем рәхәт, эштә лә, ашта ла бергәбеҙ. Шуға балаларҙы ла ситкә ебәрмәҫкә ине, тигәйнек. Ошо уҡ университет филиалы үҙебеҙҙә булһа, сит тарафҡа йөрөп уҡымаҫ ине. Уныһынан да мөһимерәге - үҙебеҙҙә тороп ҡалыр ине. Уҡып бөткәс ҡайтһа, тиеп, уға фатир ҙа йүнләп ҡуйғайныҡ. Ғаиләлә берҙән-бер ул булғас, үҙебеҙҙең янда ҡалдырғы килгәйне шул. Тик беҙ уйлағанса килеп сыҡманы. Хәҙер улыбыҙ Өфөлә ҡуртымға алған фатирҙа йәшәй, бындағыһы буш тора, ҡыҙҙар - мәктәп уҡыусылары. Һатып, баш ҡаланан фатир алыр ине, ипотекаһы түләнеп бөтмәгән.

Билдәле булыуынса, Белорет - Башҡортостандың үҙенсәлекле һәм гүзәл тәбиғәтле төбәге. Бында туристарҙы йәлеп итеү урындары күп. Тау йылғалары буйлап һалда, кәмәлә ағып төшөргә, Уралтау һырттарына менергә, тау саңғыһында шыуырға мөмкин. Шуға күрә урында ошо тәңгәлдә белгестәр әҙерләгән һөнәри белем биреү учреждениелары ла булһа, бик яҡшы булыр ине.

Ғөмүмән, республика етәксеһенең төрлө төбәктәр өсөн кадрҙар әҙерләү мәсьәләһенә иғтибарҙы йүнәлтеүе лә бик яҡшы. Ул Урал аръяғындағы медицина кадрҙарына ҡытлыҡты бөтөрөү өсөн Сибай медколледжына ингән студенттар автоматик рәүештә Башҡорт дәүләт университетының Сибай филиалы биология факультетының беренсе курс студенттары итеп алынасаҡ, тип белдерҙе. Ә өсөнсө курстан Башҡорт дәүләт медицина университетына күсә ала. Бала тәрбиәләгән атаәсә өсөн был да бик яҡшы яңылыҡ, тип уйлайым.

**Лена АБДРАХМАНОВА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Оператив штабтың 27 августа мәғлүмәттәре буйынса, Башҡортостанда коронавирустан 15 үлем осрағы теркәлгән. Йәмғеһе 1058 сирленең, шул иҫәптән 60 йәштән өлкәнерәк 846 кешенең ғүмере өҙөлгән. Бер тәүлектә коронавирус инфекцияһын йоҡтороуҙың 301 осрағы асыҡланған. Бөтә осорҙа уларҙың һаны 55 841-гә еткән. Әлеге ваҡытта 706 пациент, шул иҫәптән 60 йәштән өлкәнерәк 453 кеше стационарҙа дауалана. Уларҙың 58-енең хәле ауыр, икәүһе үпкәне яһалма елләтеү аппаратына тоташтырылған. Бер тәүлектә 130 дауахананан тыш пневмония осрағы теркәлгән.

✓Балаларҙы һәм мәктәп педагогтарын коронавирустан вакцина эшләтеүгә мәжбүр итеүҙәр булмаясаҡ, тине Рәсәй мәғариф министрлығы башлығы Сергей Кравцов балалар омбудсмены Анна Кузнецова менән осрашыу ваҡытында. Коронавирус инфекцияһына ҡаршы балалар һәм үҫмерҙәр өсөн "Спутник V" вакцинаһы 2021 йылдың 15 сентябренә теркәлергә тейеш, тип хәбәр итте Н.Ф.Гамалея исемендәге Үҙәк директоры Александр Гинцбург.

✓Һаулыҡ һаҡлау министрлығында коронавирустан вакцинация тураһында ялған сертификаттан файҙаланыуҙың нимә менән янауын һөйләнеләр. Министр урынбаҫары Ирина Кононова һүҙҙәренсә, ялған сертификат һатып алған, һаҡлаған, ҡулланыу йәки һатыу маҡсатында ташыған өсөн бер йылға иректән мәхрүм итеү янай. Ысын сертификатты медицина ойошмаһында прививканан һуң йә иһә Дәүләт хеҙмәттәре сайтындағы шәхси кабинетта алырға мөмкин. Дәүләт хеҙмәттәре сайтында сертификат рус һәм инглиз телдәрендә тултырыла.

✓Башҡортостан спортсылары Рәсәй йыйылма командаһы составында 64 шаҡмаҡлы таҡтала шашка буйынса донъя чемпионаты призерҙары булды. Елена Мильшина, Айгөл Иҙрисова һәм Тамара Танһыҡҡужина "блиц" дисциплинаһында миҙалдар яуланы. Шашканың ике төрөндә уңышлы уйнаған Александр Георгиевтың һәм Муродулло Амриллаевтың еңеүе Рәсәй командаһына блицта - алтын, ә рапидта бронза миҙал килтерҙе. Дүрт дисциплинаның өсәүһендә Рәсәй командалары алтын миҙалдарға лайыҡ булды. Чемпионатта алты илдән 17 команда ҡатнашты.

ҠЫҪҠАСА

# ҒӘҘӘТТӘН ТЫШ...

✓ **Тотош республикала ғәҙәттән тыш хәл режимы иғлан ителә, тейешле документтар әҙер, тип белдерҙе бөгөн Башҡортостан вице-премьеры - ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов республика Хөкүмәтендә уҙған оператив кәңәшмәлә.** Уның һүҙҙәренсә, көндәрҙең аномаль эҫе тороуы сәбәпле, хәл 2010 йылға ҡарағанда мөшкөләрәк. Яҡынса иҫәпләүҙәр буйынса, 616 мең гектар майҙанда 624 хужалыҡ королоктан зыян күргән, шул иҫәптән 332 мең гектар юҡҡа сыҡҡан. "Урып-йыйыу эштәре 16-18 көнгә алдараҡ башланғайны. Бөгөнгә республикала 1 миллион 266 гектар майҙанда (82 процент) бөртөклө һәм бөртөклө-ҡуҙаҡлы культуралар һуғылған, 1 миллион 727 мең тонна һуғып алынған, 339 мең гектарҙа ужым ашлыҡ йыйылған, 548 мең тонна һуғылған, уныш гектарынан 16,2 центнер, шул иҫәптән ужым бойҙайының уртаса унышы - 17,5 центнер; ужым арышы уңышы - гектарынан 15 центнер. Республика аграрийҙары аҙна аҙағына тиклем бөртөклөләрҙе йыйыуҙы тамамларға ниәтләй", - тип билдәләне Илшат Фәзрахманов.

✓ **Быйыл мартта һуғыш балалары тураһында Башҡортостан законы сыҡҡайны, уға ярашлы, 1927 йылдың 22 июненән 1945 йылдың 3 сентябре арауығында тыуып, республика территорияһында даими йәшәгәндәргә "Һуғыш балалары" статусы бирелә.** БР Хөкүмәте ҡарарына ярашлы, уларға таныҡлыҡтар тапшырыла һәм был категория медицина хеҙмәтен, шифахана учреждениеларына путевкаларҙы сираттан тыш һәм бер тапҡыр бирелгән түләү алырға хоҡуҡлы. БР Башлығы Указы буйынса, быйыл был түләү күләме 1000 һум тәшкил итә һәм ул август-сентябрҙә таратыласаҡ. Түләүҙе алыу өсөн ғариза яҙырға йәки ниндәйҙер ҡағыҙ мәшәҡәттәре менән йөрөргә кәрәкмәй. Киләһе йыл сумма күләме артыуы ихтимал. Бөгөн республикала 189,5 мең "һуғыш балаһы" йәшәй, уларҙың 13 мең самаһы бер ниндәй льготаға ла эйә түгел һәм социаль ярҙам сараһы менән файҙаланмай.

✓ **Башҡортостандың Дәүләт Йыйылышында атмосфера һауаһын һаҡлау өлкәһендә ҡануниәтте камиллаштырыу буйынса эшсе төркөм булдырыласаҡ.** Унда депутаттар корпусынан вәкилдәр, ғалимдар, йәмәғәтселәр инәсәк. Эшсе төркөмгә экологияға ҡағылышы булған предприятие вәкилдәре лә саҡырыласаҡ. Эш һөҙөмтәһе булып, законға үҙгәрештәр индереү буйынса тәҡдимдәр әҙерләү торасаҡ. Был бурысты көҙгә сессия осоронда атҡарып сығыу планлаштырыла. Кәрәк булһа, уны Дәүләт Думаһына индереү өсөн закон инициативаһы әҙерләнәсәк. Был хаҡта Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев белдерҙе. Билдәле булыуынса, республикала тәбиғәткә зыян килтергән предприятиелар байтаҡ. Был хәлдә контролдә тотоу мөһим. Күҙәтеү органдарының экология торошон тикшереү мөмкинлеге һәм тейешле хоҡуҡи инструментарийҙары булырға тейеш.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ҺӨНӘРМӘНДӘР БӘЙГЕ ТОТА

worldskills Russia

**Был көндәрҙә Өфөлә IX "Йәш һөнәрмәндәр" (WorldSkills Russia) милли чемпионаты финалы уҙа. Унда илдең 76 төбәгенән урта һәм юғары һөнәри белем биреү учреждениеларынан 16-нан 25 йәшкә тиклемгеләр һәм 16 йәшкә тиклемге мәктәп уҡыусылары ҡатнаша. Шулай уҡ Азия-Тымыҡ океан төбәге һәм Бойондороҡһоҙ илдәр берләшмәһе илдәренән конкурсанттар һәм эксперттар ситтән тороп эшләй.**

Ярышта студенттар 105 компетенцияла, уҡыусылар 51 йүнәлештә үҙ оҫталығын күрһәтте. Компетенциялар ете блокка бүленгәйне: төҙөләш һәм төҙөләш технологиялары, мәғлүмәт һәм коммуникация технологиялары, ижад һәм дизайн, производство һәм инженер технологиялары, хеҙмәттәр өлкәһе, транспорт һәм логистика, мәғариф. Был йүнәлештәрҙә Башҡортостан данын 100 мәғариф учреждениеһынан 280 кеше яҡлап сыҡты. Рәсәй кимәлендәге ярышҡа быйыл беренсе тапҡыр "Финанстар" һәм "Страховка агенты" компетенциялары индерелде. Башҡортостан намыҫын был йүнәлештәрҙә алты ҡыҙ яҡланы. Ә бына ауыл хужалығы буйынса "умартасылыҡ", "ауыл хужалығы машиналарын файҙаланыу", "цифрлы игенселек", "агрономия", "ауыл хужалығы биотехнологиялары", "генетик инженерия", "ветеринария" компетенцияларында ярыштар ойошторолдо һәм республиканан һиҙгеҙ кеше ҡатнашты. Шулай уҡ "Ландшафт дизайны" һәм "Флористика" кеүек бик ҡыҙыҡлы йүнәлештәрҙән дә беҙҙең йәштәр ситтә ҡалманы: республиканың ике студенттар һәм бер юниорҙар командаһы сығыш яһаны. Командалар составына алдағы ярыштарҙа яҡшы һөҙөмтәләргә өлгәшкән Өфө урман техник техникумы студенттары һәм республика экология-биология үҙәге тәрбиәләнеүселәре индерелде. Башҡортостандан иң ҙур команда сәнәғәт өлкәһендә: 23 компетенция буйынса 52 кеше ҡатнаша.

Чемпионат үткән майҙанда конкурсанттар өсөн генә түгел, ярыштарҙы ҡарарға килгән ябай тамашасылар өсөн дә барлыҡ шарттар булдырылғайны. Килеүселәр мобиль робот техникаһынан алып, ауыл хужалығы машиналарын йөрөтөү, Try-a-skill интерактив зоналарында иретеп йәбештереү эштәренә тиклем төрлө компетенцияларҙа үҙҙәрен һынап ҡарай алды. Бынан тыш, Башҡортостандың 5-11 класс уҡыусылары өсөн тәүге тапҡыр комплексы профориентация майҙансығы эшләне.

Әйткәндәй, ярыштар башланыр алда Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров унда сығыш яһарға тейешле республика йыйылма команда ағзалары менән осрашыуҙан һуң енеүселәргә 100-әр мең һум аҡса менән бүләкләргә вәғәҙәләгәйне. Финал призерҙарына 50-шәр мең һум түләнәсәк. "Йәш һөнәрмәндәр" милли чемпионаты финалы еңеүселәре һәм призерҙары уҡытыусыларына ла шундай уҡ сумма бирелә.

# КӘҢӘШ ҠОРАЙЫҠ



**Өфөнөң 450 йыллығы уңайынан Радий Хәбиров Башҡортостанда йәшәүселәрҙең нимә теләгәнен асыҡларға ҡушты. Дүшәмбе республика Хөкүмәтендә уҙған оператив кәңәшмәлә ул ошондай йөкләмә бирҙе.**

Йәкшәмбе республика делегацияһы Түбәнге Новгородтың 800 йыллығына ҡарата сараларҙа ҡатнашты. Республика Башлығы сәфәрҙең файҙалы булыуын билдәләне. "Шуныһы мөһим: Өфөнөң 450 йыллығына пландарыбыҙ бар. Ләкин өфөләр менән кәңәш ҡормағанбыҙ, - тине Радий Хәбиров. - Беҙгә өфөләрҙең нимә теләгәнен аңларға, уларҙың фекерен иғтибар менән тыңларға кәрәк". Уның әйтеүенсә, сара дөйөм республика кимәлендә ойошторола, юбилейға тиклем ҡалған өс йыл эсендә өфөләрҙе, шулай уҡ республика халҡын әҙерлек эшенә йәлеп итеү мөһим. "Өфөнөң 450 йыллығы - яңы объект төҙөү генә түгел. Элекке хроник ауырыуҙарҙы дауаларға тырышырға, ҡайҙалыр юл һалырға, ҡайҙалыр ихаталарҙы төҙөкләндерергә кәрәк, эшҡыуарлыҡ берләшмәһе, барлыҡ федераль һәм республика учреждениелары менән бик ҙур комплексты эште даими алып барыу зарур. Өфөлә башҡарырға тейешле саралар исемлеге ҙур".

Радий Хәбиров Башҡортостан Республикаһы Башлығы Хакимиәте етәксеһе Александр Сидякиндан ойоштороу эшен - проект офисын булдырыуын һәм даими, аҙнаһына бер йәки ике тапҡыр ойоштороу комитеты ултырышын уҙғарыуын һораны.

# МӘМЕРЙӘЛӘРҘЕ ҺАҠЛАРҒА!



**Рус география йәмғиәте Башҡортостан төбәк бүлексәһенең попечителдәр советы ултырышында Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров БР Тәбиғәтте һаҡлау һәм экология министрлығына БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаттары менән берлектә мәмерйәләр эргәһендә хужалыҡ алып барыуҙы хоҡуҡи көйләү мәсьәләләрен эшләргә ҡушты.**

"Республикала мәмерйәләр фәнни йәмәғәтселек өсөн дә, туристар өсөн дә ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра. Уларҙың статусын асыҡлау буйынса етди хоҡуҡи эш алып барырға кәрәк. Барлыҡ мәмерйәләрҙең иҫәбен алыу һәм дөйөм күрһәткестәр буйынса Шүлгәнташ, Киндерле йәки Аҫҡын кеүек мәмерйәләрҙең айырым әһәмиәтен асыҡлау һәм уларҙы махсус күҙәтеүгә алыу зарур. Улар бер нисә тиҫтә йәки йөҙ булырға мөмкин", - тине Радий Хәбиров.

Уның фекеренсә, туристар өсөн уңайлы шарттар тыуҙырыу менән бер рәттән, был тәбиғәт ҡомартҡыларын һаҡлау араһында баланс булдырырға кәрәк. "Үкенескә күрә, туристарҙың мәмерйәләргә инеүе, бигерәк тә үҙаллы инеүе, уларға тергеҙеп булмаҫтай зыян килтереүе мөмкин. Беҙ барыбыҙ ҙа Шүлгәнташтың туристар ҡалдырған яҙыуҙар менән сыбарланғанын беләбеҙ. Дөрөҫөн әйткәндә, ул һәләк булыр һәм беҙ уның ҡаяларындағы уникаль һүрәттәрҙе юғалтыр инек. Францияла һәм Испанияла мәмерйәләрҙе даими ҡулланыу тәжрибәһе күрһәтеүенсә, ундағы һүрәттәр юғала башлаған", - ти Башҡортостан Башлығы.

Башҡортостанда барлығы 1500 мәмерйә иҫәпләнә, уларҙың 288-е - 100, 29-ы 1 километр оҙонлоҡта. Иң оҙон - Киндерле мәмерйәһе 14 километрға һуҙылған юл аҫты тоннелдәре һәм үткәүелдәренә эйә. "Шул уҡ ваҡытта республикала һәр йыл спелеологтар ике-өс яңы, шул иҫәптән һыу аҫты мәмерйәләре аса, дөйөм алғанда уларҙың 30 проценты ғына өйрәнелгән", - ти Махсус һаҡланыусы тәбиғәт биләмәләре буйынса дирекция етәксеһе Салауат Нафиҡов. Спелеологтар Юрий Соколов менән Наталья Рычагова республика мәмерйәләрен дәүләт кимәлендә өйрәнеү һәм һаҡлау мәсьәләһен күтәрҙе. "Мәмерйәләр донъяһының байлығын өйрәнергә кәрәк, әммә шул уҡ ваҡытта туристарҙың хәүефһеҙлеге һәм тәбиғәт объекттарын вандаллыҡтан һаҡлау мәсьәләләре менән дә осрашабыҙ, - ти Юрий Соколов. - Мәмерйәләр менән бәйле мәсьәләләрҙе көйләү буйынса закондар ҡабул итергә кәрәк".

**Азат ҒИЗЗӘТУЛЛИН.**

# БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓1 сентябрҙә 130 меңдән ашыу уҡыусы Өфө мәктәптәренә уҡырға бара. 15 меңдән ашыу уҡыусы тәүге тапҡыр парта артына ултыра. Ә Башҡортостанда 498 441 уҡыусы өсөн яңы уҡыу йылы башлана, республикала быйыл 60 239 бала беренсе класҡа бара. Әйткәндәй, быйыл баш ҡалала төҙөкләндерелгәндән һуң 21-се лицей файҙаланыуға тапшырыла, Кузнецов затонында 260 урынлыҡ мәктәп сафҡа индерелә, тип белдерҙе Өфө ҡала округы хакимиәте. 2022 йылда Инорс-4 биҫтәһендә 1650 уҡыусыға иҫәпләнгән мәктәп асыу ҙа күҙаллана.

✓30-сы юбилейлы концерт миҙгеле алдынан Башҡортостан Республикаһының Милли симфоник оркестры open air концертына саҡыра. Ул 29 августа Арт-Квадрат майҙанында була. Программала "Мең дә бер кисә" гәрәп халыҡ әкиәттәре менән илһамланған А. Римский-Корсаковтың "Шәһризада" сюитаһының бөтә дүрт бүлеге лә яңғырай. Билеттар сараға инген урында һатыла. Киске сәғәт 7-лә башлана.

✓Баш ҡаланың Совет районында 26-сы Белем биреү үҙәге алдында футбол майҙансығы асылды. Ҡала үҙәгендә бындай 2688 квадрат метрҙа урынлашҡан уникаль проект башҡаса юҡ. Уйын майҙаны сеткалар ярҙамында еңел генә итеп бер үк ваҡытта өс мини футбол майҙансығына әйләндерелә һәм бер нисә командаға уйнау мөмкинлеге бирә. Махсус яҡтыртыу һөҙөмтәһендә футболсылар кисен дә уйнай ала. Яһалма газон юғары сифатлы материалдан эшләнгән, уйынсылар өсөн барлыҡ шарттар тыуҙырылған.

✓28 августа Өфөлә "Терра Башҡортостан" ат-спорт турнирының һигеҙенсе һайлап алыу этабы уҙғарыла. Ярышта, йәрәбә буйынса, Архангел, Туймаҙы, Мишкә, Әлшәй, Ауырғазы райондарының һәүәҫкәр жокейҙары ҡатнаша. Бүләк фонды - 1 миллион һум. Турнир легендар дивизия командиры, Рәсәй Геройы, генерал Миңлеғәли Шаймуратовтың тыуған көнөнә арнала (1899-1943).

✓Өфөлә педагогтарҙың 90 проценттан ашыуы, шул иҫәптән балалар баҡсалары, өҫтәмә белем биреү учреждениелары тәрбиәселәре һәм мәктәп уҡытыусылары яңы коронавирус инфекцияһынан вакцинация үткән. Был хаҡта Өфө хакимиәтендәге оператив кәңәшмәлә ҡаланың Мәғариф идаралығы етәксеһе Елена Хаффазова хәбәр итте.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# СТУДЕНТТАР ҠАЛАСЫҒЫ БУЛАСАҠ



**Башҡортостан Хөкүмәте тарафынан иғлан ителгән юғары уҡыу йорттарын берләштерер кампус баш ҡалабыҙҙың Көньяҡ Ағиҙел ярында төҙөләсәк. Төҙөлөштөң бер өлөшө элекке Киров исемендәге завод биләмәһен дә алып торасаҡ. Ул йәмғеһе 17 га ерҙе биләр, тип күҙаллана.**

Кампустың ни аңлатҡанын белмәгән уҡыусыларыбыҙға төшөндөрөп китәбеҙ: кампус - ул университет ҡаласығы, ятаҡтары, уҡыу йорттары, китапханалары, спорт комплекстары, лабораториялары һәм башҡа бөтөн кәрәк нәмәләре бер урында булған юғары уҡыу йорто территорияһы. Кампус төҙөүҙең маҡсаты - баш ҡалала белем алыусы студенттар һәм юғары уҡыу йорто уҡытыусылары, йәш фән белгестәре өсөн уңайлы белем алыу, эшләү, йәшәү шарттары тыуҙырыу. Абитуриенттарҙы республикала ҡалдырыу, студенттарҙың йәшәү кимәлен күтәреү һәм йәштәрҙә фәнгә ҡарата ыңғай ҡараш булдырырға ынтылыу.

Хөкүмәт тарафынан бирелгән мәғлүмәт буйынса, Өфө ҡалаһында былдай ҡаласыҡ төҙөүгә өлгәшеү республиканың ҙур еңеүе лә. Бөгөн тотош илдә университет кампустарын селтәрен булдырыу хаҡында һөйләнелә. Рәсәй Президенты ҡушыуы буйынса программаны тормошҡа ашырыу Фән һәм технологиялар йылында башлана. Шул проект өстөндә республикабыҙҙа 2019 йылдан алып ҙур команда эшләгән һәм төрлө пландар, тәкдимдәр менән сығыш яһаған. Рәсәй Хөкүмәтенә төбәктәрҙән килгән 27 заявка араһынан бары 8-е генә ҡабул ителгән һәм шулар араһында беҙҙең Башҡортостан да бар.

Урал буйынса алғанда, былдай объекттар тағы ла Екатеринбургта һәм Силәбелә төҙөләсәк. Дөйөм Рәсәй эсендә иһә Томск, Новосибирск, Калининград, Түбәнге Новгород һәм Мәскәүҙә. Был милли масштабтағы кампустар ысынлап та донъя кимәлендәге проекттар булмаҡсы. Улар Рәсәй майҙанын ғына түгел, айырым өлкәләр, республикалар үсешен дә тиҙләтәсәк. Яҡшы инфраструктура ғына түгел, фәнни яҡтан алға китештәр, иҡтисади яңылыҡтар белемле йәштәрҙе йәлеп итәсәк.

Кампус ул студенттарҙың йәшәү, ял итеү урыны ғына түгел, унда билдәле ғалимдар, фән белгестәре килеп йәшәргә-эшләргә, төрлө саралар, симпозиумдар, тикшереүҙәр үткәрергә, үҙ-ара йыйылышып аралашырға мөмкиндәр. Донъяла исемдәре билдәле булған белгестәрҙе саҡырып алыу ҙа, уларға яҡшы шарттар тәҡдим итеү ҙә уңайлы буласаҡ. Төҙөлөш биләмәһендә шулай уҡ парковка, магазиндар, аптекалар, медицина үҙәге, бассейн, спорт майҙансыҡтары ла планлаштырылған. Бер һүҙ менән әйткәндә, кампус студенттар һәм йәштәрҙең гөрләп торор ҡаласығы буласаҡ. Билдәләп үтәйек, ҡаласыҡта йәшәү түләүле була, әммә хаҡтар сағыштырмаса түбән ҡуйыласаҡ. Миҫалға алғанда ғына ла бөгөн баш ҡаланың ун процентынан күбе - студенттар, йәғни улар 70 меңдән ашыу. Бында уҡырға синыф уҡыусыларын да өстәһәң, һан тағы ла үҫә төшә. Тимәк, төҙөләсәк кампус ҡала өсөн бик тә кәрәкле һәм файҙалы проект буласаҡ.

Шулай итеп, Өфө ҡалаһында төҙөлөш эштәре быйыл уҡ башлана. Уның Зәки Вәлиди урамындағы копустарын Яңы йылға тиклем тапшырмаҡсылар. Икенсе өлөшө проекты эшләнә генә әле. Уныһы ла йыл аҙағына әҙер булыр һәм 2024 йылға сафҡа инер, тип өмөт ителә.

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

## ҺЫУ ЗАРАРЛЫ ТҮГЕЛ!



**Өфө ҡала округы хакимиәтендә торбанан килгән һыуҙың бысраҡлығы тураһында хәбәрҙе кире ҡаҡтылар.**

Һуңғы осорҙа социаль селтәрҙәрҙә һәм ҡайһы бер матбуғат сараларында торбанан килгән эсәр һыуҙа фенол, терегөмөш, ҡурғаш кеүек зарарлы матдәләр барлығы тураһында мәғлүмәт барлыҡҡа килде. Был хәбәрҙе "Уфаводоканал" кире ҡаҡты һәм ҡала халҡына шуны еткерҙе: "Федераль законға ярашлы, ике йылға бер тапҡыр предприятие һәм Өфө ҡалаһы хакимиәте сайтында һыуҙың сифаты тураһында мәғлүмәт баҫыла. Ҡайһы бер матбуғат саралары баҫылған мәғлүмәтте ҡала халҡының фекеренә һылтап, предприятиеның абруйына һәм эшлекле репутацияһына зыян килтерҙе. Анализ һөҙөмтәләре буйынса, фенол, ҡурғаш, терегөмөш кеүек башҡа зарарлы матдәләр эсәр һыуҙа юҡ. Өфө ҡалаһында һыу сифаты бөтә күрһәткестәр буйынса норматив талаптарға яуап бирә. Ул производствоның аналитик контроле һәм Роспотребнадзорҙың Башҡортостан Республикаһы буйынса идаралығы тикшереү һөҙөмтәләре менән раҫлана".

ҠЫҪҠАСА

## МӘКТӘПКӘ - АВТОБУС

✓ **Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров мәктәп директорҙарына "Газель" маркалы 41 мәктәп автобусының асҡыстарын тапшырҙы.** Яңы автобустар мөмкинлектәре сикләнгән Сибай коррекцион мәктәбенә, шулай уҡ республиканың 30 районы һәм Өфө ҡалаһына йүнәлде. 2019-2020 йылдарҙа 151 мәктәп автобусы һатып алынғайны. "Яңы автобустар иҫке транспортты алыштырасаҡ, балаларҙы ташыу өсөн яңы маршруттар асырға мөмкинлек бирәсәк. Беҙ артабан да мәктәптәрҙең автобус паркын яңыртып торасаҡбыҙ һәм яңы автобустар һатып аласаҡбыҙ", - тине Радий Хәбиров. Һатып алынған техника файҙаланыу ваҡыты 10 йылдан ашыу булған автобустарҙы алыштырыу мөмкинлеге бирҙе. Бөтөн мәктәп автобустары ла спутник навигацияһы аппаратураһы һәм тахографтар менән тулыһынса йыһазландырылған. Республикала бөтәһе 1476 мәктәп автобусы 872 мәктәпкә һәм унан өйҙәренә 42 мең уҡыусыны ташый. 2749 тораҡ пункты хеҙмәтләндерелә.

✓ **Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Мәғариф министрлығына 1 октябргә тиклем республика юғары уҡыу йорттарының стратегик үсешен тәьмин итеү буйынса тәҡдимдәр әҙерләргә ҡушты.** Тәү сиратта был Башҡортостандың ҡайһы бер ҡалаларында филиалдар асыуға ҡағыла. "Белорет республикала иң ҙур районларҙың береһе, унда 64 мең кеше йәшәй, ләкин унда беҙҙең вуздарҙың бер генә филиалы ла юҡ; был шулай уҡ Күмертауға ла ҡағыла. Беҙҙең ҡалаларҙа Магнитогорск менән Ырымбур филиалдары бар,ә бик ҙур потенциалы булған үҙебеҙҙең вуздарҙыҡы юҡ. Был хәлде төҙәтергә кәрәк" , - тине Башҡортостан Башлығы. Тағы бер ҙур мәсьәлә - республиканың теге йәки был биләмәһенә белгестәр әҙерләү. Төбәк Башлығы Урал аръяғы районларында медицина кадрҙары мәсьәләһен хәл итеү өсөн Сибай медколледжына уҡырға ингән йәштәрҙең автоматик рәүештә БДУ-ның Сибай филиалы биология факультетының тәүге курсына алынасаҡтары хаҡында һөйләнә. Ә инде өсөнсө курстан улар БДМУ-ға ҡабул ителәсәк. "Мотлаҡ шарт менән: уҡып бөткәс, улар үҙ район һәм ҡалаларына табиптар булып эшкә ҡайтырға тейештәр", - тине Башҡортостан Башлығы.

✓ **Башҡортостанда 365 мәктәпкә капиталь ремонт талап ителә, был төбәктәге һәр бишенсе мәктәп тигән һүҙ, тине педагогик советта республика Башлығы Радий Хәбиров.** "Ил Президенты 2026 йылға тиклем бөтөн иҫке мәктәптәрҙе яңыртергә ҡушты. Беҙ республикала мәктәптәге кластарҙан башлап, туҡландырыу блогын, территорияны, мәктәп яланын комплекслы ремонтлаясаҡбыҙ. Быйыл ғына ла беҙ мәктәптәргә ремонт өсөн 400 млн һум аҡса бүлдек һәм ете мәктәптә комплекслы ремонт эштәре үткәреүгә өлгәштек. Шулай итеп, 2026 йылға тиклем 50-70 мәктәпте яңыртырға кәрәк буласаҡ. Мәғариф министрлығының проекттар әҙерләү һәм заявкалар биреү кампанияһында һөҙөмтәле ҡатнашлыҡ итеүен һорайым",- тине республика Башлығы.

## ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклеге онотмағыҙ.**

### Әрем

❖ Ҡурылдайҙы йүнәлтеү һәм тын ҡыҫылыуҙан арыныу өсөн 3 литрлыҡ сәйнүккә 20-шәр сантиметрлыҡ ике әрем башын һалып, ҡайнар хәлгә еткерергә һәм бер сәғәт төнәтергә. Төнәтмәгә аяҡтарҙы тығып ултырырға. Өс тапҡыр дауаланғандан һуң тын ҡыҫылыуы, ҡурылдайҙағы шау, ҡаҡырыҡ бүленеп сығыуҙан туктай. Был рәүешле аяҡтарҙағы ҡан тамырҙарын таратыу өсөн дә дауаланалар. Әрем аяҡтарға ла, үпкәгә лә ярҙам итә. Һалҡын тейгәндә һәм грипп менән сирләгәндә ҡаты йүтәлдән өс-дүрт тапҡыр аяҡтарҙы тығып ултырыу һәм ошо әрем быуын еҫкәү ҙә файҙаһын бирә.

### Ҡайын ороһо

❖ Ҡайын ороһон (чага) өләштергә бүлергә һәм һыуыҡ йәки йылы һыуҙа 4-5 сәғәт ебетергә, шунан ит турағыс аша үткәреп, 1 ҡалағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп бешерергә. Төнәтмәне өскә бүлеп, ашарҙан ярты сәғәт алда көнөнә өс тапҡыр эсергә. Был аналыҡ үңәсе эрозияһынан яҡшы дауа.

### Ҡанды шыйыҡайтыу

❖ Ҡанды шыйыҡайтыу һәм йөрәкте яҡшыртыу өсөн 1 ҡалаҡ валериана тамыры һәм 3 ҡалаҡ укроп орлоғона ярты литр ҡайнар һыу ҡойоп, термоста 5-6 сәғәт йәки төнө буйы төнәтергә. Шунан һөҙөргә һәм бер литрға тултырғансы ҡайнар һыу өҫтәп ҡойорға. Кәрәк булғансы бал ҡушырға. Төнәтмәне ашарҙан 20-30 минут алда сирек стаканлап эсергә.

### Һуған

❖ Колаҡтар шаулағанда бер ус ҡоро һуған ҡабығын йыуып, ярты литр һыу ҡойорға һәм 10 минут ҡайнатып, бер ниҫә ҡат марля ярҙамында һөҙөргә. Сәй урынына эсергә.

❖ Теш ҡаҙналары ҡанағанда һуғандың йәшел генә яңы һабаҡтарын ашарға, улар С витаминына бай. Шулай уҡ һуған һәм алоэ һуттарын бер тигеҙ миҡдарҙа ҡушып, көнөнә ике тапҡыр ҡаҙналарға һөртергә була.

❖ Йүтәлләгәндә һәм бронхит менән ауырығанда тигеҙ миҡдарҙа ҡушылған һуған һуты һәм бал эсергә.

❖ Бауыр һәм үт ҡыуығы сирҙәренән ике-өс йәшел һуған һабағын ашарға.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

*✓ Мөмкинлектәр сикләнгән ваҡытта ябай ғына ниәттең тормошҡа ашыуын теләү - хыял, яңы көндә, яңы миҙгелде күреү - мөғжизә, көтмәгәндә йылы һүҙ ишетеү бәхеткә торошло була!*



*ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!*



# БАШҠОРТ СЕМӘРЕ

Ағас семәрләү эше башҡорттарҙың тағы бер хужалыҡ эшмәкәрлеге - йылҡысылыҡ менән дә тығыҙ бәйләнгән. Ағас һауыттарҙан тәү сиратта ҡымыҙ етештереү өсөн тәғәйенләнгән һәм эсемлекте табынға сығарып ҡуя торған һауыт-һаба биҙәкләнгән.

Атты биҙәү традицияһы ла шулай уҡ әһәмиәтле күренеш. Бигерәк тә һыбай йөрөгәндә егеү кәрәк-ярағы бай биҙәлешле булған. Унда ағастан яһалған эйәр һәм өҙәнге төп урынды биләгән.

Эйәр төрҙәре, уларҙы эшләү ысулдары М.Г. Муллағоловтың "Башҡорт халыҡ транспорты" монографияһында ентекле ҡаралған. Эйәрҙәрҙе художестволы эшкәртеү һәм ҡашындағы биҙәктәр тураһында тулыраҡ мәғлүмәт еткерергә лә булыр ине. Ҡыҙғаныска күрә был өсталыҡ башҡорттарҙың биҙәү-ғәмәли сәнғәтенә бағышланған этнографик хеҙмәттәрҙә асылып етмәй.

Муллағолов асыҡлауынса, боронғо эйәрҙәр тәү сиратта төҙөләшө йәһәтенән айырылып торған. Уларҙың күбеһе бер нисә өлөштән торған: алғы һәм артҡы ҡашы айырым бер формалағы арҡыры таҡталар - эйәр таҡтаһы (ҡаптал да тиҙәр) менән тоташтырылған. Ҡайһы бер эйәрҙәрҙең нигеҙе соҡолоп яһалған ярым цилиндр рәүешендә булған. Бер бөтөн ағас киҫәгенән эшләнгән эйәрҙәр юғары осталыҡ талап иткән. Эйәрҙе ҡайындан эшләгәндәр, бер нисә өлөштән торған эйәрҙең алғы ҡашы өсөн асалы ботаҡты файҙаланғандар. Ҡашы тамыр ороһонан эшләнгән эйәрҙәр юғары баһаланған. Эйәр остаһы алғы ҡашты эшләүгә ҙур иғтибар бүлгән. Уның формаһы һырлаусының ижади ҡарашын сағылдырған, башҡаларҙан айырып торған. М.Г. Муллағолов китабында эйәрҙең алғы ҡашын биҙәүҙең егермеләп төрө килтерелә, ә шул уҡ ваҡытта автор тик уның формаһы буйынса ғына айырымлығын ҡарай (биҙәктәрен телгә алмай).



*Тамыр ороһонан эшләнгән эйәр. Археология һәм этнография музейы фондынан (Өфө ҡалаһы). Т.К. Сурина фотоһы.*

Йыш осраҡта эйәр ҡашы теге йәки был конфигурациялағы арка рәүешендә эшләнгән; алғы яғы көмөшләнгән киҫәктәр һәм металл сыңға менән биҙәлгән. Риүәйәттәрҙә халыҡ геройы Салауат Юлаевтың эйәре тураһында иҫтәлектәр һаҡланған: уның ҡашына нәҙек кенә ҡайыштарҙан үрелгән суҡ беркетелгән. Эйәрҙең өҙәңгеһе ағастан булған.

Өҫкө яғы семәрле эйәрҙәр үҙенсәлекле күренгән. Һүрәттәр йәнләндерелгән. М.Г. Муллағолов таулы яҡтарҙа йәшәгән бөрйәндәрҙә, тамъяндарҙа һәм ҡыпсаҡтарҙа өйрәк, йылан, айыу башлы эйәрҙәр осратҡан. Ижади фекер оҫта тарафынан дөйөмләштереп, һиҙелерлек кенә итеп еткерелгән, әммә скульптураның тышҡы һынланышында ниндәйҙер хас һыҙаттар сағылған. Халыҡта йәшәгән атамалар: өйрәк баш эйәр, йылан баш эйәр, айыу баш эйәр прообраз барлыҡ хаҡында һөйләй. Ҡайһы бер ҡош башлы эйәрҙәр ситтән ҡарауға уйнаған һуйырҙы хәтерләткән.

**Светлана ШИТОВА.**
**"Башҡорттарҙа ағас семәрләү һәм биҙәк төшөрөү" китабынан.**

*УЙЛЫҒА - УЙ*

**Мөғжизә көтөү һәр әҙәм йәненә хас тәбиғи сифат булһа ла, уны көтөп ултырыуҙан фәтүә юҡ. Мөғжизәне көтөп алыу өсөн кеше үҙен дәртләндереп, өмөтләндереп, күңел ишектәрен киң асып, уны ҡабул итергә әҙер булырға тейештер. Сөнки кеше, гәҙәттә, көндәлек йәшәйештәге үҙе өсөн уңайлы һәм файҙалы күренештәрҙе лә ваҡытында күреп, баһалап, күңеле менән ихлас ҡабул итеп, ҡыуана белмәй. Ә инде үҙенең бәхетле, уңышлы була алыуына ышанған тырыш, һәләтле кешеләргә мөғжизә йышыраҡ осраусан икәне билдәле. Шуға күрә, мөғжизә көткән кеше уға ҡаршы үҙе бер аҙым булһа ла эшләргә тейеш. "Тик яткан таш аҫтына һыу инмәй" тиҙәр бит...**

# БЫЛ ДОНЪЯЛА...

## мөғжизәгә урын бармы?



Мәҫәлән, "Мөғжизәләр яланы" тапшырыуына барып, батмустан һайлап алған аҫҡыс менән ишеген аҫҡан машинаға ултырып ҡайтҡан кешегә "Үәт, ниндәй бәхетле!" тигән көнләшеү менән баҡалар. Ә ул тапшырыуҙа ҡатнашыр өсөн был кеше ниндәйҙер мөғжизәгә ышанған, уға табан аҙым яһап, үҙен һорауҙарға дөрөҫ яуап биреүгә әҙерләгән, китаптар аҡтарған. Ситтән ҡараусыларҙың күптәре шул ғәмәлдәрҙе атҡарырға ла йыбана. Әлбиттә, улар мөғжизәләргә лә ышанмай.

"Ҡаты ауырып яткан ерҙән тороп киткән, үәт мөғжизә!" тиҙәр бәғзе берәү тураһында. Тороп китер өсөн ул кешенең күпме көс, тир, күҙ йәштәрен түккәнен кем күргән дә, һыҙланыуҙарын кем һиҙгән? Уның үҙен йәлләткес үйхистәрен еңеп, күпме тән һыҙланыуҙары, йән ғазаптары аша үтеүен кем аңлап, баһалаған? Уйлап ҡараһаң, был да иҫ киткес мөғжизә бит! Сөнки был бәхеткә яҡты донъяла йәшәгәндәр генә эйә!

Ахирәттәгеләр (йәндәре йәннәттә булһын!) был турала хыяллана ла алмай. Улар был донъяның михнәттәренән дә, рәхәттәренән дә мәхрүм. Кешеләр шуны аңлаймы? Аңлаһа, көндәлек тормош мәшәҡәттәренән арынып, бер-береһенә йылы һүҙ әйтергә, йылы ҡараш бүләк итергә әҙерме? Кемдәлер маҡтап, кемдәлер хуплап, кемдәлер арҡаһынан һөйөп ебәрергә һәләтлеме? Ай-һай күптәр әҙер түгелдер, сөнки бөгөн берәүҙәрҙең холҡона ҡырыҫлыҡ, тәкәбберлек ауырыуы йоҡһа, икенселәрҙең аңын нәфсе ағыулай, өсөнсөләрҙең йәнәнә көнләшеү, үсләшеү оялаған. Был йоғошло ауырыуҙар өлкәндәрҙән балаларға күсә. Сөнки насар холоҡ, алама һыҙаттар әҙәм балаһына тыумыштан бирелмәй, тормоштан үҙләштерелә бит.

Кешеләр бер-береһенә түгел, йәшәгән мөхите - йәнтөйәгенә һаҡсыл мөнәсәбәттә булыуҙы үҙенең йәненә тыумыштан һалынған йән сифаты, тыуған еренең тәбиғәтенә, тәбиғи ресурсҡарына мәрхәмәтле булыуҙы - кешелеклек бурысы икәнен онота бара. Мәҫәлән, XXI быуатта юҡҡа сығыу хәүефе янаған йәнлек, ҡош-ҡорт, балыҡтарҙың 8471 төрө "Ҡыҙыл китап"ҡа индерелгәнен күптәр белмәйҙер ҙә. Белгәндәр ҙә ул һанға етди әһәмиәт бирмәй. Сөнки кеше тәбиғәттән ниндәйҙер мөғжизә көтөп, өмөтләнһә лә, йәшәгән мөхитенең һыу, һауа, ерҙәренең таҙалығына битараф.

Ата-бабаларҙың нәҫел, ырыуҙары ғүмере буйы йәшәгән йәнтөйәктең мөғжизә тин ерҙәрен һаҡлауҙы үҙенең выждан бурысы икәнен танып, ҡәҙерләү кәрәклеген йәнендә тоймағандар күбәйә барыуы борсолдора. Улай түгел, тип ҡысҡырырға ашыҡмағыҙ, тиер инем. Сөнки аңында тыуған төйәгенә һөйөү тойғоһо тәрбиәләр өсөн кеше уны бөтә яҡтан да өйрәнеп, яҡшы белергә тейеш. Шул саҡта ғына уның йөрәгендә йәнтөйәген яратып, ҡәҙерләү тойғоһо уяныуы мөмкин. Ә белмәгән, танымаған ерҙәргә ниндәй яҡты хистәр тыуһын? Күп осраҡта кеше, ваҡыт юҡлығына һылтанып, тыуған төйәге тәбиғәтен өйрәнеп, күреп белергә лә артыҡ көс һалмай.

Мәҫәлән, ғүмере буйы бер төбәктә йәшәп, ер-һыуҙарын күрмәгән, уларҙың исем атамаларын белмәгән кешеләр бар. Мин үҙем, ике йыл буйына көн һайын Баймаҡтан Теләкәскә йөрөп эшләгән осорҙа, көнөнә ике тапҡыр Бәхтигәрәй ауылы тәңгәлендәге Ирәндектең иң бейек түбәләренең береһе - Соҡаташ (Кәртәташ тип тә әйтәләр, бейеклеге 985м.) эргәһенән үткән һайын, ошо ҡая башына менеп, тирә-яҡты күрер кәрәк ине, тип хыялланып йөрөнөм. Пугачев ихтилалы баҫтырылғас, Соҡаташ башындағы эре таштар менән кәртәләнгән ҡәлғә кеүек ҡоролмала ҡасҡындар йәшенеп ятҡан икәне, унда башҡа ҡалҡыуҙарҙағы һаҡсыларҙы иҫкәртер өсөн усаҡ яға торған ялпаҡ ташта боронғо ут эҙҙәре булыуы тураһында риүәйәттәр ишеткәнем булды. Ләкин, һәр саҡтағыса, ваҡыт юҡлыҡҡа һылтанып, ул маҡсатыма ирешмәнем.

Үҙаллы бара алмаҫ хәлгә ҡалғас, һау саҡта еңел генә тормошҡа ашырырлыҡ маҡсат хыялға әүерелде. Әгәр ҡасандыр бара алһам, был ваҡиға минең өсөн хатта мөғжизә булыр ине. Һау кешегә ябай ғына атҡарырлыҡ маҡсат, бер мәл, тормошҡа ашмаҫлыҡ мөғжизәгә әйләнер тип кем уйлаһын? Шуны белә күрә, нинә әҙәм балаһы хәленән килгәнде бөгөн эшләмәй, маҡсаттарын бөгөн тормошҡа ашырмай, күңел ихтыяждарын бөгөн ҡәнәғәтләндерергә тырышмай?

Яҙмыш нимә ҡылмай әҙәм балаһы менән: бурыстарҙы үтәү, хыялдарҙы тормошҡа ашырыу түгел, "Йәшәп таныһыҡ ҡанманы..." тип әйтәлер һәр кем ғүмеренең ахырында. Мөмкинлектәр сикләнгән ваҡытта ябай ғына ниәттең тормошҡа ашыуын теләү - хыял, яңы көндә, яңы миҙгелде күреү - мөғжизә, көтмәгәндә йылы һүҙ ишетеү бәхеткә торошло була! Шуға күрә, ғүмерҙең ҡәҙерен бөгөн белеп, йәшәрҙе бөгөн йәшәп, изге ниәттәрҙе бөгөн атҡарып ҡалырға тырышығыҙ, тип әйтке килә.

"Бөгөн эшләренде иртәгәгә ҡалдырма" тип халыҡ бушҡа әйтмәгән. Йәшәгән саҡта кешеләр берберенә иғтибарлы, ихтирамлы булып, күрешеп, һөйләшеп, кәңәшләшеп, яҡын аралашып, берберененең тән-йән йылыһын тоя алыуына ҡыуана белһен ине. Маҡсат, теләктәре тормошҡа ашһын өсөн күңелдәр яҡшылыҡҡа, матурлыҡҡа киңерәк асылһа, йөҙҙәр йышыраҡ мөләйем, үҙ-ара мөнәсәбәт, мөғәмәләр ихлас, һүҙҙәр ышаныслы булһа, ошо тойғоларҙы йәнендә тәрбиәләп, изге ниәттәр, яҡты хыялдар менән өмөтләнеп йәшәгән кешенен күңеленә тылсымлы мөғжизәгә тура юл асылыр. Шул осраҡта, тормошҡа ашмаған уй-теләктәр, ниәт-хыялдарҙың үкенестәре әҙәм балаһының ҡалған ғүмерен ағыуламаҫ, биллаһи!..

*Үкенгәнсе үткәнеңә,*
*үткән йәшкә,*
*Ҡул һелтә лә күҙҙәреңә*
*килгән йәшкә,*
*Дәртле йөрәк көсөң менән*
*бөгөн йәшнә,*
*Өмөтләнгән иртәгәндә*
*бөгөн йәшә!*

**Урал МОСТАФИН.**

✓ *Ҡырҡтан ашыу башҡорт ырыуҙары араһындағы унлар атамаһы ла ошоға дәлилдер. XIX быуатта башҡорт фольклоры өлгөләрен йыйыусы ғалим М.В. Лоссиевский ҙа башҡорттарҙың һундарға мөнәсәбәтле булыуын билдәләп киткән.*



ЫРЫУЫҢ КЕМ?

# ЫРЫУЫБЫҘ УНЛАР - БАБАЛАРЫБЫҘ ҺУНДАР

**Унлар - төньяҡ башҡорттары этнографик төркөмөнә ҡараған башҡорт ырыуы. Был ырыуҙың күпләп йәшәгән тәү төйәге - Ҡариҙел йылғаһының уң ҡушылдығы булған Байҡы йылғаһы үҙәне. Унларҙың бер өлөшө Ҡариҙел йылғаһы буйын үҙ итә, ә был яҡтарҙа башҡа тарафтарҙан күсеп килгән халыҡтар күбәйә башлағас, көнсығышҡа, Йүрүҙән йылғаһының түбәнге ағымы буйындағы ерҙәргә юллана.**



Унлар башҡорттарының ауылдары Өфө губернаһының Бөрө өйәҙендәге Су-унлар олоҫона ҡарай, ул Йәнсәйет һәм Байҡы түбәләренә бүленә. Шулай уҡ Танып олоҫо составында Ҡыр-Унлар түбәһе була. 1894 йылда унлар ауылдары Байҡы һәм Байҡыбаш олоҫтарын хасил итә. Ҡариҙел районының Абтулла (Бәҙрәш), Буронғот, Ҡараяр, Дүртөйлө, Ҡаҙысай, Кантон (Ысыҡты), Яңы Бирҙәш, Иҫке Аҡбүләк (Әзмәй), Яңы Аҡбүләк, Туйыш, Хәлил, Юлдаш, Яҡуп, Малик, Тегермән (Иҫке Бағазы, Үрге Тегермән, Түбәнге Тегермән), Яңы Йәнсәйет, Иҫке Йәнсәйет, Шамрат, Мата ауылдарын унлар башҡорттары нигеҙләгән. Борай районында ла унлар ауылдары бар: Иҫке Ҡиҙгән, Яңы- һәм Иҫке Ҡарағош, Кәшкәләү, Дауытлар, Баҡалы (Имәнкүпер, Иҫке Имәнкүпер). Был ауылдар Танып олоҫонoң Ҡыр-Унлар түбәһенә ҡарай. Асҡын районының Упҡанкүл ауылына ла унлар нигеҙ һалған, ошо райондың Ҡарткиҫәк, Яңы Ҡарткиҫәк ауылдарында ла унларҙың су-ун һәм байҡы түбәләре вариҫтары танып ырыуы башҡорттары менән ҡатнашып йәшәй.

Унларҙың су-ун, байҡы, ҡыр-ун түбәләре бер нисә аранан (нәҫел-нәсәбтән) хасил булған: мәҫәлән, Иҫке Аҡбүләктә аҡбүләк, балтай, шәмекәй, ҡужағол, сабир, малик; Яңы Йәнсәйеттә ярғыҙ, туҡыш, уржум, байшан, бүре аралары.

Су-унлар, балыҡсы ырыуы кеүек үк, Башҡортостандың көнбайыш райондары ауылдары халҡынан айырмалы, этник яҡтан бер сығышлы булған ауылдарҙа көн итә. Уларҙың тик Тегермән исемле ауылында ғына бер ни тиклем мишәрҙәр йәшәһә, ҡасандыр унлар нигеҙләгән Иҫке Эткүсте ауылында хәҙер мариҙар ғына йәшәй. Борай районындағы унлар ауылдары шулай уҡ этник яҡтан ҡатнаш.

Тарихсы-ғалимдар унларҙың тарихи сығышын беҙҙең эраның беренсе яртыһында Евразия ҡитғаһын тетрәткән ҡеүәтле, легендар ҡәүемдәрҙән һаналған һундар менән бәйләй. Ошо замандан ҡалған яҙма текстарҙа Рим империяһын яулап алған һәм Көнсығыш Европа халыҡтарын буйһондорған Аттила яугирҙарын, уларҙың этник яҡтан төрлө ҡәүемдәрҙән булыуына ҡарамаҫтан, барыһын да һундар, тип атағандар. Европа авторҙары сыуаштарҙы, булғарҙарҙы ла һун ҡәүемдәре рәтенә индерә. Әммә бының ысынбарлыҡҡа тап килеү-килмәүе әлегә ахырынаса асыҡланмаған.

Тарихта һун исеме аҫтында төрлө дәүерҙәрҙә һәм төрлө географик киңлектәрҙә йәшәгән ике ҙур халыҡ төркөмө билдәле. Тикшеренеүсе К.А. Иностранцев Ҡытай тарихында аныҡ сағылыш тапҡан хунну (сюнну) һәм Европаны буйһондора алған һун (гун) халыҡтары булыуын билдәләп, II - IV быуаттарҙа Үҙәк Азияла, Көнсығыш Себерҙә һәм Уралда формалашҡан һундарҙың Ҡытай тарихсылары телгә алған хунну ҡәүеме вариҫтары булыуын иғтибарға ала. Билдәле бер тарихи сәбәптәр арҡаһында Ҡытай ерлегендә көн иткән ҡеүәтле хунну (сюнну) вариҫтары, Урта Азия, Себер һәм Көньяҡ Урал тарафтарына күсеп китеп, бында оло империя төҙөй. Уларҙың Баламбер (IV б.) һәм Аттила (V б.) исеме менән бар донъяға билдәле булған юлбашсылары Европа илдәренә ике тапҡыр поход ойоштора. Тарихсылар һундарҙың ике ҙур төркөмө - Азия киңлектәрендә таралып йәшәүсе һәм Европаға тиклем барып еткән яугир һундар хаҡында мәғлүмәт бирә. Һундарҙың бер өлөшө Волга буйындағы Бүләр (Биләр) илендә төпләнә, әммә монгол яуҙары барышында Биләр ҡалаһы емертелә, ә һун-бүләрҙәр артабан башҡорттарға ҡушылып китә, Рус дәүләтендә улар йәшәгән тараф Бүләр олоҫо, тип атала башлай. Ғөмүмән, Европала урта быуаттарҙа булғарҙарҙың да һун тоҡомдарынан булыуына иғтибар иткәндәр. Мәҫәлән, Никифор Бөйөк Булғар ханы Кубратты "унногундурҙар хакимы", тип атаһа, Көнсығыш Рим императоры Константин Багрянородный булғарҙарҙың боронғо атамаһын "оногундур" булған, тип билдәләй. Тарихсы А.Н. Бернштам унн исемле ҡәүемдең үгеҙ малын үҙҙәренең изге хайуаны, йәғни тотемы итеп һанауы хаҡында яҙа. Бында һиндтарҙың әлеге көнгә тиклем һыйырҙы изгеләштереүе, башҡорттарҙың "Урал батыр" эпосында Уралдың алышта уҫал үгеҙҙе еңеп, уны кешеләргә буйһондороуы, ә "Ҡуңыр Буға" эпосында тыуған яғына ҡасып ҡайтып киткән үгеҙҙең халыҡҡа Урал һырттары аша төньяҡтан көньяҡҡа табан тура юл һалыуы хаҡында бәйән ителеүен иҫкә алырға була. Быны боронғо башҡорттарҙың һундар менән бәйләнештә булып, һуңғыларының бер ни тиклем халҡы ниндәйҙер ваҡиға-сәбәптәр һөҙөмтәһендә башҡорттарға килеп ҡушылыуының тарихи ауазы итеп ҡарап була.

Фольклор мәғлүмәттәрен бер ни тиклем кимәлдә археологик тикшеренеүҙәр ҙә раҫлай. Европа һундарынан ҡалған ҡаҙылма ҡомартҡылар Тарихи Башҡортостан ерендә лә табылған. Мәҫәлән, археологтар Кама буйындағы Турай ҡәберлегенең һундарҙыҡы булыуын фаразлай. "Өфө-II ҡаласығы"нда (Турбаҫлы мәҙәниәте ҡомартҡыһы) табылған матди мәҙәниәт өлгөләре шулай уҡ Европа һундары менән тығыҙ этник бәйләнештә булған Волга-Дон алан-сарматтарынан ҡалған, тип иҫәпләнә. Тикшеренеүсе Г. Боталов ошо хаҡта былай тип яҙа: "Өфө территорияһында (медицина институты, Академия театры, Пушкин, Туҡай, Социалистик урамдары янында) тикшерелгән үтә бай ҡәберлек мәҙәниәте унн-сармат комплексы һыҙаттарын айырыуса асыҡ итеп күрһәтә".

Әлбиттә, "хунну", "сюнну", "һун" ("гун/хун") этнонимдары менән билдәле булған ҡәүемдәр этник яҡтан бер үк халыҡ булған тип әйтеп булмай. Уларҙың бөгөнгө вариҫтарының туранан-тура һун тоҡомдары булыуын да аныҡ ҡына билдәләүе ҡыйын. Шулай ҙа гот (герман) эпостарында данланған ҡеүәтле унндар (һундар) хаҡындағы хәтер саҡтылары үтә лә һирәк осрай торған этнонимдарҙа сағылыш тапҡан. Ҡырҡтан ашыу башҡорт ырыуҙары араһындағы унлар атамаһы ла ошоға дәлилдер. XIX быуатта башҡорт фольклоры өлгөләрен йыйыусы ғалим М.В. Лоссиевский ҙа башҡорттарҙың һундарға мөнәсәбәтле булыуын билдәләп киткән: "Чабаталы, то есть припущенники (чабаталы значит "лапотники"), называют коренных башкир-вотчинников, потомков древних башкир-кочевников - хуннами, признавая за ними самостоятельное наречие, как, например, самостоятельно наречие малороссийское, так что коренных башкир от остальных, именно от чабаталы и мещеряков, алатырей и тюменей, - легко отличить по твердому грубому их говору".

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

---

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 76*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Сталинградтан - Ворошиловградҡа!

Алыштар тынып торған бер мәлдә комдив Миңлеғәли Шайморатов батырлыҡ өлгөләре күрһәткән яугирҙарына (һәләк булып ҡалғандарҙан һәм госпиталдәргә ебәрелгәндәренән башҡа) орден-миҙалдарҙы үҙ ҡулы менән тапшыра. Юғары дәүләт наградаларына лайыҡ булыусылар араһында ҡыҙылармеец Ярулла Бакиров (үлгәндән һуң), өлкән лейтенанттар Ғәли Вахитов, Василий Гудым, Бәҙри Мәмбәтҡолов, лейтенанттар Ғариф Жданов, Сафый Ниғмәтуллин, кесе лейтенант П.И. Столбов, кесе политрук Мотаһар Галин (үлгәндән һуң) һәм башҡа йөҙәрләгән шайморатовсылар була.

1943 йылдың 2 февраленән 8-се кавкорпус 3-сө гвардия армияһы составында хәрәкәт итә. Төп маҡсат - Ворошиловград ҡалаһын дошмандан азат итеү. Әммә немецтарҙың алдан әҙерләнгән оборона һыҙығын тиҙ арала ғына емереү мөмкин булмай. Ҡалаға яҡын уҡ килеп еткән совет частарына дошман аяуһыҙ ҡаршылыҡ күрһәтә, һөжүмгә йүнәлгән хәрби көстәр дошман артиллерияһы уты аҫтына эләгә, самолеттарҙан бер өҙлөкһөҙ тиерлек бомбаға тотола. Гитлер генералдарына ҡәтғи бойороҡ бирә: Донбасстан артҡа сигенгән өсөн уларҙы ҡаты яза көтәсәк. Ҡан ҡойошло алыштар ҡыҙғандан-ҡыҙа бара.

8 февралдә корпус командиры, генерал-майор М.Д. Борисов армия командующийынан приказ ала: дошмандың алғы һыҙығы аша йырып үтеп, уның тылына сығырға, көнбайышҡа табан хәрәкәт итеп, Ворошиловград - Дебальцево тимер юлын киҫергә, Чернухино һәм Дебальцево тимер юл станцияларын алырға.

Комкор Борисов 11 февралгә ҡаршы төндә дивизияларға дошмандың алғы һыҙығына табан ҡуҙғалырға бойороҡ бирә. 112-се Башҡорт дивизияһына Ворошиловск йүнәлешендә һөжүм итеп, дошман тылына тәрән рейдҡа сығырға, немец ғәскәрҙәренең тыл частарын юҡ итеп, Дебальцево станцияһын алырға, Ворошиловград - Дебальцево һәм Чистяково - Дебальцево тимер юлын киҫергә бойорола.

Шул уҡ көндөң кисендә комкор Борисов генерал-майор М.М. Шайморатовҡа уның корпус командирының беренсе урынбаҫары вазифаһына тәғәйенләнеүе һәм рейдтан һуң ошо бурысты үтәй башларға кәрәклеге хаҡында хәбәр итә.

Сталинград өсөн барған һуғыштарҙа ҙур юғалтыуҙарға дусар булған 112-се Башҡорт атлы дивизияһы рейдҡа тулы составында сыға алмай: дивизия тере көстәр менән 45 процентҡа, аттар менән - 35 процентҡа, орудие һәм минометтар менән 40 процентҡа тиклем генә тәьмин ителгән була. Мәҫәлән, 313-сө полкта ни барыһы 312 яугир була (ул ваҡыттағы штат буйынса полкта 1500 тирәһе һалдат булырға тейеш).

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

✓ *Балалар физик яҡтан үҫешергә тейеш, ололарға һорауҙар яуҙырып, тәрбиә алырға тейеш. Уларға бары тик 20 минут ваҡыт бүлергә кәрәк. Эгоистик ата-әсә балаларын гаджет хөкөмөнә биреп, уларҙан алйот яһай!*



*ФЕКЕР АЛЫШАЙЫҠ!*

# АЙЫҠ АҠЫЛ ЙӨРӨТӨҮ -

## хәҡиҡәтте ялғандан айыра белеү ул

**"Донъялағы иң матур күренеш - үҙенә күрһәтелгән юл буйынса барыусы бала күренеше", - тигән Конфуций. Был мәҡәләлә беҙ, атай-әсәйҙәр, балаларға, ейәндәребеҙгә, үҙебеҙҙең бөтә быуыныбыҙға өлгө булараҡ күрһәтергә тейешле юлдар тураһында фекер йөрөтөргә теләйбеҙ. Ул фекерҙәр киләсәк быуынға ижади шәхес булараҡ үҫешергә ярҙам итәсәк, тигән инаныуҙабыҙ.**

Элегерәк дәүерҙә ата-бабаларыбыҙҙың балаларҙы нисек тәрбиәләп үҫтереүен иҫләйек. Ул ваҡытта оло быуын вәкилдәре үҙҙәрен һаҡларға ғына түгел, ә үҫешергә лә тейеш булған. Һәр кем эске һәм тышҡы донъяһын тормош шарттарына яраҡлаштырырға, эшендә лә, йәшәйешендә лә гармонияға өлгәшергә ынтылған. Аллаһы Тәғәлә гармонияға ынтылыусыларға ярҙам итә, тигән әйтем йәшәп килә. **Шуның өсөн дә ата-бабаларыбыҙ ғүмерҙең һәр өлөшө өсөн төрлө йолалар системаһы эшләгән.** Мәҫәлән, ир-егеттәр өсөн төрлө байрамдар ойошторолған, улар ваҡытында таһыллыҡ, көс, рухилыҡ, ырыуҙың ауыҙ-тел ижадын белеү һәләтлеге тикшерелгән, йолаларҙы үтәү һәм уларҙы таныу ҡаралған. Шуның һөҙөмтәһендә 11-12 йәштәрҙә малайҙарҙың егет ҡорона инеү йолаһын атҡарыу йәшәп килгән. Былар барыһы ла балаларҙың физиологик үҫеше, уларҙың енси яҡтан өлгөрөүе өсөн эшләнгән. Бына ошондай йолалар һәр төрлө этностарға меңәр йылдар буйына йәшәргә мөмкинлек биргән. Бындай талаптарҙы үтәй алмаусы халыҡтар әкренләп юҡҡа сыҡҡан.

Киләсәктә, бәлки, инициация күренешенең бүтән критерийҙары булыр, әммә оло тормошҡа аяҡ баҫыу меңәр йылдар буйына тап йолалар системаһы буйынса барған. Һәр кем үҙенең социаль төркөмөндә булған, бер-береңә ярҙам итеү, коллектив аң хөкөм һөргән. Һәр халыҡтың йәшәйеше берҙәмлеккә өлгәшеү маҡсатына өлгәшеүгә йүнәлдерелгән булған.

Совет осоронда тышҡы йәшәйеш шарттары ла үҙенсәлекле булған. Система йәш быуынды ижтимағи тормошҡа йәлеп итеүҙең төрлө структураларын - октябрят, пионерҙар, комсомол кеүек ойошмалар булдырған. Шәхес ошо ижтимағи баҫҡыстар буйынса үҫешә барған, йәмғиәттә үҙ урынын тапҡан. Балалар бала саҡтан уҡ үҙҙәренең етәкселек һәм ойоштороу оҫталыҡтарын һынаған, төрлө холоҡ һыҙаттарын камиллаштырған. Ололар балаларҙың йәмғиәттәге антисоциаль ҡылыҡтарын күҙәтеп, уның төрлө күренештәрен тыйып, иҫкәртә барған. Тимәк, оло быуын тәрбиә өсөн яуап бирә, һәр баланы урынына ҡуйыу, уны дөрөҫ юлға баҫтырыу хоҡуғын ала. Ләкин бөгөнгө көндә оло быуынға ҡарата хөрмәт юғала бара, йәштәр балалар алдында һәм ололар булғанда әшәке һүҙҙәр менән һүгенә ала, йәмғиәт урындарында тәмәке тарта, сүп-сар ташлай. Ләкин уларҙы бынан бер кем дә тыя алмай, сөнки, табу - нимәнелер тыйыу - онотолған...

Либерализм хөкөм һөргән 30 йыл эсендә илебеҙ йәмғиәте тышҡы ысынбарлыҡтың яңы шарттары менән осрашты. Мин долларҙың глобаль донъя кризисы йәки төрлө валюта зоналарына тарҡалыуы хаҡында һөйләмәйем, шулай ҙа ул һәр беребеҙгә ҡағыласаҡ. Һүҙ хәҙерге быуынды әхлаҡи һәм донъяға ҡарашы йәһәтенән тәрбиәләүҙә нимәнең өҫтөнлөк алыуы хаҡында бара. Иерархия формаһында урынлашҡан дәүләт структураларын үҙ эсенә алған либераль система формаль күренешкә әйләнде. Уның урынын дәүләткә буйһонмаусы интернет донъяһындағы Вконтакте, Инстаграм, ТикТок ише социаль селтәрҙәр биләне. **Аңһыҙ йәш быуын уларҙа йәшәй, 90 процент йәш кешелә үҙ-үҙенде яратыу кеүек холоҡ сифаттары**



*Кескәйҙәргә гаджет биргән ата-әсә уларҙағы һәр төрлө программаларҙың мәғлүмәт йыйыуы, уның көнбайыш серверҙарында тупланыуы тураһында уйланмай. Уның һөҙөмтәһендә һәр кемдең психологик портреты төҙөлә, манипуляциялар һәм цифрлы компаниялар ярҙамында шәхестең аңын формалаштырыу өсөн бөтә шарттар тыуа. Хәҙерге көндә балаларҙы коллективтарға туплауҙың механизмдары юҡ, уларҙа яуаплылыҡ тойғоһо тәрбиәләнмәй, йәштәрҙең инфантиль булыуы йәмғиәт бәләһенә әйләнде.*

**тәрбиәләнә.** Шуны онотторға ярамай: бөгөнгө "БДИ йәштәре" шәхес булараҡ үҫешеп етмәгән (инфантилизм), уларҙа нимәнелер айырыу сифаты юҡ. Хәҙер был социаль селтәрҙәр йәштәрҙе ҡайҙа алып китер - бер кем дә белмәй, ул емеш йыйыумы, макулатура, тимер туплаумы, китаптар донъяһында үҙ-үҙенде табыумы? Ҡарағыҙ, йәштәр социаль селтәрҙәрҙә нисек кенә күңел асмай, маймыл булып ҡыланамы, төрлө флешмобтар ойошторамы, ниндәйе генә юҡ!

Был йәштәр менән эшләүҙәге иң оло хата! Ә бит тап ошо ыңғай энергияны улар икенсе төрлө юлға ебәрә ала ине, ләкин уларға кем уны күрһәтһен?

Нимәһе ҡыҙыҡлы, ата-әсәләр балаларын үҙҙәре төрлө гаджеттарға ылыҡтыра (телефон, компьютер), уларҙы ниндәй мәғлүмәт донъяһы көтөүе хаҡында иҫкәртмәй. Шуның менән ата-әсәләр балаларына иғтибар бүлмәй, үҙҙәренең һөйөүен уларға таратмай. Тик гаджет ҡына баланың бөтә иғтибарын йәлеп итә. Ата-әсәгә был киләсәктә нимә менән янай? Гаджет аша төрлө контент менән бәйләнешкә инеүсе баланан нимә көтөп була? Балалар физик яҡтан үҫешергә тейеш, ололарға һорауҙар яуҙырып, тәрбиә алырға тейеш. Уларға бары тик 20 минут ваҡыт бүлергә кәрәк. Эгоистик ата-әсә балаларын гаджет хөкөмөнә биреп, уларҙан алйот яһай! Популяр психолог Курпатов был күренеште цифрлы аутизм тип атай.

Кескәйҙәргә гаджет биргән ата-әсә уларҙағы һәр төрлө программаларҙың мәғлүмәт йыйыуы, уның көнбайыш серверҙарында тупланыуы тураһында уйланмай. Уның һөҙөмтәһендә һәр кемдең психологик портреты төҙөлә, манипуляциялар һәм цифрлы компаниялар ярҙамында шәхестең аңын формалаштырыу өсөн бөтә шарттар тыуа. Хәҙерге көндә балаларҙы коллективтарға туплауҙың механизмдары юҡ, уларҙа яуаплылыҡ тойғоһо тәрбиәләнмәй, йәштәрҙең инфантиль булыуы йәмғиәт бәләһенә әйләнде.

Дәүләт Думаһы йәштәр сәйәсәте тураһында закон ҡабул итте. Уның буйынса, йәшлек 35 йәшкә тиклем "оҙайтылды". Йәмғиәткә яуаплы, ниндәй социаль иерархияла урынлашыуына ҡарамаҫтан, үҙ өҫтөнә төрлө бурысты алыусы ир-ат кәрәк.

Йәштәрҙең яуапһыҙлығы тураһында республикалағы 75 процент ғаилә тарҡалыуҙары ла, урамдарҙағы төрлө митингылар, ваҡиғалар ҙа һөйләй. Былар йәштәр сәйәсәтендә ижтимағи механизмдарҙың булмауы, төрлө деструктив көстәрҙең йәш быуын энергияһын социаль хаосҡа йүнәлтеүе хаҡында иҫкәртә.

Билдәләргә кәрәк, төрлө йәштәр ойошмалары, йәкшәмбе мәктәптәре, хәрби-патриотик үҙәктәр бар, ләкин улар бик әҙ. Бөгөнгө көндә элегерәк дәүер традицияларын тергеҙеү талап ителә. Халҡыбыҙҙың традициялары, ғөрөф-ғәҙәттәре уға быуаттар буйына йәшәргә ярҙам иткән. Телебеҙҙе һаҡларға, үҫтерергә кәрәк! Беҙ һәр саҡ билингвистик этнос булдыҡ, шуға ла күп халыҡлы Рәсәйҙә йәшәй алдыҡ. Шуның өсөн дә совет дәүеренән дә иң яҡшыһын алырға, төрлө үҫмерҙәр, йәштәр ойошмалары эшен яйға һалырға, белем системаһын үҙгәртергә кәрәк.

**Бөгөнгө йәштәр социаль селтәрҙәрҙән килеүсе хәүеф менән осрашты. Улар ата-әсәгә лә, дәүләт структураларына ла буйһонмай. Педагог булараҡ, йәш быуындың мәғлүмәти хәүефһеҙлеген тәьмин итеү кәрәк тип һанайым. Бының өсөн изгелек һәм яуызлыҡты танырға өйрәтеү, табу системаһын тергеҙеү, уның аша белем биреү системаһын яҡшыртыу мөһим. Ҡытай һәм Көнбайыштың юғары элиталарының үҙ балаларын нисек тәрбиәләүенә ҡарап өйрәнергә кәрәк, улар махсус мәктәптәрҙә уҡый, һуңғыларында тәртип һәм ҡәтғилек хөкөм һөрә. Тәртип боҙоуҙар һәм тыңламау арҡаһында хатта олигарх балалары ла уҡыу ойошмаһынан ҡыуыла ала.**

Ләкин бөгөнгө балалар Болон системаһы буйынса уҡый әле, ул Ҡытай, Япония, Израиль кеүек илдәрҙә йәшәп килеүсе иң яҡшы белем биреү системаһын алыштыра. Элиталар Советтар Союзына 30 йыл эсендә индустриаллаштырыуға өлгәшергә ярҙам иткән, космосты яуларға мөмкинлек биргән белем биреү системаһы тураһында яҡшы белә. Беҙгә уға ҡайтырға кәрәк. Беҙ, ата-әсә булараҡ, балаларға төп предметтар буйынса белем бирергә, талантлы йәштәргә төрлө өлкәлә үҙҙәрен табырға ярҙам итергә тейешбеҙ.

Логика, Психология, Философия, Риторика, Астрономия, Тригонометрия кеүек предметтар өҫтөнлөк итеүсе уҡыу йорттарында либераль элиталар халыҡты белемле ҡулланыусы тип тәрбиәләүҙе маҡсат итеп ҡуя, совет мәктәбендә иһә ижадсы шәхес үҫтереү төп бурыс ине. Хәҙерге көндә иһә, тышҡы ысынбарлыҡтың киҫкен шарттары ваҡытында, балаларҙа айыҡ аҡыл тәрбиәләү өҫтөнлөклө булып тора. **Айыҡ аҡыл - ул кешенең иң юғары сифаттарының береһе, айыҡ фекер йөрөтөү, саф аң һөҙөмтәһендә тыуа. Уға таянып, үҙ уйҙарынды һәм хистәреңде дөрөҫ юлға һалып була. Аҡыллы кеше төрлө сиктәрҙе аша сыҡмай, экстремаль ситуацияларҙа үҙ-үҙен юғалтмай. Уларҙы төрлө идеялар менән "әүрәтеү" һирәк күренеш, сөнки**

**быйндай шәхес һәр нәмәгә дөрөҫ баһа бирә ала.**

Айыҡ фекер йөрөтөү - ул йәшәйешкә дөрөҫ баһа биреү тигән һүҙ. Быйндай кеше логика менән әүрәп китмәй, интуиция, фантазияға, уй-фекергә урын бирә. Әгәр аң интуицияны ситкә этәрә икән, был кеше аҡылы түгел, ә психиканың хайуандарса төҙөлөшө. Тимәк, айыҡ фекер йөрөтөү - ул сәләмәт фекерләү, һәр төрлө ситуацияларҙа һәм йәшәйештә үҙенден аҡыл һәләтенә таянып эш итеү. Ул ентекле әҙерлек һәм практик яҡтан эшсәнлек талап итә. Әгәр мейене күнекмәләр аша эшләтмәйбеҙ икән, быға өлгәшеү мөмкин түгел.

**Беҙҙең һәр беребеҙ үҙен аҡыллы һәм белемле кеше тип һанай. Ләкин беҙ юғары технологиялар заманында йәшәйбеҙ, һәр кем ниндәй ҙә булһа профессияға өйрәнә ала, төрлө телдәргә өйрәнеү мөмкинлегенә эйә. Шулай ҙа күп кеше быйндай мөмкинлекте ҡулланамы икән? Йыш ҡына кеше мәғлүмәт океанында бата, туҡтауһыҙ бер сығанаҡтан икенсеһенә күсә. Быйның һөҙөмтәһендә кешенең хәтере насарая, фекерләү оҫталығы түбәнәйә, иғтибары тарҡала. Социаль селтәрҙәрҙә аралашҡанда кешеләр бер-береһен ишетмәй. Һәр кем үҙе тураһында һөйләй. Кешеләр үҙҙәренең уйҙарын яҡлай, тик үҙен генә айыҡ аҡыллы тип һанай, төрлө патологияларҙы йөрөтөүҙәрен дә белмәй.**

Фекерләү деградацияһы ҡурҡыу уята. Айыҡ фекерләү тураһында уйлағанда провокацион мәғлүмәти ресурстар тураһында ла онотторға ярамай. Улар мәғлүмәти сығанаҡтан бигерәк кешегә психологик йоғонто яһау ҡоралына әйләнә. Быйның өсөн социаль селтәрҙәр тыуған, улар кешеләрҙең теләктәрен һәм үҙ-үҙен тотошон юлға һалыу сараһы булып тора. Кешенең аң-аҡылына тура йоғонто яһау алымдары һынала. Уның асыҡ миҫалы - "Ҡаҙан атыусыһы" фажиғәһе.

Киң мәғлүмәт саралары кешенең аңына төрлөсә тәьҫир итә. Айырым сәйәсмәндәрҙең, эксперттарҙың, философтарҙың айыҡ аҡылға эйә булмай, провокациялар менән йәшәүе төрлө ижтимағи бәләләр сығанағы булып тора. Фуркан буйынса, айыҡ аҡыл йөрөтөү - хәҡиҡәтте ялғандан айыра белеү ул. Уның аша ғына юғары аҡыл эшмәкәрлегенә, аң бейеклегенә өлгәшеп була. Кешенең донъяны ҡабул итеүе уның ниндәй уйҙар менән йәшәүенә бәйле.

Хәҙерге ваҡытта Ҡытай астрологияһы буйынса беҙ Ҡыҫала тамғаһы йондоҙлоғонда йәшәйбеҙ. Ҡыҫала дәүере - мәғлүмәт осоро тип һанала. Киләсәк быуындың мәғлүмәти хәүефһеҙлегенә өлгәшеп була, быйның өсөн ғәрәф-ғәҙәттәр, мәҙәниәт хаҡында белем бирергә кәрәк. Башҡалар нисек уйлай - фекер алышайыҡ.

**Шамил БАТЫРШИН,**
**Башҡорт дәүләт университеты уҡытыусыһы.**

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

# БАЛАЛАРҘЫ ТАЛАНТЛЫ УҠЫТЫҒЫҘ!



**Август - ҡыҙыу осор, тиһәк, моғайын да, бер ниндәй яңылыҡ асмабыҙ. Ысынлап та, элек-электән ул уңыш йыйыуҙың, йәйге эштәрҙең ҡыҙған мәле. Быйылғы ҡоролоҡ уға тағы ла ныҒыраҡ ҡыҙыулыҡ өҫтәп ебәрҙе: республиканың төрлө мөйөштәрендә тыуған еребеҙҙең үпкәһе булып һаналған урман-ҡырҙарыбыҙ яна. Ошондай уттай ҡыҙыу мәлде республиканың мәғариф системаһы ла кисерә: юҡ, унда янғын да, уңыш йыйыу осоро ла түгел, киреһенсә, яңы уҡыу йылына әҙерлек бара. Республика август кәңәшмәһе алдынан Өфө ҡалаһының милли һәм полилингваль дөйөм белем биреү ойошмалары етәкселәре Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетында осрашып, "Милли белем биреү ойошмаһының муниципаль моделе: тәжрибә һәм үҫеш перспективалары" дискуссия майҙансығында эш тәжрибәһе менән уртаҡлашты.**

Төрлө сәбәптәр арҡаһында бөгөн милли мәктәп тип аталған ойошмаларҙа ла белем биреү процесын тулыһынса милли телдәрҙә алып барып булмауы бер кемгә лә сер түгел. Әммә шундай шарттарҙа ла дилбегәне ҡулда уңышлы тоторға мөмкин. Быны милли белем биреү усаҡтары директорҙары үҙ миҫалдарында күрһәтте лә инде. ***Уҡытыу һәм тәрбиә процесы барышында нисек итеп халыҡтың телен һәм йолаларын һаҡлап ҡалып булыуын баш ҡаланың М. Исҡужин исемендәге 136-сы Башҡорт лицейы директоры Шәмсулла Хәбибрахмановтың сығышы раҫланы:*** "Халыҡ йолалары аша бирелгән тәрбиә уҡыусыларҙа халыҡ тарихына ҡыҙыҡһыныу, илһөйәрлек тойғоһо уята, - тине ул. - Лицейыбыҙҙа уҡыусыларҙың башҡорт телендә аралашыуы халыҡ мәҙәниәтен, йолаларын, тарихын өйрәнеүгә ҙур мөмкинлек бирә. Йыл да үткәрелгән "Шәжәрә байрамы"на уҡыусылар бик етди әҙерләнә. Һәр бала үҙенең ғаилә тарихын ентекле өйрәнә, уларға ярҙамға ата-әсәләр килә, хатта өс быуынын ғына белгән ата-әсәләр ҙә ҡыҙыҡһынып китеп, шәжәрәһен киңәйтә, ҙурайта башлай. Танылған шағир, яҙыусы йәки билдәле шәхестәрҙең шәжәрәһен өйрәнеү тәрбиәүи йәһәттән бик әһәмиәтле.

Ветерандар, ғалимдар, яҙыусылар һәм башҡа сәнғәт, мәҙәниәт эшмәкәрҙәре, лицейҙы төрлө йылдарҙа тамамлаған уҡыусылар менән осрашыуҙар, уларҙың ҡаҙаныштары тураһындағы сығыштары балаларҙа илһөйәрлек тәрбиәләүҙә, буласаҡ һөнәр һайлауҙа ҙур роль уйнай. Башҡортостандың тарихы, географияһы, тәбиғәте һәм тәбиғи ҡомартҡылар тураһындағы ерле материалдарҙы, мәҙәниәт өлкәһендәге ҙур ҡаҙаныштарҙы эш тәжрибәһендә ҡулланыу уҡыусыларҙа тыуған ергә һаҡсыл ҡараш һәм һөйөү тәрбиәләй". Шәмсулла Хәбибулла улы яуланған ҡаҙаныштары менән уртаҡлашып, яңы уҡыу йылына маҡсаттары һәм бурыстары менән дә уртаҡлашты. "Лицейыбыҙ - "Милли кәсепкә - яңы һулыш" республика фестивален башлап ебәреүсе һәм ойоштороусы. Был сара быйыл декабргә планлаштырыла", - тине ул.

***Раул Бикбаев исемендәге 102-се Башҡорт гимназияһы директоры Илһам Ғайсин уҡыусының шәхесен тәрбиәләүҙә һәм үҫтереүҙә тыуған телдең роле менән үҙе етәкләгән белем усағында ҡулланылған эш алымдары аша таныштырҙы:*** "Юғары технологиялар быуатында үткәндәрҙе бөгөнгө һәм киләсәк менән бәйләп торған еп юғала. Шуға күрә мәктәп һәм уҡытыусы халҡындың йолаларын, ғөрөф-ғәҙәттәрен тергеҙергә һәм һаҡларға ярҙам итергә тейеш. Беҙҙең гимназияның өҫтөнлөклө эш йүнәлештәренең береһе булып милли мәҙәниәтте һаҡлау һәм юғары белемле, һәр яҡлап үҫешкән толерант шәхес тәрбиәләү тора. Быйның өсөн тыуған теленде генә белергә түгел, уның тарихы, географияһы, мәҙәниәте менән дә таныш булыу кәрәк. Гимназиябыҙҙа дөйөм белем биреү предметтары дәрестәрендә уҡыусылар башҡорт телендә төп терминдарҙы, билдәләмәләрҙе өйрәнә, быйның өсөн махсус дәфтәр тотоп, үҙенә күрә бер һүҙлек булдыра. Физкультура дәрестәрендә халыҡ уйындары элементтары индерелә, технология дәресендә милли кейем элементтары тегелә, биҙәүестәр эшләнә, милли ризыҡтар әҙерләнә. Йыр дәресендә башҡорт халыҡ йырҙары өйрәнелә, рәсем дәресендә башҡорт орнаменты элементтары төшөрөлә".

Илһам Зиннур улының сығышынан мәғлүм булыуынса, уларҙың белем усағында батырҙарҙың "Көрәш", ҡурайсыларҙың "Атайсал", фольклорсыларҙың "Хазина", театр һөйөүселәрҙең "Тамаша" түңәрәктәре эшләй. Бынан тыш гимназияның үҙенең радионөктәһе һәм телевидениеһы бар. Унда уҡыусылар башҡорт һәм рус телендә гимназия яңылыҡтары менән таныштырып тора. "Тамсылар" башҡорт йырын башҡарыусыларҙың ҡала фестивален үткәреү ҙә хәҙер традицияға әйләнгән. Маҡсаты башҡорт милли сәнғәтен пропагандалау һәм үҫтереү булған был сарала ҡатнашыусы балаларҙың заманса йырҙарға ғына түгел, оҙон көйҙәргә мөрәжәғәт итеүе лә ҡыуаныслы. 2020-2021 уҡыу йылында гимназия базаһында "Бикбай уҡыуҙары" төбәк-ара ғилми-ғәмәли конференция үткәрелә. Унда барлығы онлайн-форматта республиканың төрлө төбәктәренән 400 уҡыусы һәм уҡытыусы ҡатнаша.

***Мостай Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһы, моғайын да, республика милли мәғариф системаһында үҙенең эшмәкәрлеге һәм эш алымдары буйынса иң алдынғыларҙың береһелер. Бында, әлбиттә, тәжрибәле педагог һәм етәксе Гөлназ Әхмәҙиеваның өлөшө бик ҙур. Башҡортостан мәғарифының заманса уҡытыу өлкәһе ағинәйе булған Гөлназ Ғафир ҡыҙының сығышы ла иң сағыу һәм фәһемле, теләһә ниндәй мәктәп директорына бөгөндән ҡулланма итеп алырлыҡ булды:*** "Бынан бер нисә йыл элек мәғариф идаралығы органдары етәкселәренең береһе тарафынан "Милли мәғариф юҡ!" тигән фекер яңғырағайны. Бөгөн иһә мәғариф өлкәһендә сәйәсәт тамырынан үҙгәрҙе, - тине Гөлназ Ғафир ҡыҙы һәм һүҙҙәрен раҫлап, миҫалдар килтерҙе. - Хоҡуҡи-норматив база үҙгәрҙе, "Мәғариф тураһында"ғы закондың төп статьялары һәм уның нигеҙендә булдырылған хоҡуҡи акттар яңыса ҡаралды, милли мәғарифтың стратегияһын һәм тактикаһын билдәләүсе яңы структуралар - БР Мәғариф министрлығында Милли мәғариф идаралығы, Дәүләт һәм тыуған телдәрҙе үҫтереү һәм һаҡлау фонды, Милли мәғариф буйынса ресурс үҙәге булдырылды. Шул уҡ ваҡытта белем биреү ойошмалары алдына юғары дәғүәселеккә һәләтле булыу бурысы килеп баҫты. Дәғүәселек - ул мәктәп, гимназия, лицейҙың мөмкинлектәре берлеге, дәғүәселек факторы мәжбүри характерға эйә һәм беҙҙе белем биреү һәм тәрбиә системаһы сифаты менән бер туҡтауһыҙ шөғөлләнергә мәжбүр итә".

Гөлназ Ғафир ҡыҙы фекеренсә, түбәндәге пункттар дәғүәселек факторҙары булып тора: директорҙың һөҙөмтәле маркетинг эшмәкәрлеге, инновацион эшмәкәрлек, кадрҙар сәйәсәте. Дөрөҫ һайланған сәйәсәт һөҙөмтәһендә бөгөн М. Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһында ГПД һаҡлап алып ҡалынған, ФГОС-тың 5 йүнәлеше буйынса 40-лап түңәрәк һәм берләшмә эшләй, йыл һайын 1-3 кабинет бөтөнләй стандарт булмағанса йыһазландырыла, уҡытыусылар күрһәтә алмаған дәғүәселеккә һәләтле эшмәкәрлек төрҙәре буйынса (менталь арифметика, робототехника, художестволы гимнастика, тхэквондо, шашка, ушу, футбол, Нариман Сабитов исемендәге 1-се музыка мәктәбе филиалы, ДЮСШ-лар филиалдары) арендаторҙар йәки партнерҙар саҡырыла.

**(Дауамы 11-се биттә).**

✓ **Хахылдашҡандар араһында бер башҡорт та була. Теге француз менән имсегә текләп тора ла: "Бәй, был минең уҡ табаһа. Бына тамғаһы бар", - тип күрһәтә. "Уҡты ни эшләтергә итәһең?" - тип һорай имсенән.**






– Россияла йәшәй икән улар, Урал тауы тирәһендә. Борон-борондан уҡ һәм ян менән ҡоралланып, атҡа менеп һуғышҡа ла, һунарға ла, мал көтөргә лә йөрөгәндәр. Боронғо ғәҙәтен әле лә ташламайҙар икән. Уларҙы Александр Беренсе ҡоралландырмай, кейендермәй, ти, өйөнән ниндәй кейемдә сығып киткән, - шулай йөрөй бирә.

- Башҡорт тигәнегеҙ татармы ни?

- Юҡ, беҙ һорашҡан урыҫ офицеры улай тимәне.

- Урыҫтар Россияла йәшәгән халыҡты урыҫҡа һәм татарға ғына бүлә лә инде. Урыҫ булмағас, татар була инде.

- Теге офицер ҡабат-ҡабат башҡорт тип әйтте.

- Күпме инде улар?

- Бында килгәнеме, әллә барлығымы?

- Миңә беҙгә ҡаршы һуғышҡанының һаны кәрәк.

- Теге офицерҙан һорашҡайныҡ, белмәйем, тине.

- Ярар, тағы ла берәрһен табып, ныҡлабыраҡ һорашығыҙ. Башҡорттоң үҙенән һорау ала алһағыҙ, бигерәк тә яҡшы булыр. Шунан миңә әйтерһегеҙ.

- Тыңлайым.

Башҡорттарҙан ҡурҡҡан өсөн, йә бүтән берәр сәбәп арҡаһында ҡыҙыҡһынманы Наполеон башҡорттар менән. Ғәҙәте шулай. Бер һорауға яуап эҙләргә тотонһа, шуны һәр ваҡ ҡына бөртөгөнә тиклем белмәйенсә, туҡтамай. Кис еткәс, теге һанат һаман һүҙ башламағас, Наполеон үҙе хәтерләтте быны.

- Башҡорт тураһында белешеп бөттөгөҙмө?

- Әллә ниндәй яңылыҡ аса алмаңыҡ, тәксир.

- Ниңә?

- Әсирҙәр араһында башҡорттар юҡ. Уларҙы әсиргә алып булмай, тиҙәр.

- Бөтөн халыҡты ла әсир итеп була, быларҙы юҡ, имеш. Әкиәт һөйләйһең.

- Нимә тип әйтһәгеҙ ҙә, әсирҙәр араһында башҡорт юҡ инде.

- Ярар.

Ҡараңғы төшә башлағас, һуғыш туҡтала, иртәгеһенә ҡараһалар, бер генә урыҫ яугиры юҡ: тереһе лә, үлеһе лә юҡ. Төн йөҙөндә ҡайҙалыр китеп бөткәндәр. Ике яҡ гәскәре лә хәлһеҙләнгән, икеһенә лә ял кәрәк. Туҡтайҙар.

Иртәгеһенә һуғыш яңынан башланмай. Һәр яҡ та үҙенең юғалтыуҙарын һанай, халыҡсан итеп әйтһәң, һәр кем "яраһын ялап бәйләй". Рәсәй гәскәре был алышта утыҙ мең кешеһен юғалта, французлар - егерме мең. Польшаға ингәне бирле Наполеон гәскәре алтмыш мең кешегә кәмегән. Шуға ул йәштәрҙе хәрби хеҙмәткә алыу тураһында яңы фарман бирә.

Бонапарт электән килгән үҙенең йолаһы буйынса, кисәге һуғыш яланын сығып ҡарай. Өҫтө-өҫтөнә тиерлек аралаш урыҫ һәм француз гәскәренең үле һалдаттары ята, шуларҙың араһында үлә алмай ыңғырашҡан яралылар, аттар бар. Ҡабырғаһынан башы сығып торған уҡ күренеп торған бер атты шәйләп, Наполеон туҡтап ҡала. Был бит теге "төньяҡ амурҙарының" уғы. Атылған ҡорал аттың бер ҡабырғаһынан инеп, икенсеһенән килеп сыҡҡан Кәмендә өс-дүрт кешене тишеп сығыр ине, моғайын, бишәүҙе булмаһа. Бонапарт башын сайҡап торҙо ла артабан китте. Былдай уҡты атыусыны яҡындан күрергә ине, тип уйлап ҡуйҙы.

Ҡаты алыштан һуң бер көн уҙғас, Александр Наполеондың штабына кенәз Лобанов-Ростовскийҙы ебәрә. Һуғышты туҡтатыу тураһында килешеү төҙөргә тәҡдим итәбеҙ. Наполеондың да теләге шундай икәнде ул саҡта Александр белмәй әле. Солох тураһында килешеү төҙөлә ҡалһа, ти Рәсәй яғы, беҙҙең берҙән-бер шарт: Рәсәй бер генә ҡарыш ерен бирергә лә риза булмаясаҡ. Французлар Лобанов-Ростовскийҙы яҡшы ҡаршылай, һәйбәт һөйләшә. Рәсәйҙең ерен бүлеп алыу тураһында уйлап та ҡарамағандар. Рәсәй менән килешеү төҙөгәндә бер ниндәй өҫтөнлөккә, байлыҡ алыуға иҫәп тотмайҙар икән. Бынан тыш, ике яҡтан тағы ике илсе юғарыраҡ кимәлдә һөйләшеүҙәр уҙғара һәм ике яҡ та килешеү яҡлы икәнлектәрен белдерә.

Тағы ла бер нисә көндән һуң ике гәскәрҙе бүлеп аҡҡан Неман тигән ҙур йылғаның ҡап уртаһында ике яҡтың белгестәре ҡуҙғалмаҫ һал ҡора, уртаһына бик матур тирмә урынлаштыра. Иртәгәһенә иртәнге сәғәт ун берҙә ике ярҙан ике кәмә йөҙөп китә һәм урталағы һалға килеп төртөлә. Кәмәнән алдараҡ төшкән Наполеон Александрҙы ҡосаҡлап ала:

- Нимәгә һуғышып йөрөйбеҙ инде беҙ? - ти.

- Эйе шул, - ти Александр.

Улар бер-береһен арҡаларынан ҡосаҡлап, тирмәгә инә һәм ике сәғәттән дуҫтар рәүешендә кире сыға. Ҡан ҡойоп, бер-береһен күрә алмаған дошман булған был кешеләр, тип уйламаҫһың да. Тильзит килешеүе ошо рәүешле башлана һәм ике яҡтың да тулы ризалығы нигеҙендә шул ерҙә ҡорола.

* * *

Ошо хәлдән һуң егермеләп көн үткәс, Россия, Пруссия һәм Франция араһында әлеге һуғышты туҡтатыу һәм солох урынлаштырыу тураһында килешеүгә ҡул ҡуялар. Рәсәй яғынан гәскәрҙең баш командующийы Александр Беренсе император ҡул ҡуя, француздарҙан гәскәрҙәң баш командующийы, император Наполеон Бонапарт имзаһын һала.

Ҡағыҙҙарҙы өҫтәлдән йыйып алғас, Наполеон:

- Хөрмәтле император әфәнде, - тип өндәште Александр Беренсегә,- Һеҙҙең менән беҙ солох килешеүе төҙөнөк. Икенсе төрлө әйтһәң, беҙ хәҙер бер-беребеҙгә ҡан дошман түгелбеҙ. Шулай булғас, ҡайһы бер серҙәҙе асырға ла ярайҙыр?

- Нимә тураһында һүҙ, хөрмәтле император?

- Һеҙҙең гәскәрҙә хәҙерге заманға бик үк тура килеп бөтмәгән ҡоралы төркөмдәр бар. Беҙҙең һалдаттар уларға "төньяҡ амурҙары" тигән ҡушамат биргән. Кемдәр улар? Шулар менән яҡынданыраҡ танышҡанда, килешер ине.

Александр Беренсе тәүҙә һүҙҙең нимә тураһында барғанын төшөнөп бөтмәне, шуға янындағы генералдарға һораулы ҡарашын йүнәлтте.

- Башҡорттар тураһында һорай шикелле. Амурҙар уҡлы һәм янлы була бит. Шунан сығып әйтәләрҙер.

Александр тиҙ үк аңланы ла әлеге генералға йомошон да ҡушып өлгөрҙө:

- Башҡорттарҙан һәм иррегуляр гәскәрҙәрҙән бер нисә кешене беҙ сәй эсеп бөтөрөүгә ошонда килтереп еткер. - Үҙе Наполеонға бороло.

- Һеҙҙең ихтыярға амурҙарҙы килтерербеҙ. Әлегә йоланы үтәп, солох килешеүен сәй менән "йыуып" ҡуяйыҡ. - Иркен бүлмәләге гәскәр етәкселәре икенсе бүлмәгә инеп китте.

Рәсәй гәскәрендә иррегуляр әрмендән өс төрлө халыҡ бар ине. Батшаның фарманын үтәргә йүгергән генерал шуларҙың ҡайһыныһын килтерергә икән, тип баш ватып торманы, өсөһөнән дә кешеләр килтерергә ҡушты.

- Башҡорттарҙан өсәү килһен, ҡалғандарынан икешәр. Солох килешеүен "йыуысылар" кире залға сыҡҡанда баяғы генерал һәм йәнә ете кеше бер сафҡа теҙелеп тора ине.

- Кемдәрҙе килтерҙең, таныштыр,- тине батша генералға.

Тегеһе алғараҡ сыҡты:

- Хөрмәтле йәмәғәт, һеҙҙең алда иррегуляр әрме һалдаттары тора. Һеҙ, хөрмәтле император, төньяҡ амурҙары тип атаған һуғышсыларҙың ике полк командиры Буранғол Ҡыуатов менән Айсыуаҡ Үҙебаев һәм полк муллаһы. Уларҙың янында ҡалмаҡ тигән халыҡ вәкилдәре һәм Дон казактарынан ике кеше.

Наполеон Ҡыуатов янына барып баҫты, тәүҙә баштан-аяҡ кейемен күҙҙән үткәрҙе. Башына ҡамсат бүрек, өҫтөнә биҙәкләп, һырлап сигелгән матур елән, аяғына күн итек кейгәйне Буранғол. Баш кейеменә ымлап, Бонапарт:

- Башығыҙға ниңә тиренән тегелгән бүрек кейәһегеҙ? Эҫе түгелме һуң? - тип ҡыҙыҡһынды.

- Йылы кейемгә өйрәнә ул тән. Уның ҡарауы, тире бүрек елкәне, муйынды ҡаплап тора һәм дошмандың ҡылысын кире ҡаҡлыҡтыра, баш һау ҡала.

Бонапарт тел шартлатты.

- Ҡоралдарығыҙҙы ҡарарға яраймы? - тип ян менән уҡ һаҙағына ымланы.

- Рәхим итегеҙ! - тине Буранғол французсалап.

- Оһо! - тине Наполеон. - Минең телемде лә беләһең икән. Ә мин һинекен белмәйем.

Шул арала былар янына тылмас килеп баҫты. Французҙың ни әйткәнен урыҫсаға тәржемәләне. Ә Буранғолдоң полкынан килгән тылмас урыҫсанан башҡортсаға ауҙарҙы. Әлбиттә, бындай аралашыу оҙағыраҡҡа һуҙылды. Уның ҡарауы, Наполеон менән Буранғолдоң ни һөйләшкәне түкмәй-сәсмәй бер-берһенә генә түгел, быларҙы ҡуҙәтеп торған бүтәндәргә лә еткерелә торҙо. Буранғол:

- Минең туған телем башҡорт. Беҙҙең халыҡ Урал тауҙары армыттарында йәшәй, Европа менән Азия тоташҡан ерҙә. Беҙҙең халыҡ унда мең йылдан күберәк тора инде. Бынауыһы ян тип атала, быныһы - уҡ. - Буранғол яу ҡоралдарын күрһәтә башланы. - Ә быныһы - ҡылыс. Быныһы - хәнйәр. Һәр һыбайлыла һөңгө бар әле.

- Амурҙың ҡоралы уҡ менән янды һеҙ күптән тотонаһығыҙмы?

- Үҙемде белә белгәне бирле. Миңә тиклем атай-олатайҙарым да шуларҙы йөрөткән. Уларға тиклем дә булған инде улар.

- Яңыраҡ бер һуғыштан һуң уҙған яу яланын ҡарап йөрөгәндә бер күренешкә юлыҡтым. Бер уҡ атты үтә тишеп сыҡҡан. Шул тиклем көс менән атыламы уҡ?

- Ул ғына нимә ул! Беҙҙең бер һуғышсы аттың иң ҡалын ере - түшен ярып сығарғанс ата.

- Хайран ҡалырлыҡ икән. Шуға беҙ һеҙҙе Төньяҡ амурҙары тип атайбыҙ ҙа инде. Үпкәләмәйһегеҙме был ҡушаматҡа?

- Юҡ. Ҡушаматҡа үпкәләп йөрөй торған бала-саға йәшенән уҙғанбыҙ бит инде. Өҫтәүенә, ҡушамат исем түгел, мәңгелеккә йәбешмәй.

Шулай тине лә ул Буранғол, тик был ҡушаматтың йөҙәр йылдар буйы башҡорттан юйылмаясағын ул ҡайҙан белһен инде...

Наполеон текләп торҙо ла Буранғолға ҡулын һондо. Тегеһеһе лә бирҙе ҡулын. Ныҡ итеп ҡыҫыштылар, шунан Наполеон боролоп китте. Атлаған ыңғайы уң ҡулын һелкетә барҙы. Күрәһең, Буранғол тегене самаһыҙыраҡ ҡыҫып ташлаған инде. Ә Наполеон үҙенең подполковнигы менән булғанды ишетһә, йә күрһә, нимә тиер ине икән?

Был хәл Тильзит килешеүенә тиклемгә яуҙың һуңғы көнөндә була. Французлар менән атыштан һуң урыҫтар ярлы бер нисә әсирҙе алып киләләр. Берәүһе бигерәк мәрәкә хәлдә була. Хоҙай Тәғәлә тегеңә танауҙы үлсәүһеҙ биргән дә ҡуйған - бигерәк елле икән тын алғысы. Уның ҙурлығы бер хәл. Икенсеһе тағы ла ирмәгерәк. Бер башҡорттоң атҡан уғы тегенең танауына тейгән. Тейгән дә танауҙы үтә тишкән. Әммә уҡ шул урында тороп ҡалған. Килә француз аяғын саҡ һөйрәп, биленә етә яҙғансы башын әйеп. Уҡ тейгәнгә байтаҡ ваҡыт үткәндер инде, күрәһең, уҡ тейгән тишектән аҡҡан ҡан ҡатып бөткән. Ғәскәри имсе килеп, французды танауына ҡарап торҙо ла, уҡты танау янынан ҡырҡып, һурып сығармаҡсы булды. Французҙың көлкө күренешенә ҡарап, хахылдашҡандар араһында бер башҡорт та була. Теге француз менән имсегә текләп тора ла:

- Бәй, был минең уҡ табаһа. Бына тамғаһы бар,- тип күрһәтә. - Уҡты ни эшләтергә итәһең? - тип һорай имсенән.

- Ҡырҡам да шунан һурып алам.

- Бирмәйем. Минең уҡты ҡырҡмаҡсы булаһың, бирмәйем. Миңә кәрәк ул. Артабан французҙың танауын ғына түгел, башын яра атам. Хәҙер үҙем матур ғына итеп тартып алам, уҡты һындырмау ғына түгел, сатнатмайым да.

- Һинең уғың бөтөн ҡалыр ҙа ул. Ә был танау ни эшләр икән һуң һин уҡты тартҡан саҡта,- тип һорай имсе.

- Эйе шул, - ти башҡорт.- Ярар инде, ҡырҡ уҡты. Был тиклем танауҙы ҡырҡһаң да булыр ине лә бит. Ярар инде, әйҙә, этләнмәһен француз, ул да кеше бит.

Ошо хәлдә иҫенә төшөрҙө Буранғол Наполеондың усын һелкеткәнен күреп.

**(Дауамы. Башы 31-34-се һандарҙа).**

***✓ Әлеге ваҡытта ата-әсәләр менән генә түгел, балалар менән дә эш алып барыу зарур. "Балаларҙы талантлы уҡытығыҙ - ул саҡта барыһы ла яҡшы буласаҡ" тигән һүҙҙәрҙе оноторға ярамай.***



ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

# БАЛАЛАРҘЫ ТАЛАНТЛЫ УҠЫТЫҒЫҘ!

**(Башы 9-сы биттә).**

Инновацион эшмәкәрлек - белем биреү сифатын үҫтереүҙә ҡеүәтле фактор булып тора. Был йәһәттән замана уҡытыусыһы электрон, ситтән тороп белем биреү ысулдарын, әҙер электрон ресурстарҙы ҡулланыу ғына түгел, үҙенең системаһын да булдырырға тейеш. Бынан тыш, мәктәп-вуз хеҙмәттәшлеге лә мөһим роль уйнай. Әлеге ваҡытта гимназия М. Аҡмулла исемендәге БДПУ, ӨДНТУ, БДМУ, БДУ, ӨДАТУ, РФ Эске эштәр министрлығы ҡарамағындағы Өфө дәүләт юридик институты, БР Башлығы ҡарамағындағы Башҡортостан дәүләт хеҙмәте һәм идара итеү академияһы менән килешеүҙәр төҙөгән. Татарстан Республикаһының Иннополисы һәм Долгопрудный ҡалаһының МФТИ-һы менән килешеү төҙөү бындай хеҙмәттәшлектең сиктәрен киңәйткән. Һөҙөмтәлә уҡыусылар мәктәптә уҡығанда уҡ үҙҙәренең һәләтенә тап килгән юғары уҡыу йортон һайлай һәм ошо йүнәлештә үҙ өҫтөндә эшләй ала. Һәр йыл өс профиль буйынса сығарылған өс синыф уҡыусыларының 90 проценттан ашыуы юғары уҡыу йорттарына инеүе лә быны раҫлай. "Заманса менеджментта сифатлы кадрҙар сәйәсәте лә ҙур роль уйнай", - ти Гөлназ Ғафир ҡыҙы. Шуға ла гимназияға уҡытыусылар конкурс аша һайлап алына, улар заман менән бергә атлаһын өсөн белемен камиллаштырып тора, төрлө конкурстарҙа ҡатнаша, үҙен ижади йәһәттән күрһәтеү өсөн бар шарттар тыуҙырыла.

Алғараҡ китеп әйткәндә, дискуссия майҙансығына йыйылған коллегаларына мөрәжәғәт итеп, Гөлназ Ғафир ҡыҙы яңы тәғәйенләнгән 2-се, 140-сы, 48-се башҡорт гимназия-лицейҙары директорҙары өсөн оҫталыҡ дәресе биреү зарурлығын һәм тәү сиратта быны документация менән эшләүҙән башларға кәрәклекте билдәләне. "Милли белем биреү учреждениелары директорҙары документация менән дөрөҫ эшләргә өйрәнһә - ҡалғаны уның үҙенән тора", - тине тәжрибәле етәксе.

***Район кимәлендәге милли мәктәп булыуға ҡарамаҫтан, Ғафури районының Нияз Мәжитов исемендәге Красноусол башҡорт гимназияһы ҡала белем усаҡтары менән ярышырлыҡ учреждение.*** Әлбиттә, уның техник һәм башҡа тәьминәте, бәлки, күпкә ҡайтышыраҡтыр, әммә эш сифаты буйынса ул ҡалаларҙың белем биреү учреждениеларына саҡырыу ташлай ала. Күптән түгел генә милли мәктәп булараҡ юғалыу һәм бөтөү алдында торған ойошма бөгөн - директор итеп Гөлсөм Монасипова тәғәйенләнгәс, үҙенең икенсе һулышын ала. Бында белем биреү һәм тәрбиә процесында уҡыусыларҙың шәхесен үҫтереүгә йүнәлтелгән алымдар ҡулланалар. Бала күңеленә нисек юл һалырға? Нисек милли рухлы, белемле, илебеҙгә, республикабыҙға лайыҡлы, шәхес тәрбиәләргә? Гөлсөм Мөбәрәк ҡыҙының сығышы тап ошо һорауҙарға яуап бирҙе лә инде. Бөгөн Нияз Мәжитов исемендәге Красноусол башҡорт гимназия-интернаты белем усағының матди-техник базаһын нығытыу, балаларҙы милли рухта тәрбиәләү, уларҙы оло тормош юлына әҙерлекле итеп сығарыу, уҡыу һәм белем сифатын күтәреү, уҡытыусыларға һөнәри белемдәрен арттырыу һәм уңышлы эшләү өсөн уңайлыҡтар тыуҙырыу, уҡыусыларҙы Н. Мәжитов исеменә лайыҡлы итеп белем һәм тәрбиә алыуға әйҙәү маҡсаттары менән янып йәшәй.

Уҡыусыларҙың шәхесен үҫтереүгә йүнәлтелгән алымдарҙың принциптарына килгәндә, "Һәр уҡыусы мәктәп партаһы артында ултырғанда үҙенең һәләттәрен асыу өсөн бар мөмкинлектәрҙе ҡулланырға тейеш. Ә мөмкинлектәр булдырыу - ул туранан-тура директорҙар яуаплылығында. Хәҙер түңәрәктәрҙең йә дәрестән тыш белем биреү сәғәттәренең йөкмәткеһе бик киң. Ауыл мәктәбе һаналған мәктәптәрҙә лә робототехника, виртуаль шлемдар өсөн программалар төҙөү, квадрокоптерҙың мөмкинлектәрен файҙаланыу һымаҡ йүнәлештәр уҡыусыларыбыҙҙың белем офоҡтарын киңәйтә, уларҙың мөмкинлектәрен ҡаланыҡына яҡынайта", - ти Гөлсөм Мөбәрәк ҡыҙы. Шулай уҡ ул уҡыусыларҙың теле ярлы тип зарланыуға ҡарағанда мәктәп телевидениеһын асыу уңышлыраҡ икәнен билдәләй - студияла шөғөлләнгән уҡыусыларҙың дикторлыҡ, сценарист, режиссер һәләттәре асыла, улар республика кимәлендә лә танылыу яулай бара: быйыл гимназияның "Тамыр селтәре" проектында үҙ номинацияһында 1-се урын яулауы ла быға асыҡ миҫал.

Спорт мөмкинлектәрен асыу, бейеү, вокал буйынса түңәрәктәрҙә шөғөлләнеү, "Һарыҡты кем ашаған" КВН командаһында сығыш яһау, сәсәндәр мәктәбендә һ.б. йүнәлешле эштәрҙә балаларҙың үҙҙәрен һынап ҡарауы уларҙы уҡыу йылдарында уҡ эшмәкәр, эҙләнеүсе, матурлыҡ тыуҙырыусы ижади шәхес булырға илһамландыра. Гимназия-интернаттың гимны, сувенир продукцияһы, өлгөлө традициялары, гәзите, музейы, үҙешмәкәр театры, үҙенә генә хас белем биреү һәм тәрбиә алымдары бар. "Гимназист сафына ҡабул итеү", "Президент һайлауы", "Өләсәйем күстәнәсе", "Һомай һылыуы", "Урал батыр вариҫтары" кеүе ҡыҙыҡлы саралар үтә, "Моң шишмәһе" йыллыҡ отчет концертын үткәреү матур йолаға әүерелгән. Мәктәптең стенаһы ла тәрбиәләргә тейеш, тигән күҙлектән сығып, гимназияның бер диуарына уңышлы шәхестәң 100 сифаты: моңло, дәртле, мәғәнәле, әҙәпле, әүҙем аңлы, аҡыллы, абруйлы һ.б. тип яҙып ҡуйыу ҙа уҡыусыларҙы уңышлы булыуға программалай, сөнки улар көн һайын ошо сифаттарҙы күреп, күҙ йүгертеп кенә үткәндә лә төпкө аң был мәғлүмәтте үҙенә һалып ҡуя. Хәҙерге заман мәктәбе алдына ла бит төп бурыстарҙың береһе итеп уңышҡа көйләнгән шәхес тәрбиәләү ҡуйыла.

Шулай уҡ сарала 84-се татар гимназияһы директоры Рауил Иҙрисов менән онлайн режимда Татарстан Республикаһының Арса районы Арса 6-сы дөйөм урта белем биреү мәктәбе вәкилдәре лә сығыш яһап, үҙҙәренең эш тәжрибәһе менән уртаҡлашты. Рауил Рифғәт улының сығышында бер мәл уйланырға мәжбүр итте: белем усағында башҡорттар бик күп булмаһа ла, уларға туған тел булараҡ башҡорт теле уҡытыла, әммә ата-әсәләр килеп, балаларына туған тел булараҡ башҡорт телен уҡытмауҙы һораған, ә икенсе көнөнә үк балалар үҙҙәре директорға инеп, башҡорт телен ҡалдырыуҙы үтенгән. Йәғни күп осраҡта баланың мәнфәғәтен иҫәпкә алмай, ата-әсәләр уларҙың яҙмышын үҙе теләгәнсә хәл итә, тиергә мөмкин. Тимәк, әлеге ваҡытта ата-әсәләр менән генә түгел, балалар менән дә эш алып барыу зарур. Бында инде М. Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһының төп девизы булған "Балаларҙы талантлы уҡытығыҙ - ул саҡта барыһы ла яҡшы буласаҡ" тигән һүҙҙәрҙе онотторға ярамай: әгәр уҡытыусы ижади ҡарашлы булһа һәм уҡыусылар күңеленә үтеп инә алһа, балалар үҙҙәре үк уның предметын һайлаясаҡ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бүлешкәндән аҡыл арта ғына, тигәндәй, баш ҡаланың милли белем биреү ойошмалары етәкселәренең ошондай форматта осрашыуы, фекер алышыуы, проблемаларын һәм ҡаҙаныштарын уртаға һалып һөйләшеүе күптән кәрәк ине. Дискуссия майҙансығындағы һөйләшеүҙең гәзит биттәренә инмәй ҡалған мәсьәләләре уның резолюцияһына индерелер һәм ҡыҙыҡһыныусы ойошмалар иғтибарына еткерелер тип өмөтләнәйек. Сөнки милли мәғариф - ул башҡорт йәки татар халҡына ғына хас проблема түгел. Һәм уны бергәләшеп, ҡулға-ҡул тотоношоп ҡына хәл итергә мөмкин.**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

СӘХИФӘНӘН

## МАЙМЫЛҒА ҠОЙРОҠ НИМӘГӘ?

Башҡорт дәүләт университетында уҡыған осор. Беҙ - яңы ғына асылған башҡорт филологияһы һәм журналистикаһы факультетының башҡорт, башҡорт-рус төркөмөндәге студенттар, дөйөм фәндәр буйынса ҡайһы бер дәрестәрҙә бергә ултырабыҙ. Профессор, факультет деканы Марат Вәли улы Зәйнуллин "Тел ғилеменә инеш" курсынан дәрес бирә. Дәрестәрҙе бик мауыҡтырғыс алып бара ине.

Ниндәй тема үтеүебеҙ хәтерҙә түгел - профессор бер мәл һорау бирә:

"Маймылға ҡойроҡ нимәгә кәрәк?" Йомробаштар, отличниктар яуап биреп тә өлгөрмәне, ултырған урындан: "Себенһәбен ҡыуыр өсөн", - тип ҡысҡырып та ебәрҙем. Уйламай һөйләгән - ауырымай үлгән, тигәндәре шулдыр. Аудитория гөж итеп ҡалды. Профессор үҙе лә түҙмәне - эй көлдө, эй көлдө. Етмәһә, Тәслимә менән беҙ алғы партала ултырабыҙ, професор беҙҙең алда баҫып тора. Кәүҙәгә елле генә ғалимыбыҙҙың ҡорһағы беҙ ултырған парта ситенә тейеп, ул көлгән һайын беҙҙе ҡуша ҡыбырлата. Беҙ ҡойроҡтан бигерәк шуға көләбеҙ...

Аҙаҡ Марат Вәли улының ауыҙы мине күреү менән йырылып китер булды - уның хәтерендә шулай маймыл ҡойроғо тураһындағы ваҡиға менән ҡалдым. Аҙаҡ минең диплом етәксем булды әле ул, йәне Йәннәттә булһын! Яңыраҡ бер төркөмдәшем ошо ҡойроҡ тураһындағы хәлде иҫкә төшөрҙө. Тағы бер көлөп алдыҡ.

Әйткәндәй, маймылға ҡойроҡ үҙенә күрә "руль" сүрәтендә хеҙмәт итеп, уның "бишенсе ҡулы" тип һанала икән - ҡойроғо аэродинамик сифаттарға эйә һәм маймылға осош процесын көйләргә, уны контролдә тоторға, бер ағастан икенсеһенә һикергәндә йәбешеп тә торорға булышлыҡ итә икән. Себенһәбен ҡыуыуға ла ярайҙыр, тик былары төп сифаты түгел...

## ТЕГЕНДӘ КҮРШЕМ КЕМ БУЛЫР?..

Өй һалыр ерҙе һайларҙан алда күршеңдең кем булырын һайла, тиҙәр. Был да дөрөҫтөр: күршеңдең кем һәм ниндәй булыуы - бәхетең йә бәхетһеҙлегең.

Күрше, тигәндән. Бер мәл Муса ғәләйһис-сәләм Хаҡ Тәғәләнән, минең йәннәттәге күршем кем булыр икән, тип һорай. Раббыбыҙ уға ожмахтағы күршеһенең фәлән-фәлән ҡалала йәшәүсе ит һатыусы булыуын әшкәртә. Бәйғәмбәрҙең ул кешене барып күргеһе килә һәм юлға сыға. Тегене барып тапҡас, был ниндәй кеше икән, тип, уны күҙәтә башлай. Иң аптырағаны шул була - көн буйы күҙәтһә лә, ит һатыусының ҡылған ғәмәлдәрен изге кешеләр башҡарған ғәмәлдәр рәтенә индереп булмағанын аңлай. Көн аҙағында ул ит һатыусыға бер мосафир сүрәтендә барып, ҡунып сығырға рөхсәт һорай. Тегеһе ризалаша.

Иртәгәһенә ит һатыусы бер киҫәк ит ҡырҡып ала ла, уны бешерергә һала. Ит бешеп сыҡҡас, Муса ғәләйһис-сәләмгә: "Һин яңғыҙың ғына ашай тор, әгәр минең менән ашайым, тиһәң, бер аҙ көтөргә тура киләсәк", - ти. Муса ғәләйһис-сәләм өй хужаһын көтөргә була. Теге ир, бешкән ит киҫәген алып, уны бик ваҡ өлөштәргә турап бөтә лә, бүлмәнең шаршау менән бүленгән мөйөшөнә инеп китә. Шаршау асылғас, бәйғәмбәр унда бик ҡарт һәм хәлһеҙ генә ҡарсыҡты күреп ҡала. Ҡарсыҡ ятҡан урынынан кеше ярҙамынан тыш тора ла алмай, ризыҡ ашарлыҡ тештәре лә булмай. Ит һатыусы һәр бәләкәй ит киҫәген яйлап һәм берәм-берәм теге ҡатынға ҡаптыра. Ҡарсыҡ, һәр өлөштө йотҡас, тешһеҙ ауыҙын мөйтәндәтеп, ирендәрен ҡыбырлатып, ниҙер шыбырҙай.

Ҡарсыҡты ашатҡас, итсе уның ятҡан урынын таҙарта, кейемдәрен алмаштыра. Шунан һуң ғына ҡунағының эргәһенә бара. "Был һинең әсәйеңме?"- тип һорай бәйғәмбәр. "Эйе", - була яуап. "Һәр ит киҫәген йотҡас, ул һиңә нимә әйтергә маташты ул?"- тип һорай Муса ғәләйһис-сәләм. "Ул, доға ҡылып, эй, Раббым, минең улым йәннәттә Муса ғәләйһис-сәләмдең күршеһе булһын ине, тип ялбарҙы", - ти итсе. Шунан Муса ғәләйһис-сәләм уға: "Әсәйеңә әйт - Хаҡ Тәғәлә уның доғаларын ҡабулдарҙан ҡылған инде", - ти...

Ошо тарихты уҡығас, күршем Ишбирҙе ағай иҫкә төштө - әсәһенең бер бөртөк кенә балаһы, Хәйривафа инәй (әсәһе) ҡартайып киткәс, эй матур итеп ҡараны - өҫтөн-башын тәрбиәләне, ашатып-эсерҙе. Инәй: "Мунсанан һуң, тырнаҡтарым йомшаҡ саҡта, эй матур итеп тырнаҡтарымды ҡырҡа Ишбирҙем", - тип рәхмәттәрен уҡып бөтә алмай ине...

Ә бит әсәһенең пенсияһын талап эсеп, эт ашамаҫ һүҙҙәр әйткән, хатта үҙен донъяға тыуҙырған ғәзизенә ҡул күтәргән кешеләрҙе лә күрһәтте тормош киноһы. Ниндәй генә һөнәр эйәһе булһаҡ та, тормош ниндәй генә битлек кейҙерһә лә, тегендә кемдең күршеһе булыуыбыҙ ғәзиз әсәйҙәребеҙҙең фатихаһына, ҡылған доғаһына бәйле шул. Муса ғәләйһис-сәләмдең ит һатыусы күршеһенеке һымаҡ...

**Айһылыу ҒАРИФУЛЛИНА.**

✓ Артабан төньяҡ-көнбайыш башҡорттары һөйләшен өйрәнеү буйынса эштәр оҙаҡҡа өҙөлөп ҡала, ә Таһир Байышев тарафынан баҫмаға ентекле әҙерләнгән ҡиммәтле фәнни отчет архив ҡаҙанышы булып ҡала.



ИНТЕРНЕТТАН



# ФИНИК ЙӘШӘРТӘ

■ Финиктарҙы күп итеп ашау ҡартайыу процесын яйлата, ти ғалимдар. Һынауҙарҙа ҡатнашыусылар ике ай дауамында даими рәүештә финик ашаған. Көнөнә 100 грамм ашарға кәрәк. Эскперимент барышында ҡатнашыусыларҙың ҡан составын күҙәткәндәр. Шулай уҡ бауыр һәм бөйөрҙәр эшенә иғтибар иткәндәр. Финиктар холестерин кимәлен 15 процентҡа түбәнәйткән. Был иһә йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәрен һәм атеросклерозды булдырмай. Шулай уҡ финиктар ҡандың әселәнеү, тимәк, организмдың ҡартайыу процесын яйлата. Был емеш артыҡ ауырлыҡҡа ла килтермәй.

■ Башҡаларға гел ярҙам итеү һыҙаты кешегә тыумыштан бирелә тигән фекерҙә Кентукки колледжы ғалимдары. Улар әйтеүенсә, альтруист кешеләрҙең баш мейеһе төҙөлөшө башҡаларҙыҡына оҡшамаған. Баш мейеһенең хис-тойғолар менән бәйле өлөшө күпкә әүҙемерәк. Быны тикшереп ҡарау маҡсаты менән ғалимдар үҙенең бөйөрөн ауырыуға биргән 19 кешенең һәм донор булыуға ҡырҡа ҡаршы 20 кешенең баш мейеһен тикшергән. Мейене сканерлаған мәлдә һәр ҡатнашыусы ҡурҡҡан, асыуланған һәм үҙен тыныс тотҡан кешеләрҙең фотоһын ҡараған. Альтруист донорҙарҙың баш мейеһе төҙөлөшөндә айырымлыҡтар булыуы асыҡланған, улар башҡаларҙың бәләһен нығыраҡ кисерә икән.

■ Насар кәйефтән ҡотолоу өсөн иртән 20 грамм ҡара шоколад ашарға була, тиҙәр. Тик ас ҡарынға татлы ризыҡ ашау дөрөҫ түгел. Ул ашҡаҙан аҫты биҙен әүҙемләштерәсәк, үҙ сиратында ул күп итеп инсулин бүлеп сығарасаҡ. Етмәһә, тәм-том аппетитты аса, 40 минуттан һуң ныҡ итеп асығасаҡһығыҙ. Ҡанда шәкәр кәмегәс, арыу һәм апатия барлыҡҡа килә. Шуға ла көндө дөрөҫ башлағыҙ - һыуҙа бешкән һоло бутҡаһы, көрпәле икмәк ашағыҙ. Киви, әфлисун, алма һәм башҡа татлы емештәр үҙәкте көйҙөрә. Емеш-еләкте иртәнге аштан һуң ашарға ярай. Был яңы һығылған һуттарға ла ҡағыла.

■ Көнсығыш Финляндия университеты ғалимдары витаминдар ҡабул итеү һәм өлкән йәштәге ҡатын-ҡыҙҙар араһындағы үлем осраҡтарының йышайыуы араһында бәйләнеш барлығын тикшереп ҡараған. Белгестәр билдәләүенсә, организмға ысынлап та витаминдар етешмәгәндә генә витаминдар эсеү файҙалы. Әгәр улар артыҡ икән, был ғүмер оҙайлығына йоғонто яһай. Һынауҙарҙа 50-60 йәшлек 38 мең ҡатын-ҡыҙ ҡатнашҡан. Уларҙың барыһы ла һуңғы 20 йылда яҡшы туҡланған, витаминдар ҙа ҡабул иткән. Мәғлүмәттәр күрһәтеүенсә, мультивитаминдарҙы, фолий кислотаһын, В6 витаминын, магний, цинк, баҡыр һәм тимерҙе артыҡ ҡулланыу үлем хәүефен булдыра. Ғалимдар әйтеүенсә, кальций, киреһенсә, был хәүефте түбәнәйтә. Шулай ҙа табип менән кәңәшләшеү мотлаҡ.

■ Америка ғалимдары раҫлауынса, баш мейеһе эшмәкәрлеге бер ҡасан да яйламай, киреһенсә, 50 йәштәр тирәһенә баш мейеһенең иң әүҙем мәле тура килә. Олоғая килә баш мейеһендә миелин күләме күтәрелә, ул нейрондар араһында сигналдар үтеүен тиҙләтә, тимәк, кешенең интеллектуаль һәләте яҡшыра.

АРҘАҠЛЫ ШӘХЕСТӘРЕБЕҘ

# БАШҠОРТ ДИАЛЕКТОЛОГИЯҺЫНЫҢ АТАҺЫ

## (Таһир Байышевтың тыуыуына 135 йыл тулыуға ҡарата)

**Августа билдәле башҡорт тел ғилеме, төрки телдәренең диалектология, лексикология, терминология һәм лексикография өлкәһендәге белгесе Таһир Ғәлләм улы Байышевтың тыуыуына 135 йыл тулды.**

Буласаҡ ғалим Өфө губернаһы Златоуст өйәҙендә, хәҙерге Башҡортостандың Дыуан районы Иҫке Хәлил ауылында тыуа. Тәүге белемде ауыл мәҙрәсәһендә ала, артабан рус-башҡорт мәктәбендә уҡый. Өс йыл ауыл мәҙрәсәһендә уҡытыусы булып эшләгәндән һуң, 1909 йылда Ватан алдындағы изге бурысын үтәргә китә, 9 йыл әрме хеҙмәтендә була. Иркутскиға артиллерия часына ебәрелә. Хәрби хеҙмәт уның өсөн рус телен һәм башҡа күп белемде өйрәнеү мәктәбе була. Ошонда уҡ хәрби фельдшерҙар мәктәбен тамамлай. Хәрби фельдшер булараҡ, Беренсе донъя һуғышында, рус армияһының Монголияға һәм Иранға хәрби походтарында ҡатнаша. Ошо ваҡыт эсендә ул шулай уҡ Польшала, Латвияла, Литвала, Германияла, Грузияла, Әзербайжанда булырға өлгөрә, ундағы тормош-көнкүреш, мәҙәниәт менән генә түгел, 40 халыҡтың теле менән дә таныша. Тыуған яғына әйләнеп ҡайтҡас, уҡытыусылыҡ эшенә тотона.

1925 йылда ул Мәскәүҙә үткән Уҡытыусыларҙың беренсе Бөтә Союз съезына делегат итеп һайлана. Саранан ҡайтҡас, улыстар буйлап йөрөп, съезд ҡарарҙары менән таныштырып, халыҡ алдында сығыш яһай. Һуңынан уны Мәсәғүт кантоны халыҡ мәғарифы бүлегененең инспекторы итеп тәғәйенләйҙәр. Ярты йылдан һуң Таһир Ғәлләм улы Башҡорт АССР-ы Халыҡ мәғарифы комиссариатының инспекторы итеп тәғәйенләнә. Наркомпроста эшләгән ваҡытында яңы дәреслектәр эшләүҙә һәм тәржемә итеүҙә, лингвистик экспедицияларҙа әүҙем ҡатнаша.



Уҙған быуаттың 20-се йылдары уртаһынан Таһир Ғәлләм улы фәнни тикшеренеүҙәр менән етди шөғөлләнә башлай. 1931 йылдың көҙөндә К.А. Тимирязев исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия институтының (хәҙер - Башҡорт дәүләт университеты) башҡорт теле һәм әҙәбиәте бүлеге студенты булып китә. Юғары белемле белгес дипломы алғас, һуңынан Башҡортостандың М. Ғафури исемендәге Тел, әҙәбиәт һәм тарих институты итеп үҙгәртелгән Милли мәҙәниәт ғилми-тикшеренеү институтының тел секторы өлкән хеҙмәткәре булып эш башлай һәм бында 1957 йылға тиклем хеҙмәт итә.

Был хаҡта ул автобиографияһында: "Яңы милли мәҙәниәт яралған ғына ул йылдарҙа башҡорт кадрҙары бигерәк аҙ һанлы булды, мин универсаль: балалар әҙәбиәте, башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәреслектәре, тәбиғәтте өйрәнеү, агрономия һәм география буйынса автор һәм авторҙаш булдым. Әлбиттә, башҡорт теленә терминдарҙы ла үҙемә уйлап табырға тура килде. Һуңынан улар әҙәби тел нормаһына инеп китте", - тип яҙа.

Бөйөк Ватан һуғышы алдынан, 1940 йылда, Башҡортостан тарих, тел һәм әҙәбиәт ғилми-ғәмәли институты Н. К Дмитриев ҡатнашлығында икенсе лингвистик конференция үткәрә, унда башҡорт теленең диалект системаһы тураһында доклад буйынса фекер алышына. Көнсығыш, көньяҡ һәм көнбайыш диалекттарының булыуы тураһында тезис сығарыла.

1953 йылда Н.К. Дмитриевтың туранан-тура ярҙамында СССР Фәндәр академияһының Башҡортостан филиалы фәнни семинарҙа көнбайыш диалекты тураһындағы мәсьәләне ҡабат көн тәртибенә сығара. Тап ошо сарала төньяҡ-көнбайыш диалект башҡорт теленең өсөнсө диалекты тип таныла һәм уны өйрәнеүҙе башларға тәҡдим ителә. Был тема Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының ғилми-тикшеренеү планына индерелә. 1954 йылда республиканың Аҫҡын, Балтас, Борай һәм Яңауыл райондарына Таһир Байышев етәкселегендә беренсе диалектологик экспедиция ойошторола. Һөҙөмтәлә фонетика, грамматика, лексика буйынса бай материал туплана һәм "көнбайыш диалект башҡорт халыҡ һөйләш теленең айырылғыһыҙ өлөшө булып тора" тигән һығымта яһала. Әммә артабан төньяҡ-көнбайыш башҡорттары һөйләшен өйрәнеү буйынса эш-

ФӘҺЕМЛЕ ХИКӘЙӘТ

# БҮҘӘНӘ



Ҡошсоҡтарын үҙаллы тормошҡа осороп ебәрер мәл еткәс, бүҙәнә уларҙы эргәһенә йыйып ала һәм шулай ти: "Ҡәҙерле балаҡайҙарым, инде әсәйем ашарға нимә алып килер икән тип көтөр сағығыҙ үтте, ҙурайҙығыҙ, ҡанаттарығыҙ нығынды, ашарға үҙегеҙ таба алаһығыҙ. Мин һеҙгә, хушлашып, кәңәш кенә бирә алам. Нәсихәтемә ҡолаҡ һалығыҙ, шул саҡта иркенләп бейектә оса ла, ерҙә ризыҡ та таба алырһығыҙ. Ауырлыҡҡа тарығанда, тамаҡ табыр өсөн ижтиһат иткәндә, Аллаһы Тәғәлә биргән аҙына ла риза булығыҙ. Ә инде ҡайҙалыр өйөлөп ятҡан ем, һыу тулы һауыт күрһәгеҙ, берүк ул тирәгә яҡын юламағыҙ. Кеше тип аталғандар араһында ҡоштарға йәтмә ҡуйғандары бар. Улар күренеп торған берәй урынға күп итеп ем һибеп ҡуя, әгәр ҙә һеҙ шуны сүпләргә килһәгеҙ, ҡапҡанға эләктерәсәк, һеҙҙе тотоп алып бикләп ҡуясаҡ. Һеҙҙе ситлеккә тотоп, һыҡтауығыҙҙы тыңлап, кинәнеп ғүмер кисерәсәк. Үлгәнсегә тиклем шулай ыҙалаясаҡһығыҙ, йә булмаһа, салып, бешереп ашаясаҡ, йә булмаһа, һеҙгә икенсе бүҙәнәне һөслөтеп, һеҙҙе талаштырып, шунан тәм табасаҡ. Ныҡ итеп киҫәтәм, һыйлы урындарға яҡын юламағыҙ..."

Ошо өгөт-нәсихәттән һуң, инә бүҙәнә ҡошсоҡтарын осороп ебәрә. Әле бер урындан, әле икенсе урындан үҙенә саҡ-саҡ ашарға табып йөрөгән бер улы бер саҡ мул ғына өйөлөп ятҡан иген күреп ҡала, эргәһендә генә сарсаған тамаҡты сылатыр һыуы ла ултыра, етмәһә. Әсәһе әйткәнде иҫенә төшөрөп: "Ҡапҡан тигәне ошо булалыр, моғайын", - тип уйлай ҡошсоҡ. Шулай ҙа бөртөк кенә бойҙайҙы ҡапҡыһы килә: "Бер тапҡырҙан ғына ҡапҡанға эләкмәҫмен әле", - тип уйлай. Бойҙай тәмле булып сыға, ҡошсоҡ икенсе, өсөнсө тапҡыр үрелә... Дүртенсегә һуҙылғанда ситлек бикләнә лә ҡуя... Уғаса булмай, аусы килеп етә, бүҙәнәне эләктереп ала. "Үҙемде харап иттем бит..." - тип бахыр ҡошсоҡ ҡысҡырып ебәрә.

Уның һөйләшкәнен ишеткән аусы аптырап китә:

- Һин һөйләшә беләһеңме? - тип һорай ул.

- Беләм, хатта һинең мине нимә эшләтереңде лә беләм. Йәнә лә мин хикмәт эйәләренең өс нәсихәтен беләм. Әгәр ҙә мине ирекҡә ебәрһәң, улар кәңәшен һиңә лә әйтер инем.

"Бөткәнме ни донъяла бүҙәнә, быныһын ебәрһәм, икенсеһен тотормон әле", - тип уйлай аусы һәм ризалаша.

- Тәүге нәсихәтте усыңды яҙып, мине ебәргәс кенә, икенсеһен анау ағас ботағына барып ҡунғас, ә өсөнсөһөн осоп китешләй әйтермен, - ти бүҙәнә.

Аусы усын аса, бүҙәнә иркенләп ҡанаттарын яҙа һәм шулай ти:

- Бер ҡасан да юғалтҡан нәмәң өсөн ҡайғырма һәм, киткән дәүләтеңде кире ҡайтарам тип, ғауғаланып, сабыуланып-баҫтырып, намыҫыңды юғалтма. Киткән нәмә мәңгегә кит-

✓ *Кем тураһындалыр ғәйбәт һөйләйҙәр икән, ҡушылма. Берәй миҫал-хәбәр ишетһәң, уның аяттарға, хәҙистәргә тура килеүе-килмәүе тураһында уйлан. Ныҡ уйла, уға бәйле аяттарҙа, хәҙистәрҙә дәлил бармы, юҡмы?*



тәр оҙаҡҡа өҙөлөп ҡала, ә экспедицияның бөйөк фән эшмәкәре Таһир Байышев тарафынан баҫмаға ентекле әҙерләнгән ҡиммәтле фәнни отчет архив ҡаҙанышы булып ҡала һәм бары тик ярты быуаттан ашыу ваҡыт үткәс кенә донъя күрә.

Тарих биттәрен аҡтарып ҡараһаҡ, Таһир Байышевтың башҡорт теленең диалекттарын өйрәнеү буйынса 11 фәнни экспедицияла әүҙем ҡатнашыуын күрәбеҙ. Ул элекке Советтар Союзының башҡорттар йәшәгән барлыҡ төбәктәре буйынса тиерлек бай диалектологик материал йыя. Һуңынан 2500 биттән торған материал ентекле эшкәртелеп, системалаштырыла һәм аңлатма менән бирелә. Был эш ғалимға башҡорт теленең даилекттарын һәм һөйләштәрен төбөнә төшөп өйрәнеү, уларҙың таралыу сиген билдәләү һәм картаға индереү мөмкинлеген бирә. Оҙаҡ йылдарға һуҙылған тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһендә 1940 йылда башҡорт теленең диалекттары һәм һөйләштәре тураһында "Башҡорт диалекттарының әҙәби телгә мөнәсәбәте" тип аталған йыйылма хеҙмәт донъя күрә. Һуңынан ул филология фәндәре кандидаты ғилми дәрәжәһен алыу өсөн диссертация эше булараҡ Мәскәү дәүләт университетының төрки филологияһы кафедраһына тәҡдим ителә. Билдәле тәркиәтсе, башҡорт тел гилемен өйрәнеүсе Н.К. Дмитриев етәкселегендә башҡарылған был эштә Таһир Байышев башҡорт телендә өс диалект булыуын, башҡорттарҙың төньяҡ-көнбайыш диалектының үҙаллы, көнбайыш диалекты булыуын нигеҙләй. Уның был хеҙмәте 1955 йылда Мәскәү дәүләт университеты нәшриәтендә айырым китап булып баҫылып сыға һәм башҡорт тел ғилеме тармағында беренсе монографик тикшеренеү була. Билдәле диалектолог Нәжибә Мәкҫүтова билдәләүенсә, Таһир Байышевтың был хеҙмәте башҡорт диалектологияһы фәнен Бөтә Союз төркиәт аренаһына сығара.

Хеҙмәтендә Таһир Ғәлләм улы башҡорт диалекттары һәм һөйләштәрен классификациялай, уларҙың үҙенсәлектәрен һүрәтләй, таралыу территорияһын билдәләй, дөйөм лексик һәм морфологик үҙенсәлектәрен аныҡлай. Ғалим үҙе билдәләүенсә, лексик һәм синтаксик айырмалыҡтары һәм үҙенсәлектәре етерлек кимәлдә өйрәнелмәгән, улар тураһында материалдар бик аҙ, һәм был материалдар буйынса уларҙың дөйөм һүрәтләнешен яҙыуға тотоноп булмаған. Бындай хәл-торош авторҙы диалекттарҙың фонетик, морфологик, лексик айырмалыҡтарын яҙыуға, киләсәк өсөн уларҙың синтаксик айырмалыҡтарын яҙып ҡалдырырға мәжбүр итә лә инде.

Таһир Байышев дөрөҫ әйтә: һөйләш телендә фонетик һәм морфологик айырмалыҡтар һәр ерҙә лә асыҡ күренмәй, шуға уларҙың сиктәрен аныҡ билдәләү мөмкин түгел. Сик һыҙаттарындағы теге йәки был диалекттың үҙенсәлекле өндәре һәм аффикстары, гәҙәттә, тотороҡһоҙ ҡулланыла. Уларҙың береһенән икенсеһенә күсеүе һөйләш телендә даими рәүештә һәм һиҙелмәй генә бара. Мәҫәлән, h - с һәм ҫ фонетик үҙенсәлеген бер үк кеше бер үк һүҙҙә һ һәм ҫ итеп ҡуллана: "һыйыр" - "ҫыйыр" "һабын" - "ҫабын". Ә ҫ, ҙ һәм с булғанда фонетик үҙенсәлек сигендә ҫ - с, с - ч (йәки ш), ҙ - з менән сиратлаша йәки с, ч, з араулыҡ өндәре ҡулланыла. Фонетик үҙенсәлектәр осрашҡан урындарҙан ситтә был өндәр үҙ диалектында аныҡ әйтелә. Аффикстар менән дә шундай уҡ күренеш күҙәтелә.

Башҡорт теле диалекттарының өйрәнелмәүе ғалим алдына ҙур һәм ҡыҙыҡлы проблемалар ҡуя. Таһир Байышев башҡорт теленең төрки телдәре төркөмө араһындағы урынын билдәләй. Был эштең иң мөһим ҡаҙанышы булып ғалимдың башҡорт телендә көнсығыш, көньяҡ һәм төньяҡ-көнбайыш диалекттарының булыуын һәм уларға әй (һ-ҫ һөйләше), дим (ҫ һөйләше), һалйот (һ һөйләше), арғаяш (ҙ-ҫ һөйләше) төньяҡ-көнбайыш (с һөйләше), ҡариҙел (ҙ-з һөйләше), танып (ҙ һөйләше), урта һөйләш (п-т һөйләше) инеүен иҫбатлауы тора.

Таһир Байышевтың монографияһында башҡорт әҙәби теле мәсьәләләренә лә ҙур иғтибар бирелә, ул уның фонетик, морфологик үҙенсәлектәрен, лексик нормаһын һүрәтләй. Автор үҙе: "Әҙәби тел нормаһы нигеҙҙә әҙәби тел хеҙмәтләндергән барлыҡ башҡорттарҙың һүҙлек фонды һәм һөйләш теленең һүҙлек составына нигеҙләнә. Әҙәби тел һөйләш теле артынан бармай, ә уны ижади етәкләй - һөйләш теленең һәр һүҙе һәм терминын ул әҙәби эшкәртеүгә дусар итергә тейеш", - ти.

Ғалим Башҡорт теленең ентекле диалектологик картаһын эшләй, унда башҡорттар йәшәгән барлыҡ территория индерелә һәм ул профессор Сергей Иванович Руденко төҙөгән һәм "Башҡорттар" монографияһында баҫылып сыҡҡан башҡорттарҙың этнографик картаһын ҡабатлай. Билдәле ғалимдар С. И. Руденко, Н. К. Дмитриев бик йыш Т. Байышев хеҙмәттәренә мөрәжәғәт итә.

1964 йылда билдәле совет тел белгесе, СССР Фәндәр академияһының мөхбир ағзаһы, ул ваҡытта эмиграцияла булған Николай Николаевич Поппе Таһир Байышевтың концепцияһын раҫлап, Блумингтонда (АҠШ) инглиз телендә нәшер ителгән "Башҡорт грамматикаһы" ("Bashkir manual") китабында башҡорт телендә өс территориаль диалекттың булыуы тураһында яҙа һәм өсөнсө диалект тип төньяҡ-көнбайыш диалектты атай.

Тормош иптәше, башланғыс синыфтар уҡытыусыһы Мөшәрифә Ғиниәтуллa ҡыҙы менән дүрт ул тәрбиәләп үҫтерәләр: Әхәт Таһир улы Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнаша, полковник, "Баштелерадиобыттехника" асыҡ акционерҙар йәмғиәтенең генераль директоры, Сәғит Таһир улы - балет артисы, хәрби фельдшер, 1943 йылдың 16 июлендә һәләк була, Булат Таһир улы - техник фәндәр докторы, РФ-ның атҡаҙанған фән һәм техника эшмәкәре, РАЕН-дың почетлы академигы, почетлы нефтсе, Минтопэнергоның почетлы хеҙмәткәре, Марат Таһир улы - геологоразведчик. Улар хәҙер яҡты донъяла юҡ инде.

1974 йылдың 4 ноябрендә Таһир Байышев Өфөлә вафат була. Баш ҡаланың Октябрь районындағы Нуғай ҡасабаһында бер урамға уның исеме бирелгән. 2006 йылда, тыуыуына 120 йыл тулыу уңайынан ғалимдың иң билдәле "Башҡорт диалекттарының әҙәби телгә мөнәсәбәте" ғилми хеҙмәте ҡабаттан баҫылып сыға. Таһир Ғәлләм улы Байышев халыҡ хәтерендә изге, тәрбиәле кеше, ысын зыялы, ҙур аҡылға эйә ғалим, үҙенең бар ғүмерен туған башҡорт халҡының ихтыяжы өсөн көрәшеп үткәргән ысын патриот булып һаҡлана.

**Луиза СӘМСИТОВА,**
**филология фәндәре докторы.**

кән булыр. Күп кешеләр юғалтҡан дәүләтен табам, кире ҡайтарам тип, һаулығынан да, абруйынан да яҙа. Аллаһы Тәғәләгә тапшыр, Уға тәүәккәллә, сабыр бул һәм Аллаһы Тәғәлә һинә арттырып ҡайтарыр.

Ошоларҙы әйткәндән һуң ҡошсоҡ ағас ботағына барып ҡуна.

- Һеҙ - кешеләр. Аллаһы Тәғәлә һеҙгә аҡыл һәм аң биргән. Әгәр ҙә берәй һүҙ ишетһәң, уны аҡыл бизмәнендә үлсә, дөрөҫ икән, ҡабул итеп ал. "Фәлән ерҙә үгеҙ быҙаулаған икән," тигәнерәк буш хәбәр ишетһәң, ышанма. Әгәр ҙә берәй кеше тураһында насар һүҙ еткерһәләр, шундуҡ ысынға алма. "Дуҫым минең турала, ысынлап та, ғәйбәт һөйләгәнме, әллә был минең дуҫыма яла ягыумы?" - тип, Аллаһы Тәғәләнән бирелгән хикмәт бизмәнеңә һалып үлсә. Кем тураһындалыр ғәйбәт һөйләйҙәр икән, ҡушылма. Берәй миҫал-хәбәр ишетһәң, уның аяттарға, хәҙистәргә тура килеүе-килмәүе тураһында уйлан. Ныҡ уйла, уға бәйле аяттарҙа, хәҙистәрҙә дәлил бармы, юҡмы? Ер йөҙөндә буш хәбәр, сафсата бик күп булыр. Һәр ишеткән һүҙ нигеҙле һәм раҫланырлыҡ булһын, шунда ғына ышанырғамы, юҡмы икәнен аңларһың.

Ошо нәсихәтен еткергәндән аҙаҡ, бүҙәнә аусыны һынап ҡарамаҡ була.

- Эй, һунарсы, әгәр ҙә мине тотоп салған булһаң, эсемдән бик матур итеп ҡаймаланған йомортҡа ҙурлығындағы йәүһәрҙе тапҡан булыр инең. Уға тотош бер ҡаланы һатып ала алыр инең!

Был хәбәрҙе ишеткән аусы сәсен йолҡҡослар хәлгә етә.

- Ай, алйот мин, нишләп кенә шартыңа күндем һуң! Һине һуйып, йәүһәрле була инем бит! Аллаһ минә ниндәй ҙур байлыҡ биргән, ә мин уны үҙемдә алып ҡала алманым!

Һунарсы оҙаҡ ҡайғыра, ахырҙа, бер аҙ тынысланғандай була.

- Ҡуйһансы, хәҙер нишләргә... Улайһа, әйт өсөнсө нәсихәтенде.

Ныҡ уйға ҡалған, күңеле төшкән бүҙәнә хәҙер шулай ти:

- Нәсихәтте аңлай алмаған, һыһымта яһай белмәгән бер аңра бит һин! Миңә әсәм бер генә нәсихәт бирҙе, шул бер әйткәнде тыңламайынса, саҡ-саҡ үҙемде харап итмәнем. Ә һин баҫҡан урыныңдан да ҡуҙғалмайынса, бер түгел, ике нәсихәтте ишеттең! Мин һиңә: "Юғалтҡан нәмәң өсөн ҡайғырма", - тимәнемме ни? Ә һин ярты сәғәт буйы һыҡтайһың. Икенсенән, мин бит бүҙәнә! Миндә ҡайҙан булһын ти йәүһәр таш! Ундай ҙур йәүһәрҙе нисек йотайым да, нисек тамағым аша үтһен? Шул турала саҡ ҡына ла уйланманыңмы?

- Ярар инде, өсөнсө нәсихәтте әйт...

- Юҡ! Алйоттарға хикмәтле, аҡыллы кәңәш биреү - ваҡытты ғына исраф итеү!

Ысынлап та, алйоттарға нәсихәт биреүҙән фәтеүә юҡ, был ваҡытты ғына әрәм итеү була.

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА әҙерләне.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Ни өсөн ярлылар хәйерселәнә, ә байҙар тағы ла нығыраҡ байый?

Эверет колледжға уҡырға инә, әммә уны тамамлай алмай. Атаһы иң уңышлы йылдарҙа уның уҡыуына өлөшләтә түләү өсөн етерлек аҡса туплаған Кентуккия фермерының улы, университет тамамлағандан һуң ҡабат фермаға әйләнеп ҡайта. Юғары белем алып, ул тупаҫлана һәм үҙенең кемдәрҙәндер кәмерәк булыуына инана. Уның күңелендә был донъя байҙарға һәм ярлыларға бүленеүе, уға һәр саҡ ярлылар араһында ҡалырға яҙғанлығы тураһында ышаныс нығына. Күпмелер ваҡыт ул мәктәп автобусын йөрөтә, әммә бер ваҡыт спиртлы эсемлектәр эсеүе асыҡлана һәм уны эштән ебәрәләр. Шул ваҡытта ул барлыҡ аҡсаһын йыйып, ҡулланылған йөк машинаһы һатып ала һәм фермерҙарға йөк ташый башлай. Уның әсәһе вафат була, бер йылдан һуң атаһы ла яҡты донъя менән хушлаша. Хәҙер уның бар ваҡытын фермалағы эштәр ала һәм йөк ташыуын туҡтатырға мәжбүр була. Хәҙер Эвереттың эштәре нисек һуң? Уның хаҡында бер нәмә лә ишеткәнем юҡ. Хат яҙырға ла аҡсаһы етмәйҙер, тип уйлайым.

Ярлы кеше матди донъяһының гипноз тәьҫиренән тағы ла ярлылана. Кеше уларҙы еңеп сығырына ышанмай.

Бына Юджин. Ул Нью-Йорктың бай төбәге - Вестчестер округында донъяға килә. Уның атаһы, банк президенты, өйҙә һәр ваҡыт аҡса тураһында һөйләй. Ғаилә үҙе теләгән нәмәне һатып алыу мөмкинлегенә эйә. Юджинды һеңлеһе менән бер нисә тапҡыр сит илгә сәйәхәткә алып сығалар һәм иң яҡшы университетка урынлаштыралар.Уҡыу йортон тамамлағас, Юджин атаһын уның банкында эшләргә теләмәүе менән хафаландыра. Ул, әгәр теләһә, атаһының ярҙамынан тыш та бай йәшәйәсәгенә шикләнмәй. Шуға ла инвестиция фирмаһына эшкә урынлаша. Ул үҙенең оптимизмы арҡаһында бер-бер артлы клиенттар йәлеп итә. Уның һалған капиталы мөғжизә тыуҙыра. Әйтерһең, ул нимәгә тотонмаһын, шул нәмә алтынға әйләнә.Юджин өйләнеп, Лонг-айленд утрауында Саутгемптонда йәшәй башлай, ғаиләһендә биш бала тыуа. Атаһы ярҙам итергә тырышып ҡараһа ла, Юджин уның кәңәштәренә ҡолаҡ һалып бармай. Күптән түгел мин уның исемен 500 иң уңышлы кешеләр исемлегендә күрҙем.

Байҙар тағы ла нығыраҡ байый, сөнки матди тормошта сикләүҙәр булыуына ышанмай. Шулай итеп, ярлылыҡмы, байлыҡмы?

Друидтар бай була. Сөнки улар байлыҡты һайлай, һәм бер тапҡыр һайлағас, быны өсөн нимә эшләргә кәрәклекте белә. Улар бер-береһен өйрәтә, йыш ҡына башҡаларға ла үҙ ысулдарының серен аса.

Һәр кешегә уның ғаләмдәге урыны билдәле. Был - тормош башланғандан уҡ һалынған шәхес нигеҙе һәм ул ғүмер ахырынаса үҙгәрмәй. Ярлылар ярлы булып ҡала. Байҙар бай була. Кеше дуҫлыҡ, рәхәтлек, нимәлер алыу йәки аҡса кеүек байлыҡты үҙенә тарта ала. Тормоштағы киҫкен боролош - кемделер юғалтыу, айырылышыу, төрмәгә ултырыу - кешенең аң төбөндә ятҡан инаныһын теге йәки был яҡҡа үҙгәртергә мөмкин. Әгәр был үҙгәреш ыңғай яҡҡа булһа, уны аң асылыу йәки "икенсе тыуыу" тиҙәр. Японияла быны "сатори" тиерҙәр ине, ә Һиндостанда - "самадхи". Хатта тормоштағы иң ҡырҡа боролош та кешегә тәьҫир итеп, уны икенсе тормошҡа, ярлылыҡтан байлыҡҡа алып сыға алмай. Психологтарға кешеләрҙең үҙгәрештәргә ҡаршылашыуы билдәле. Был инертлыҡ, быға тиклем булған тормошҡа һөйөү кешеләр тарафынан яңыны хәүеф кеүек ҡабул итеүгә, уны үҙҙәренән ситкә этәргә тырышыуға килтерә.

Һеҙ улар кеүек түгел. Сөнки ошо аҙымдарҙы уҡыйһығыҙ. Тағы ла шуны иҫегеҙҙән сығармағыҙ, айыҡ аҡыллы кеше бер ваҡытта ла үҙенә нужа теләмәй, бары тик тормоштағы үҙ маҡсатын тормошҡа ашырыу өсөн ниндәйҙер аҙымдар яһай.Быны ул аҙымдар. Бер ниндәй тормош боролошо юҡ. Бары тик матур уйҙар.

**Роберт СТОУН.**
**(Дауамы бар).**

ВЫБОРЫ ЕДИНЫЙ ДЕНЬ ГОЛОСОВАНИЯ 19 СЕНТЯБРЯ 2021 ВЫБИРАЕМ ВМЕСТЕ!





Я врач-кардиолог. Всю жизнь я живу и работаю в Уфе.

Родилась я 17 мая 1961 года в семье служащих. Всегда мечтала о профессии врача, лечила в доме все игрушки, поэтому не раздумывая поступила в Башкирский государственный медицинский институт. В 1984 году окончила его с отличием и сразу была направлена в Городской кардиологический диспансер г.Уфы для прохождения интернатуры по терапии.

За 37 лет работы в кардиоцентре прошла все ступени - от врача-кардиолога до главного врача. В свободное время занимаюсь научными статьями и монографиями, именно это позволяет улучшить качество лечения больных.

Уделяю внимание общественной работе, с удовольствием встречаюсь с людьми, знакомлюсь с их проблемами и стараюсь по возможности им помогать.

Хочу, чтобы каждый уфимец был здоров, жил в комфортных условиях, с удовольствием ходил на работу и был уверен в завтрашнем дне.

**В своей программе я выступаю:**
**За физическое и духовное здоровье нации!**
**За здоровый образ жизни!**
**За уютную Республику!**
**За качество работы!**
**За заботу и поддержку социально незащищенных групп населения!**
**За доброту и любовь!**

Друзья! Приглашаю всех 17-19 сентября прийти на избирательные участки и поддержать меня на выборах в депутаты Горсовета г. Уфы. И не забудьте о своей безопасности, возьмите с собой маски!

Данный агитационный материал опубликован безвозмездно по результатам предоставления бесплатной печатной площади зарегистрированному кандидату в депутаты Совета городского округа город Уфа Республики Башкортостан пятого созыва по одномандатному избирательному округу **№5 Николаевой Ирине Евгеньевне** согласно статье 65 Кодекса РБ "О выборах"



**КПРФ-тан Өфө ҡалаһының 11-се һайлау округы буйынса депутатлыҡҡа кандидат**

**Мостафин Айвар Камил улы**




**Ҡәҙерле граждандар! Дуҫтар, был мөрәжәғәтем һеҙгә!**

2021 йылдың 19 сентябрендә илебеҙҙең киләсәк тормошон билдәләгән мөһим көн яҡынлаша. Бының өсөн халыҡтың үҙ аңына килеп, бер ҡайғыһыҙ йәшәүҙән туҡтап, барлыҡ аҡыл-көстәрен туплап берләшеүҙең мөһимлеген аңлауы зарур.

Ата-бабаларыбыҙ тормошобоҙҙоң матур, яҡты киләсәге өсөн көстәрен, эштәрен, хатта ғүмерҙәрен дә йәлләмәгән. Беҙҙең бергә алып барған был көрәш - дөрөҫлөк өсөн көрәш. Был ябай һәм ҡәҙимге кешеләр. Улар тураһында күп яҙмайҙар, юғары исемдәре һәм титулдары юҡ, чиндары аҙ. Әммә улар - дәүләт механизмының нигеҙе булараҡ, бөтә төр ғилми өлкәләрҙе, хужалыҡ тармаҡтарын һәм дә иҡтисадты үҙ иңдәрендә күтәреп тороусылар.

**Беҙ - бөйөк халыҡ, сөнки бөйөк ата-бабаларыбыҙҙың башҡарған эштәренә тоғробоҙ! Беҙҙең эшебеҙ уң һәм яҡты!**

Данный агитационный материал опубликован безвозмездно по результатам предоставления бесплатной печатной площади зарегистрированному кандидату в депутаты Совета городского округа город Уфа Республики Башкортостан пятого созыва по одномандатному избирательному округу **№11 Мустафину Айвару Камилевичу** согласно статье 65 Кодекса РБ "О выборах"



**АЛЕКСАНДР ДЕГТЕВ:**

**"Сделаем Уфу снова ЗЕЛЕНОЙ!"**

Родился 18 июня 1977 года, с 1 класса учился в 110 школе Советского района города Уфы. Окончил Башкирский государственный университет и Российскую Академию Народного Хозяйства и Государственной Службы при Президенте Российской Федерации.

В 1999 году начал работать на кафедре гражданского права и процесса Института права.

В 2008-2009 годах занимал должность ведущего референта в Государственной Думе Федерального Собрания РФ.

С 2010 года - директор ООО "Управляющая компания "Целевой капитал".

В 2011-2013 годах избирался заместителем председателя Общественной палаты РБ второго и третьего созывов.

В 2013 и в 2018 году избран депутатом Госсобрания - Курултая РБ.

Соучредитель АНО "Общественный комитет по развитию и поддержке образовательных проектов в РБ "Виктори", которая является организатором Республиканской олимпиады школьников на Кубок имени Ю.А.Гагарина и олимпиады по истории Великой Отечественной Войны.

В 2021 году зарегистрирован кандидатом в депутаты Совета городского округа город Уфа пятого созыва от Российской экологической партии "Зеленые".

Женат, имеет двоих сыновей.

**Одномандатный избирательный округ №17 Советский район город Уфа**

Данный агитационный материал опубликован безвозмездно по результатам предоставления бесплатной печатной площади зарегистрированному кандидату в депутаты Совета городского округа город Уфа Республики Башкортостан пятого созыва по одномандатному избирательному округу **№17 Дегтеву Александру Анатольевичу** согласно статье 65 Кодекса РБ "О выборах"












Данный агитационный материал опубликован безвозмездно по результатам предоставления бесплатной печатной площади зарегистрированному кандидату в депутаты Совета городского округа город Уфа Республики Башкортостан пятого созыва по одномандатному избирательному округу **№9 Гадееву Тимуру Леруновичу** согласно статье 65 Кодекса РБ "О выборах"




Данный агитационный материал опубликован безвозмездно по результатам предоставления бесплатной печатной площади зарегистрированному кандидату в депутаты Совета городского округа город Уфа Республики Башкортостан пятого созыва по одномандатному избирательному округу **№17 Зубко Александру Михайловичу** согласно статье 65 Кодекса РБ "О выборах"


*ЙӘШЕЛ ДАРЫУХАНА*

# ДЕГӘНӘКТӘЙ...



**Беҙгә сүп үләне һымаҡ ҡамасаулап, бимазалап ултырған иҫ киткес файҙалы үлән тураһында яҙып китмәксе булам. Дегәнәк! Үләндең файҙалы булмаған бер өлөшө лә юҡ. Һәр өлөшөнә ҡыҫҡаса ғына туҡталып китәйек әле.**

**Япрағы.** Япрағының үҙе лә, һуты ла файҙалы. Японияла уны махсус баҡсаларҙа үҫтереп, аш итеп бешерәләр, салат итеп йәш япраҡтарын ашайҙар. Ул япраҡтарҙа бик күп C витамины һәм файҙалы мәтдәләр бар. Беҙҙең дегәнәкте көрәк менән ҡаҙып ташлағанды, ярай әле, япондар күрмәй! Уның япраҡтарынан һут һығыуҙың бер генә лә ҡыйынлығы юҡ. Йәшел, матур япраҡтарын йыйып алып ҡайтаһың да һыуыҡ һыуға ике сәғәткә һалып ҡуяһың. Ҡаты, ҡалын ботаҡтарынан йомшаҡ япраҡтарын һыҙырып, аралап алаһың да, вак итеп турап, япраҡ бутҡаһы яһарға. Үткәргестән үткәрһәң дә ярай. Һут һыуытҡыста 3-4 көн тора ала. Кемдер ҡышҡылыҡҡа яһарға уйлаһа, 50х50 нисбәтендә спирт йәки бал менән бутайбыҙ.

**Нисек ҡулланырға?** Һыу ҡушып әҙерләгән һутҡа ярты стакан һыу өҫтәп, ашарҙан 30 минут алда көнөнә өс тапҡыр эсә башлайбыҙ. Ике-өс аҙнанан һуң ике-өс ҡалаҡҡа хәтле арттырырға була. Ә бер-ике аҙнанан бөйөрҙәге таштар ирей башлар, бауырҙан, үт ҡыуығынан торғонлоҡ китер, ашҡаҙан сәғәт һымаҡ эшләй башлар. Эсәктәрҙә беҙҙе көнө-төнө кимергән паразиттарға, бактерияларға көн бөтөр. Организм көс йыя. Сөнки дегәнәк япрағы иммунитетты ныҡ күтәрә. Уның составында организмдың иммунитеты өсөн яуап бирә торған C витамины күп.

**Дегәнәк орлоғо.** Уның орлоҡтарынан май яһайҙар. Ул майҙы яраларға, ауыртҡан быуындарға һөртәләр.

**Тамыры.** Тамырының файҙаһы ла ныҡ ҙур. Сентябрь - октябрь айҙарында тамырын ҡаҙып алып, һалҡын һыуҙа йыуып, тышын таҙартаһың. Шунан ҡояш төшмәй торған, елләп торған ерҙә киптерәһең. Ул тамырҙа нимә генә юҡ - ыҫмала, эфир майҙары, B төркөмө витаминдары, протеин, тимер, бор, калий, марганец, цинк. Ә уның составындағы алкалоид нәҡ бына рак күҙәнәктәрен үҫеүҙән туҡтата, уларҙы юҡ итә. Эс ҡатыуҙан файҙалы, бауыр һәм бөйөрҙө таҙарта, эсәктәрҙең файҙалы микрофлораһын тәьмин итә, ҡандың диабет сире ваҡытында шәкәрен кәметә. Составында калийҙың күп булыуы мейе эшмәкәрлеген, хәтерҙе яҡшырта. Бөгөнгө көндә йөрәк тамырҙарының тарайыуы, ҡыҫылыуы арҡаһында бик күп сирҙәр интектерә кешеләрҙе. Ә бына дегәнәк тамыры тамырҙарҙы таҙартып тороу көсөнә эйә, ул ҡан тамырҙарын һығылмалы яһай. Иң оптималь төнәтмә яһау өсөн әҙер ваҡланған тамырҙы бер стакан ҡайнар һыуҙа төнәтәһең. Көнөнә икегә бүлеп, ашарҙан утыҙ минут алда тәмләп эсәһең. Хатта рак сиренән диета менән бер рәттән шул тамыр төнәтмәһе эсеп, метастаздарҙан арынған һәм был ауырыуҙан тулыһынса ҡотолоусылар бар.

Әлбиттә, теләһә ҡайһы үләнде дауаланыу өсөн, иммунитетты күтәреү өсөн эскәндә организмда ниндәйҙер дәрәжәлә үҙгәрештәр башланырға, сирҙәр ҡуҙғалырға мөмкин. Шуның өсөн ундай көслө үләндәрҙе эскәндә бирән ҡорһаҡты тыйып торорға, ҡамыр, ит ризыҡтарын, файҙаһыҙ колбаса һәм тәмле ризыҡтарҙы кәметеү барыбыҙға ла яҡшы булыр. Киреһенсә тәнебеҙгә ярҙам итеп күберәк салаттар, йәшелсә аштары, емеш-еләктәр, файҙалы ризыҡтар ашаһаҡ ине. Шулай уҡ һәр үләндең кемгәлер ярауы-ярамауы бар, дауалаусы табиптар менән кәңәшләшеү зарур! Иң мөһиме - һәр дауалауҙы сама менән әҙләп башлап организмды күнектерергә, уның реакцияһын күҙәтергә, дозаны яйлап арттырырға икәнен онотмаҫҡа кәрәк.

**Зәүхиә НИЗАМОВА.**

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

**1443 һижри йыл.**

| Август - Сентябрь (Мөхәррәм) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 30 (21) дүшәмбе | 4:51 | 6:21 | 13:30 | 18:41 | 20:11 | 21:41 |
| 31 (22) шишәмбе | 4:53 | 6:23 | 13:30 | 18:38 | 20:08 | 21:38 |
| 1 (23) шаршамбы | 4:54 | 6:24 | 13:30 | 18:36 | 20:06 | 21:36 |
| 2 (24) кесе йома | 4:56 | 6:26 | 13:30 | 18:33 | 20:03 | 21:33 |
| 3 (25) йома | 4:58 | 6:28 | 13:30 | 18:31 | 20:01 | 21:31 |
| 4 (26) шәмбе | 5:00 | 6:30 | 13:30 | 18:28 | 19:58 | 21:28 |
| 5 (27) йәкшәмбе | 5:02 | 6:32 | 13:30 | 18:26 | 19:56 | 21:26 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*



Данный агитационный материал опубликован безвозмездно по результатам предоставления бесплатной печатной площади зарегистрированному кандидату в депутаты Совета городского округа город Уфа Республики Башкортостан пятого созыва по одномандатному избирательному округу **№8 Хромец Артуру Леонидовичу** согласно статье 65 Кодекса РБ "О выборах"




**Ульмутаев Ильдус Наилевич**

Я, Ульмутаев Ильдус Наилевич, кандидат в депутаты в городской Совет г. Уфы от избирательного округа №1 от партии КПРФ.

Родился 8 мая 1977 года в Кармаскалинском районе в деревне Бакчалы. Женат, отец двоих детей. Увлекаюсь волейболом.

В 1997 году окончил Стерлитамаский совхоз-техникум . В 1997 - 1999 годах работал ветеринарным фельдшерем. С 1999 по 2002 год работал в ГТРК "Башкортостан". С 2002 г. по сегодняшний день работаю в сфере строительства.

В 2019 г. избран депутатом Зубовского сельского совета. Являюсь студентом БАГСУ .

**Моя мечта: новейшая медицина должна быть доступной для всех, пенсионеры должны получать достойную пенсию!**

Данный агитационный материал опубликован безвозмездно по результатам предоставления бесплатной печатной площади зарегистрированному кандидату в депутаты Совета городского округа город Уфа Республики Башкортостан пятого созыва по одномандатному избирательному округу **№1 Ульмутаеву Ильдусу Наилевичу** согласно статье 65 Кодекса РБ "О выборах"



Данный агитационный материал опубликован безвозмездно по результатам предоставления бесплатной печатной площади зарегистрированному кандидату в депутаты Совета городского округа город Уфа Республики Башкортостан пятого созыва по одномандатному избирательному округу **№7 Салихову Валерию Мухаматнуровичу** согласно статье 65 Кодекса РБ "О выборах"




**"Уңайлы һәм бөхтә район - уңышлы ҡала нигеҙе!" - Өфө ҡалаһы Советына депутатлыҡҡа кандидат Ольга Шевнинаның девизы.**

Ольга Вячеслав ҡыҙы баш ҡалала тыуып үҫкән һәм депутатлыҡҡа ла тыуған Ленин районынан дәғүә итә.

Ольга Шевнина Өфөнө үҫтереүгә тос өлөш индерә. Уның башланғысы менән мөмкинлектәре сикләнгәндәрҙе бушлай йөрөтөүсе социаль такси барлыҡҡа килде. Мәктәптәрҙә йыл да уҙғарылған толерантлыҡ дәрестәре лә Ольга Шевнина тәкдиме менән индерелде.

Ольга Вячеслав ҡыҙы Бөтә Рәсәй һаңғырауҙар йәмғиәтенең Башҡортостан бүлеген етәкләй.

"Үҙебеҙ йәшәгән ҡаланың бар проблемаларын, халыҡты борсоған мәсьәләләрҙе үҙемдә татыйым һәм дөйөм йортобоҙҙо бөхтә итеү беҙҙең хәлдән килә" - ти ул.

Беҙҙең Ленин районы баш ҡалабыҙҙың йөрәге һәм башҡаларға эталон булһын өсөн барыһын да эшләргә әҙермен, ти Ольга Шевнина.

Данный агитационный материал опубликован безвозмездно по результатам предоставления бесплатной печатной площади зарегистрированному кандидату в депутаты Совета городского округа город Уфа Республики Башкортостан пятого созыва по одномандатному избирательному округу **№8 Шевниной Ольге Вячеславовне** согласно статье 65 Кодекса РБ "О выборах"



**МАРАТ ВАСИМОВ**

Кандидат в депутаты Совета городского округа город Уфа, заслуженный строитель РБ, почётный строитель РФ. Родился в деревне Ялангачево Балтачевского района в большой семье, где воспитывались пятеро детей. За 35 лет работы в строительстве прошёл путь от мастера до руководителя крупного строительного предприятия.

- Какой город мы оставим своим детям и внукам? Выбирая депутата, мы выбираем человека, который будет защищать наши приоритеты.

Это тёплые дома, чистые дворы и парки. Это новые школы и дороги, доступный спорт и творчество.

Никогда нельзя успокаиваться, если можно что-то сделать лучше! Делом всей моей жизни стало приносить пользу людям.

У нас есть все возможности, когда есть желание и вера друг в друга. И в свои силы!

Данный агитационный материал опубликован безвозмездно по результатам предоставления бесплатной печатной площади зарегистрированному кандидату в депутаты Совета городского округа город Уфа Республики Башкортостан пятого созыва по одномандатному избирательному округу **№1 Васимову Марату Васфиевичу** согласно статье 65 Кодекса РБ "О выборах"



Данный агитационный материал опубликован безвозмездно по результатам предоставления бесплатной печатной площади зарегистрированному кандидату в депутаты Совета городского округа город Уфа Республики Башкортостан пятого созыва по одномандатному избирательному округу **№ 18 Филимонову Илье Сергеевичу** согласно статье 65 Кодекса РБ "О выборах"



Данный агитационный материал опубликован безвозмездно по результатам предоставления бесплатной печатной площади зарегистрированному кандидату в депутаты Совета городского округа город Уфа Республики Башкортостан пятого созыва по одномандатному избирательному округу **№12 Иванову Дмитрию Владимировичу** согласно статье 65 Кодекса РБ "О выборах"

*КЕМ АЛЫҠ?*

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!



**Сәмле, ғәмле, фекерле милләттәштәр өсөн йән аҙығы, серҙәш, ҡорҙаш һәм фекерҙәш булған "Киске Өфө" гәзитен уҡыусыларға ифрат шатбыҙ һәм рәхмәтлебеҙ. Һеҙ - иң аңлылар, вайымлылар, илһөйәрҙәр, телһөйәрҙәр. Гәзитебеҙҙе, үҙе бүләк ул, тип ҡабул итһәгеҙ ҙә, һәр яҙылыу кампанияһы мәлендә һеҙгә даими рәүештә дәртләндереү, бүләкләү саралары ла тәҡдим итеп тороуыбыҙҙы беләһегеҙ. Шулай итеп, 2021 йылдың икенсе яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан "Китап отоу бәхете" тейгән уҡыусыларыбыҙҙы атап китәбеҙ:**

Федоровка районы Бала Сытырман ауылынан Р. Исмәғилова - **Басир Мәһәҙиевтың "Хазиналы тауҙарым"**;

Әлшәй районы Ҡыпсаҡ-Асҡар ауылынан М. Шәйхетдинова, Әбйәлил районы Салауат ауылынан М. Ноғаманова, Ташбулат ауылынан Нәркәс Нурғәлина, Дыуан районы Иҫке Хәлил ауылынан З. Низамова, Дәүләкән районы Чапай ауылынан Илдуса Лотфрахманова, Муса ауылынан Сәлиха Фәхретдинова, Йылайыр районы Юлдыбай ауылынан Ш. Нәҙерғолова, Федоровка районы Бала Сытырман ауылынан Т. Ҡаранаева, Ғафури районы Ибраһим ауылынан Фәниә Ғәлиуллина, Бүздәк районы Ҡаңны Төркәй ауылынан Мәхмүзә Шәғәлиева, Архангел районы Тәүәкәс ауылынан Роза Ғәббәсова - **"Башҡортса дини календарь"**;

Стәрлебаш районы Стәрлебаш ауылынан М. Баһаутдинова, Күгәрсен районы Яҡшымбәт ауылынан Альмира Аллағыуатова, Көйөргәҙе районы Ермолаево ауылынан Люциә Ҡәюпова, Хәйбулла районы Садовый ауылынан Вәлимә Шаматова, Учалы районы Ғәлиәхмәр ауылынан Алһыу Ғәлина - **"Шайхзада Бабич. Жизнь и творчество"**;

Баймаҡ районы Ишмырҙа ауылынан Рауил Ҡотлоғужин - **Спартак Ильясовтың "Ҡағанат вариҫтары"**;

Бөрйән районы Әтек ауылынан Х. Ибраһимов, Баймаҡ районы Үрге Мәмбәт ауылынан Гөлдәр Юнысова - **"Башҡорт халыҡ ижады" Х том**;

Әбйәлил районы Ҡужан ауылынан Ғәйфулла Хәйруллин, Баймаҡ районы Өмөтбай ауылынан Гөлсәсәк Һибәтуллина - **Рәшит Шәкүрҙең "Ерҙең тере хәтере"**;

Мәсетле районы Ләмәҙтамаҡ ауылынан Л. Ғатауллина, Ейәнсура районы Үтәғол ауылынан Фирүзә Усманова - **Салауат Әбүзәровтың "Ғәмәл дәфтәре"**;

Белорет районы Белорет ҡалаһынан Гөлназ Байрамғәлина, Шишмә районы Дурасов ауылынан Ф. Миңлеғәлина, Учалы районы Ғәлиәхмәр ауылынан Р. Ғибаҙуллина - **Шәйехзада Бабичтың "Ал да сәс нур халҡыңа"**;

Миәкә районы Шатмантамаҡ ауылынан Х. Ҡәюмов, Ишембай ҡалаһынан Гөлсирә Йәғәфәрова - **Рәшит Шәкүрҙең "Йөрәктәге яҙмалар"**;

Күмертау ҡалаһынан Р. Искәндәрова, Баймаҡ районы Йәрмөхәмәт ауылынан Зөлфиә Мөкминова, Дыуан районы Арый ауылынан З. Байтуллина, Миәкә районы Илсеғол ауылынан Гүзәл Ниғмәтуллина, Федоровка районы Бала Сытырман ауылынан Б. Кәримова, Салауат районы Урмансы ауылынан Рәсимә Сафина - **"Мөхәммәт Мостафа. Пәйғәмбәрҙәрҙең йөҙөк ҡашы"**;

Стәрлебаш районы Шәкәр ауылынан Люциә Байназарова, Әбйәлил районы Ташбулат ауылынан Ишморат Әхтәмов, Ауырғазы районы Мораҙым ауылынан Фларис Ҡусҡаров, Баймаҡ районы Үрге Таулыҡай ауылынан Заһирә Оморҙаҡова - **Ғайса Хөсәйеновтың "Әхмәтзәки Вәлиди Туған"**;

Баймаҡ районы Оло Басай ауылынан Камил Ҡасимов - **Ноғман Мусиндың "Алдар батыр"** китаптарына лайыҡ булды.

**Иҫкәрмә:** китаптарҙы Баймаҡ районынан (Баймаҡ почтампына ҡарай), Әбйәлил, Бөрйән, Учалы, Белорет райондарынан (Белорет почтампына ҡарай), Хәйбулла, Йылайыр райондарынан һәм Сибайҙан (Сибай почтампына ҡарай), Ейәнсура, Күгәрсен, Мәләүез, Көйөргәҙе (Мәләүез почтампына ҡарай), Салауат, Мәсетле, Дыуан, Ҡыйғы райондарынан булған бүләкләнеүселәр үҙҙәренең почтальондары аша алыр, ҡалған райондарҙың бүләкләнеүселәре балалары, туғандары, таныштары аша редакциянан алдырыу сараһын күрһен ине, тигән теләктә ҡалабыҙ.

- **Әйткәндәй, почталарҙа, киоскыларҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тарталар икән, йә яҙҙырған булып та, өйҙәрегеҙгә гәзитте алып килмәйҙәр икән, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итегеҙ.**
- **Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru. Беҙҙең электрон почта: kiskeufa@mail.ru**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

*Ҡатайҙар иһә быйыл унынсы тапҡыр йыйыла, улар - иң әүҙем ырыуҙарҙың береһе. Был йәһәттән ырыу башлығы Рәнис Алтынбаевтың тырышлығын билдәләргә кәрәк.*

АФАРИН!

# ҠАТАЙҘАР ЙЫЙЫН ЙЫЙҘЫ




**Белорет районының Сәрмән ауылында Ҡатай ырыуы йәштәренең X йыйыны үтте. Сара республикала иғлан ителгән Башҡорт тарихы, Һаулыҡ һәм әүҙем ғүмер оҙайлығы йылдарына арнап ойошторолдо.**

Бында республиканың төрлө мөйөштәренән, шулай уҡ Силәбе өлкәһенән ҡатай ырыуы вәкилдәре йыйылды (Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, ҡатайҙарҙың күпселеге Белорет районында йәшәй). Йыйын "Ҡатай һылыуы" конкурсынан башланып китте. Бәйгелә ырыу вәкилдәре йәшәгән төрлө төбәктәрҙән егермегә яҡын ҡыҙ ҡатнашыу теләге белдергән. Жюри ағзалары уларҙың тышҡы һылыулығын ғына түгел, эске матурлығын, хужабикә оҫталығын, үҙ ырыуы тарихын белеүҙәрен дә баһаланы.

Йыйын барышында Ҡатай улысы старшинаһы Ғимран Нуховҡа таҡташ асылды, Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусылар мемориалына сәскәләр һалынды. Сәрмән тыуған яҡты өйрәнеү музейы мөдире Рәмзиә Мамедова Ғимран Нухов хаҡында шуларҙы һөйләне: "Ғимран Нухов Ҡатай улысы, бигерәк тә Сәрмән ауылы өсөн бик күп эштәр башҡара. Ул идара иткән ваҡытта Сәрмәндә ун биш урынлыҡ дауахана, ике класлы рус-башҡорт мәктәбе асыла. 1900 йылда һалынған улыс идаралығы йорто беҙҙең көндәргә тиклем һаҡланып ҡалған. 1919 йылда асылған балалар өсөн приютта Башҡортостандың халыҡ артисы Арыҫлан Мөбәрәков, яҙыусы Мөхәтдин Тажи тәрбиәләнә. Әле был йортта мәсет урынлашҡан".

Артабан саралар төп майҙанда - Сәрмән ауылы эргәһендәге яланда башланды. Байрамды асып, Андрей Иванюта Белорет районының төп ҡатай биләмәһе булыуын билдәләне. "Миненсә, ҡатай ырыуы иң әүҙем, иң татыу, башҡалар уларҙан өлгө алырлыҡ башҡорт ырыуылыр. Беҙҙең көс - берҙәмлектә, дуҫ һәм татыу булыуҙа", - тип билдәләне район башлығы.

Йыйында ҡатнашыусыларҙы республика Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе урынбаҫары, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Президиумы рәйесе Эльвира Айытҡолова ла сәләмләне: "Быйыл Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡорт тарихы йылы тип иғлан иткәйне, - тине ул. - Республика буйлап ырыуҙар йыйындары, шәжәрә байрамдары ойошторола, уларҙа халҡыбыҙҙың тарихы барлана, үҫеп килеүсе быуынға еткерелә. Һуңғы йылдарҙа тарихты күсереп яҙырға тырышыу, илебеҙҙең ҡаҙаныштарын инҡар итергә тырышыу күренештәре йышайҙы. Шуға ла йәштәр иленең, халҡының үткәнен, үҙ тамырҙарын белергә, уны һаҡларға тейеш. Ҡатайҙар иһә быйыл унынсы тапҡыр йыйыла, улар - иң әүҙем ырыуҙарҙың береһе. Был йәһәттән ырыу башлығы Рәнис Алтынбаевтың тырышлығын билдәләргә кәрәк. Тағы ла шуны әйтергә теләйем, милләттәштәребеҙ тарихын ғына түгел, телен дә белһен һәм һаҡлаһын ине".

Республиканың мәҙәниәт министры урынбаҫары, Ҡатай ырыуы башлығы Рәнис Алтынбаев ырыу йыйыны тарихы менән ҡыҫҡаса таныштырып үтте. "Ҡатай йәштәре йыйыны йыл һайын бер төбәктә уҙғарыла. Ике йыл элек ул Ҡыйғы районында үтте, эстафетаны Балаҡатай алды. Былтыр пандемия сәбәпле тулы кимәлдә йыйылып булманы, сара онлайн рәүештә үтте һәм эстафета Сәрмән ауылына тапшырылды. Әйтергә кәрәк, беҙҙең йыйындарҙа Таш күтәреү, Ҡатай көрәше кеүек беҙҙең яҡтарға ғына хас спорт ярыштары тергеҙелде. Элек гер булмаған бит, шуға батырҙар таш күтәреп көс һынашҡан. Ҡатай көрәше иһә һыбай килеш көрәшеү, ярышташты атынан һөйрәп йә этеп төшөрөү. Бик ҡыҙыҡ һәм мауыҡтырғыс тамаша", - тип һөйләне Рәнис Алтынбаев.

Ҡатай йәштәре йыйынын Силәбе өлкәһенең Ҡоншаҡ районы ҡабул итеп алды.

## Ҡ О Т Л А Й Б Ы Ҙ !



Хөрмәтле **Айгөл һәм Рәмил,** һеҙҙе ғүмерегеҙҙең иҫтәлекле һәм тантаналы мәле - туй байрамығыҙ менән ҡайнар ҡотлайбыҙ.

Кеше тормошондағы иң мөһим бер ваҡиға ул - никахлы, ғаиләле булыу. Был мөһим ваҡиғаға ҙур мәғәнә, яуаплылыҡ һалынған. Ҡыҙ бала буласаҡ балаларына - атай, егет кеше үҙенә тоғро булыр йәр, мәңгелек юлдаш һайлай. Һәм һәр береһе тулы ҡанлы бәхет табырға, яңылышмаҫҡа, уңырға тырыша. Был - тәбиғи. Тормош шулай булырға, йәштәр өйләнешергә һәм йәшәүҙе дауам итергә тейеш тә. Һеҙҙең шундай етди ҡарарға килеүегеҙҙе хуплайбыҙ һәм тик иң изге теләктәребеҙҙе генә еткерәбеҙ. Бәхетле булығыҙ! Өмөттәрегеҙ аҡланһын! Хыялдарығыҙ тормошҡа ашһын! Һайлаған ишегеҙ, һөйгән йәрегеҙ һеҙгә был ғүмер юлында терәк-таяныс, бәхет инеше, тыныслыҡ ятыуы булһын. Өйөгөҙ түрендә бишектәр бәүелһен һәм һеҙ киләсәктә таянырлыҡ бала-сағалар үҫеп, кеше булһын. Һеҙҙең ғаиләгә кешеләр һоҡланһын, өлгө итеп ҡуйһындар. Өйөгөҙҙә ололар хөрмәт ителһен, бәләкәстәр тәрбиәләнһен, ә туғандар һәр ваҡыт түр үрендә булһын. Ырыҫ, бәрәкәт, муллыҡ, татыулыҡ һәм донъялар именлеге булһын ҡорған ояғыҙҙа! Ҡотлайбыҙ!

**Иң изге теләктәр менән, Ракаевтар ғаиләһе.**

Август айында тыуған көндәрен билдәләүсе уҡыусыларыбыҙ - **Ейәнсура районы** Юнай ауылынан Фәниә Вәлиева, **Архангел районы** Родинск ауылынан Әминә Әхтәмова, Убалар ауылынан Альмира Юламанова, **Баймаҡ районы** Үрге Йәйыҡбай ауылынан Ф. Хәсәнова, **Белорет районы** Манышты ауылынан Нурулла Миһранов, **Бүздәк районы** Ҡаңны Төркәй ауылынан Мәхмүзә Шәғәлиева, **Ҡыйғы районы** Ибрай ауылынан Хәлфетдин Шиһапов, Учалы районы Рысай ауылынан Хәтижә Сәғитова, **Өфө районы** Шамонин ауылынан Динара Ғүмәрова, **Ишембай районы** Аҙнай ауылынан Ғәрифә Заһиҙуллина, Рәфҡәт Хәйбуллин, Ғәлинур Сөләймәнов, **Ғафури районы** Красноусол ауылынан М. Собханғолова, **Сибай ҡалаһынан** Ғәзинур Ғәйнуллин, Рауил Ҡәйепҡолов, Гөлсинә Ниғмәтуллина, Айгөл Сәйфетдинова, Лариса Сафуанова, Дилүзә Таймасова һәм башҡаларҙы ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ! Барығыҙға ла ныҡлы һаулыҡ, бай бәхетле оҙон ғүмер, эштәрегеҙҙә уңыштар, яҡшы уй-ниәттәрегеҙҙең тормошҡа ашыуын, ҡыуаныс-шатлыҡтар теләйбеҙ!

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һыҕымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҺЫНАЛМАҒАН ФӘРЕШТӘНӘН...

## һыналған шайтан артыҡ

Байлыҡ - яҡшы хеҙмәтсе, әммә насар хужа.

**(Фрэнсис Бэкон).**

Киләсәктә ни буласағын юрауҙың иң яҡшы сараһы - үткәндәгене иҫкә төшөрөү.

**(Маркиз Галифакс).**

Уйҙарың менән - аҙсылыҡ, телмәрең менән күпселек араһында бул.

**(Бальтасар Грасиан).**

Күп кешеләр ғүмеренең иң матур мәлен насарҙы тағы ла насарайтыу өсөн файҙалана.

**(Жан Лабрюйер).**

Аҡыл көсөн әле булмаған бәхетһеҙлекте кәтөүгә йүнәлткәнсе, булған бәхетһеҙлекте лайыҡлы кисереүгә тотоноу файҙалыраҡ булыр ине.

**(Франсуа де Ларошфуко).**

Көнләшеү - шул уҡ мөхәббәт ул, тиеүселәр яңылыша. Эйе, көл уттан барлыҡҡа килгән кеүек, көнләшеү ҙә мөхәббәттән барлыҡҡа килә, ләкин... көл шул утты һүндерә лә бит.

**(Маргарита Наварская).**

Ҡатын-ҡыҙ беҙҙеке булғас та... беҙ уныҡы булыуҙан туҡтайбыҙ.

**(Мишель Монтень).**

Илле йәштә донъя һине арыта, алтмыш йәштә донъя һинән арый башлай.

**(Аксель Оксеншерна).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер ауылға бер аҡһаҡал күсеп килеп йәшәй башлай. Ул балаларҙы бик ярата һәм бөтөн буш ваҡытын ауыл балалары менән үткәрә, уларға бүләктәр өләшә. Тик ниңәлер аҡһаҡал бүләк иткән уйынсыҡтар бик нескә, тиҙ ватылыусан була. Шуға ла балалар, нисек кенә һаҡ ҡыланмаһын, аҡһаҡал биргән уйынсыҡтарҙы тиҙ арала ватып та ҡуя. Уйынсыҡтар ватылып, онталып тора, ҡарт шундай уҡ нескә уйынсыҡтарҙы яңынан бүләк итеп тора. Бер саҡ аҡһаҡал эргәһенә балаларҙың ата-әсәләре килә һәм уңайһыҙланып ҡына унан: "Һин беҙҙең балаларҙы яратаһың, уларға изгелек теләйһең. Һин бүләк иткән бүләктәр шул тиклем матур, балалар улар менән уйнамай булдыра алмай. Ләкин ул уйынсыҡтар тиҙ уҡ ватыла ла ҡуя. Ни өсөн һин уларға шундай бүләктәр һайлайһың?" - тип һорай. "Күпмелер ваҡыт үтер, - ти аҡһаҡал, - һеҙҙең балаларға кемдер үҙенең йөрәген бүләк итер. Минең бүләктәрем, бәлки, уларға йөрәк кеүек иң ҙур байлыҡты ҡәҙерләргә өйрәтер..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.
1 582218 911006 21035

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәррирләт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Сәрүәр СУРИНА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
БР «Республика Башкортостан» нәшриәт йорто ДУП филиалы - «Башҡортостан» республика нәшриәтендә баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
27 август 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан рекламалар һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тираҙы - 3250
Заказ - 989